✓ *Ғәҙеллек Алла ҡулында саҡта ғына изге булып ҡала, ә кеше ҡулында ул мәйеттәрҙең ҡабатлау таблицаһына әйләнә.*

*(М. Волошин).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9 - 15 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№28 (446)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бары менән байрам**



3

**Дини һабаҡтар өйрәнеү...**

ял итеү менән бергә атҡарылды



5

**Донъяңды ерҙәге ожмах ит...**

Бәҙәмшиндар кеүек



6

**Ир абруйы алдан йөрөй...**



8-9 Шундай фекерҙә өләсәй, әсәй, ейәнсәр

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Балаларҙы һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙы ғаиләләрҙә булып торған көс ҡулланыу күренештәренән яҡлау буйынса дәүләт кимәлендә саралар күреү мәсьәләһен күтәреүҙе урынлы тип иҫәпләйһегеҙме?

***Сәлиә МЫРҘАБАЕВА, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:*** Берләшкән милләттәр ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙәге һәр дүртенсе ғаиләлә теге йә был рәүешле көс ҡулланыу күренеше күҙәтелә. Рәсәйҙә лә, Башҡортостанда ла, ғаиләлә көс ҡулланыу һөҙөмтәһендә зыян күреүселәр буйынса махсус статистика алып барылмай. Бындай осраҡтарҙа ҡатындарҙы яҡлаусы закондар ҙа юҡ. Ғаиләлә көс ҡулланыу мотивтары һәм сәбәптәре донъяның төрлө илдәрендә төрлөсә, ә бына Рәсәйҙә уның төп сәбәбе - эскелек. Миңә был йәһәттән бик күп мөрәжәғәт итәләр. Минеңсә, мәсьәлә бик көнүҙәк һәм ул урынлы күтәрелә. Беҙҙең бурыс - ғаиләлә көс ҡулланыуҙы иҫкәртеү механизмын булдырыу, ә был үҙ сиратында хоҡуҡ һаҡлау һәм социаль ярҙам хеҙмәттәре көстәрен берләштереүгә ҡайтып ҡала. "Ғаиләлә көс ҡулланыуҙы иҫкәртеү тураһында"ғы закон проектын эшләр алдынан беҙ Ҡаҙағстанға барып, ошо өлкәлә уларҙың эш тәжрибәһен өйрәнеп ҡайттыҡ. Закон проектын әҙерләгәнгә 1 йыл булып килә инде, ул республикабыҙҙа төрлө кимәлдә тикшерелде, БР Йәмәғәт палатаһы, парламентарийҙар ҡарауынан һуң, төрлө тәҡдимдәр менән тулыландырылды. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары проектты ҡарауға сығарыр алдынан проблеманы төрлө яҡлап өйрәнеүҙе, уны комплекслы рәүештә хәл итеү кәрәклеген билдәләне. Был иһә ғаиләләге көс ҡулланыу күренештәрен иҫкәртеү сараларынан алып зыян күргән ҡатындар һәм балаларға анаҡ ярҙам күрһәтеү эштәрен үҙ эсенә ала. Ошо йүнәлештә төүге аҙымдар һала ла инде: Өфөлә, Белоретта һәм Сибайҙа эшләгән кризис үҙәктәрен башҡа төбәктәрҙә лә булдырыу ҡарала.

***Фәтхулла ЙӘҺҮҘИН, хеҙмәт ветераны:*** Урынлы ғына түгел, күптән кәрәкле мәсьәлә был! Дөрөҫөн әйткәндә, әлегәсә ҡатын-ҡыҙҙың ғаилә мөхитендәге хәле бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмай. Шундай ҡатындар бар: уларҙы мин эш, йөк атына оҡшатам, сөнки бөтә ғаилә йөгө - уның иңендә. Күптәре, был ысындан да шулай булырға тейеш, тип башын эйеп, көнө-төнө эшләп, эскесе йәки ҡаты бәғерле иренең яфалауҙарына түҙеп, ҡындәм генә йөктө һөйрәп тик бара. Хәҙер бик күбәйҙе бындай ғаиләләр. Үҙемдең күршеләр миҫалында ла күреп торам: ир кеше - өс бала атаһы- эшһеҙ өйҙә ята; эшләмәгәс, аҡсаһы ла юҡ, әммә үҙе көн дә иҫерек. Ҡайҙан ала инде ул аҡсаны? Әлбиттә, ике-өс урында иҙән йыуып, эштән бигерәк өйҙәге вампирҙың яфаларынан йонсоған меҫкен ҡатындан. Бирмәһә, талап, туҡмап таптырып ала. Әсәһен ҡурсырға маташҡан өсөн өлкән малайҙарына ла эләгә туҡмаҡ. Был ҡатын, тағы ла ире йоҙроғо эләгеүҙән ҡурҡып, милиция саҡыртмай. Бер шулай төн уртаһында бола ҡупҡас, тауышҡа сыҙай алмайынса, беҙ, күршеләре, милиция саҡыртҡайныҡ та, уның бер файҙаһы ла булманы. Иртәнсәк ҡайтып та ингән, аҙаҡ беҙгә янап, теш ҡайрап йөрөнө. Өҫтәүенә, үҙебеҙҙе милицияға саҡыртып, ниндәйҙер ҡағыҙ тултыртып, ғаризалар яҙҙырып, ҡул ҡуйҙыртып йонсоттолар. Шуға күрә беҙ хәҙер ҡул һелтәнек. Ғаиләһендә башбаштаҡланып, эсеп, ҡатынына, балаларына ҡул күтәреп, эшләмәй ятҡан әҙмәүерҙәй ирҙәргә Рәсәйҙә бер кемден дә көсө етмәй, тигән фекергә килдем.

**(Дауамы 2-се биттә).**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ҒАБДУЛЛА ИШАН СӘИДИ

## "Ғабдулла Сәиди минең рухи етәксем булды", ти Әхмәтзәки Вәлиди

**Был шәхес тураһында коммунистик режим осоронда рәсми һөйләү, яҙыуҙар булмаһа ла, уның исеме, рухы халыҡ күңеленән китмәне. Мин үҙем Ғабдулла ишан тураһында үҫмер сағымдан Хәжәр өләсәй (әсәйемдең әсәһе) һәм әсәйемдән ишетеп белә инем. Баҡтиһәң, Ғабдулла Сәйетбатталовтың оло (тәүге) ҡатыны Мәймүнә абыстай (1853 йылғы) минең олатай (әсәйемдең атаһы) Хажғәле Ҡотлозаман улы Байбулатовтың бер туған апаһы булған икән. Ошоларҙы ишеткәс, Ғабдулла ишан шәхесе менән ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килде һәм мәғлүмәт алыу маҡсатында Муллаҡай, Иҫәнбәт ауылдарының ревизия материалдарын өйрәнергә керештем.**

### Ғабдулланың ата-әсәһе

Ул материалдар түбәндәгеләрҙән ғибәрәт: Муллаҡай ауылының 1816 йылғы ревизия документтарында теркәлеүенсә, 49 йәшлек Нурмөхәмәт Бикмөхәмәтов һәм 36 йәшлек ҡатыны Фатиманың Сәйетбаттал, Ҡайҙар, Ҡаһарман, Мөстәҡим һәм Мөхәммәт исемле уландары булған. 1834 йылғы ревизия документтарында иһә Сәйетбаттал 30 йәштә, уның ҡатыны Шәмсийыһан 22 йәштә, улдары Хафиз 4 йәштә, ҡыҙҙары Кәримә 1 йәшлек, ә Ғабдулла донъяға килмәгән әле, ул 1836 йылда тыуасаҡ. 1859 йылғы ревизия ҡағыҙында Ғабдулла Сәйетбатталов 23 йәштә тип теркәлгән. Бүтән ғаилә ағзалары күрһәтелмәгән. Бының сәбәбе шунда: Муллаҡай ауылының имамы Сәйетбаттал Нурмөхәмәт улы 48 йәшендә 1848 йылда донъя ҡуя, был ваҡытта улы Ғабдулла ун икенсе йәше менән киткән була. Сәйетбаттал Нурмөхәмәт улы Стәрлетамаҡ өйәҙе Стәрлебаш мәҙрәсәһендә киң билдәле мөҙәрис Ниғмәтулла хәҙрәт мәҙрәсәһендә уҡып белем ала. Бында уның зирәк аҡылы, ғилем эстәүҙәге һәләтлеге асыҡ билдәләнә. Сәйетбатталдың Ниғмәтулла хәҙрәткә ҡулъяҙмаларын тейешле кимәлгә еткереп эшкәртеүҙә ярҙамлашыуы ла билдәле.

Уҡыуҙы тамамлағас, Сәйетбаттал хәлфә өйләнә һәм тыуған яғына Муллаҡайға ҡайтып мөғәллимлек итә. Ҡатыны Стәрлебаштан Шәмсийыһан исемле башҡорт ҡыҙы була. Уның атаһы Тойғон уҙаман Мифтахетдин Аҡмулланың яҡын туғаны булған. Был турала күренекле ғалим Рәшит Закир улы Шәкүров үҙенең "Звезда поэзии - Башкирский поэт-просветитель М. Акмулла" исемле китабында "Муллакаевские родственники Акмуллы" тигән баш аҫтында биргән. (Уфа, "Китап", 2006 г. стр. 172).

**(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).**



✓ *Ҡыйырһытылып йәшәүсе ҡатындарҙы һәм балаларҙы яҡлау - ул, тимәк, ғаилә мәнфәғәтен яҡлау, тигән һүҙ. Һис һүҙһеҙ, беҙгә ныҡлы, ышанcлы, һәр йәһәттән имен ғаиләләр кәрәк. Ғаилә - ил терәге.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ПОЛИЦИЯ ХЕҘМӘТКӘРҘӘРЕ... ябыҡ һәм һомғол булһын

**Рәсәй хоҡуҡ һаҡлау ойошмаларында эшләргә теләүселәр һиҙелерлек ябығырға тейеш. РФ эске эштәр министры Рәшит Нурғәлиев аттестация үтергә теләгән хеҙмәткәрҙәргә нәҡ ошондай, рәсми булмаған талап ҡуйҙы. Был һүҙҙәр, башлыса, ведомствоның ябай хеҙмәткәрҙәренә ҡағыла, сөнки полицияның барлыҡ тиерлек етәкселегә аттестация үтеп өлгөргән инде. Шуға күрә, хәҙер хоҡуҡ һаҡлаусыларҙың кейеме менән бер рәттән, тышҡы ҡиәфәте лә яңыса буласаҡ, тип көтөлә.**

Реформа барышында Эске эштәр министрлығы системаһынан ҡыҫҡартыласаҡ 20 процент хеҙмәткәр исемлегенә инергә теләмәүселәр тиҙ арала үҙҙәренең туҡланыу тәртибен үҙгәртергә һәм спорт менән шөғөлләнә башларға тейеш. Үҙҙәрен яңы рәүешкә килтереүгә милиция хеҙмәткәрҙәренә теүәл өс аҙна ваҡыт ҡалды, сөнки 1 августа аттестация тамамланасаҡ. Ләкин был сроктың күсерелеүе лә ихтимал. Бөгөнгө көнгә ЭЭМ етәкселегенең 312-һе аттестация үткән дә инде, тағы ла 29 кешенең эше "ҡаралыу өҫтөндә". 10 хеҙмәткәр шәхси рапортҡа ярашлы эштән бушатылған, 44-е - хаҡлы ялға ебәрелгән, 53-ө - штатты ҡыҫҡартыуға эләккән, 18-е Президент хакимиәте комиссияһы тарафынан хуплау үтмәгән.

"Әгәр ҙә хеҙмәткәр, ауырлығына һәм кәүҙә төҙөлөшөнә ҡарамай, полиция хеҙмәткәрҙәренә ҡуйылған талапҡа тура килә икән, аттестацияны уңышлы үтеүгә унның бөтә мөмкинлектәре лә бар", - ти министр Р.Нурғәлиев.

Эске эштәр министрлығында белдереүҙәренсә, "Полиция тураһында"ғы законда полиция хеҙмәткәрҙәренең тән һәм кәүҙә төҙөлөшөнә ҡағылған критерий бөтөнләй юҡ, ә министр үҙ һүҙҙәрен журналистар алдында түгел, ә шәхси әңгәмәлә генә еткергән.

Дәүләт Думаһы депутаты, милиция генерал-лейтенанты Александр Гуров аныҡлауынса, министр был һүҙҙәре менән аттестацияның яңы критерийы хаҡында түгел, ә бары тик иғтибарҙы милиция хеҙмәткәрҙәренә хас булған проблемаға ғына йүнәлткән.

Хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәренең тышҡы ҡиәфәтенә ҡарата төрлө ваҡыттарҙа төрлө Европа илдәрендә лә тәнҡит һүҙҙәре яңғыраны. Мәҫәлән, Грузияның Эске эштәр министрлығы етәксеһе Георгий Барамидзе бер нисә йыл элек илдә барған реформа барышында нәҡ ошондай проблемаға иғтибарын йүнәлткәйне. Унның һүҙҙәре иғтибарға алынып, реформа барышында 80 процент полиция хеҙмәткәре эшенән бушатылды һәм бөгөнгө көндә Грузия ҡалалары урамдарын башлыса йәш һәм һомғол буйлы хеҙмәткәрҙәр һаҡлай.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Балаларҙы һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙы ғаиләләрҙә булып торған көс ҡулланыу күренештәренән яҡлау буйынса дәүләт кимәлендә саралар күреү мәсьәләһен күтәреүҙе урынлы тип иҫәпләйһегеҙме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Галина МИХЛЯЕВА, БР Прокуратураһының балиғ булмағандар һәм йәштәр тураһындағы закондарҙың үтәлеүен күҙәтеү буйынса бүлек начальнигы:*** Ғаиләләрҙә көс ҡулланыу бер беҙҙең ил генә өсөн түгел, бөтә донья илдәренә лә хас күренеш. Ҡыйырһытылып йәшәүсе ҡатындарҙы һәм балаларҙы яҡлау - ул, тимәк, ғаилә мәнфәғәтен яҡлау, тигән һүҙ. Һис һүҙһеҙ, беҙгә ныҡлы, ышанcлы, һәр йәһәттән имен ғаиләләр кәрәк. Ғаилә - ил терәге тип юҡҡа әйтмәгән бит халыҡ. Ил көслө, имен булһын өсөн унда йәшәгән ғаиләләрҙә сәләмәт мөхит төп шарт, тип әйтер инем мин. Ғаиләләрҙә булып торған көнкүреш нигеҙендәге ыҙғыш-талаштарҙың төҙәтеп булмаҫлыҡ ҙур фажиғәләргә килтереү факттары бик күп, шуға күрә лә мин ҡатындар һәм балалар мәнфәғәтен закондар сығарыу кимәлендә яҡлауҙы бик ваҡытлы һәм көнүҙәк мәсьәлә тип иҫәпләйем. Мәсьәләнең шул яғы ла бар: ғаиләләге ыҙғыш-талаш йыш ҡына бәләкәй генә бер сәбәптән башланып, ул артабан ҡабарып китә. Бындай осраҡтарҙа ғаиләгә ваҡытында күрһәтелгән психологик ярҙам кризистан сығыуға булышлыҡ итә. Ваҡытында ярҙам күрһәтелгән хәлдә эш ҙурға ла барып етмәҫкә мөмкин бит, бына ниңә кәрәк беҙҙең ғаиләләргә тейешле психологик ярҙам күрһәтеүсе институттар. Быларҙың бөтәһе лә ҡабул ителәсәк законда сағылыш табыр тип ышанам.

***Лилиә ҒҮМӘРОВА, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары:*** Ошоға тиклем беҙҙең йәмғиәттә ғаиләләрҙә ҡылынған енәйәттәр һанға һуғылмай килде, ләкин уға артабан да күҙ йомоп ҡарарға ярамай. Үкенескә ҡаршы, Рәсәйҙә был мәсьәлә бер ҡасан да күтәрелгәне булманы бит. Хоҡуҡ һаҡлау органдары биргән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, аңлы рәүештә кеше үлтереүҙәрҙең өстән ике өлөшө ғаилә-көнкүреш сәбәптәре нигеҙендә ҡылына, шулай уҡ бөтә ауыр енәйәттәрҙең 40 процентҡа тиклем ғаиләләге низағтар нигеҙендә эшләнә. Бындай хәлгә РФ Енәйәт-процессуаль һәм Енәйәт кодексына үҙгәрештәр индереп кенә иғтибар иттертеп булыр, тип уйлайым. Рәсәй закондары нигеҙҙә ҡылынған енәйәттәрҙең эҙемтәләрен бөтөрөүгә йүнәлтелгән. Беҙҙең бурыс- ғаиләлә көс ҡулланыу осраҡтарын булдырмау һәм уны алдан иҫкәртеү. Был үҙ сиратында дәүләт органдары, хоҡуҡ һаҡлау һәм социаль ярҙам хеҙмәттәре көстәрен туплауға булышлыҡ итәсәк. Ахыр сиктә, ғаиләлә көс ҡулланыуҙан зыян күргәндәрҙе хоҡуҡи һәм социаль яҡлау тураһында закон федераль кимәлдә ҡабул ителергә тейеш.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"

**Мөхтәрәм йәмәғәт! Әйҙәгеҙ, фекер йөрөтәйек әле: мәғлүмәт сығанағын ниндәй маҡсат менән файҙалана кеше?**

● Мәғлүмәт сығанаҡтары, беренсенән, бөгөнгө ябай булмаған заманда баҙап ҡалған кешеләрҙең "Артабан ни эшләргә?" тигән һорауына, ғөмүмән, донъяла үҙ урынын, үҙ эшен, үҙ ашын, үҙ маҡсатын, үҙ шөғөлөн табырға ярҙам итер мең төрлө башҡа һорауҙарына яуап бирергә тейеш.

Икенсенән, теге йәки был һорауына яуап алһын, ул яуапты эшкә екһен өсөн кешенең иң тәүҙә донъяға үҙ ҡарашы, аңлауы булырға тейеш. Тимәк, мәғлүмәт сығанағының бурысы - унның аңын уятыу, аңлатыу, маҡсат ҡуйырға, уйландырырға өйрәтеү.

"Киске Өфө" аҙналыҡ баҫмаһы тап ошо бурысты йөкмәгән иңенә. Әйҙәгеҙ, уны уҡып, бергәләп уйлайыҡ, донъяуи һорауҙарға бергәләп яуап эҙләйек, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, аҡыл тирәйек, кәңәш-төңәш итәйек. Рухланайыҡ, сәмләнәйек.



● **Әйткәндәй**, кемдәр быйылғы йылдың икенсе ярты йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгән, улар 17 июлгә тиклем яҙыла ала һәм гәзитте августан алдыра башлаясаҡ. Шулай уҡ 1 июлдән 31 августа тиклем 2012 йылдың



беренсе ярты йыллығы өсөн быйылғы хаҡтар менән **(50665 индекслыһына 340 һум 92 тин, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) 370 һум 92 тин)** ваҡытынан алда матбуғат баҫмаларына яҙылыу башлана, тигән иғланыбыҙҙы ла иҫкә алып ҡуйығыҙ. Июлдә гәзитебеҙгә яҙылып, шулай уҡ 2012 йыл өсөн дә яҙылып ҡуйып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәргә бүләккә **5 "Ҡөрьән-Кәрим" һәм 20 "Дини календарь"** (2012 йыл өсөн) әҙерләп ҡуйғанбыҙ.

● Кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов Мәскәүҙә "Газпром- Межрегионгаз" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең генераль директоры Кирилл Селезнев менән осрашты. Билдәләнеүенсә, һуңғы йылдарҙа республикала 273 км оҙонлоғонда 12 ҡасаба-ара газ үткәргес һуҙылған. Был 40 тораҡ пункттын тәбиғи газға күсерергә мөмкинлек биргән. Әлеге осрашыуҙа быйыл республикала ҡасаба-ара газ үткәргестәрҙе өҫтәмә күләмдә төҙөү мөмкинлеге булыуы тураһында фекер әйтелгән.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре, Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлыҡтары, Әсәләр советы вәкилдәре ҡатнашҡан ултырыш булды. Вице-спикер Лилиә Ғүмәрова алып барған кәңәшмәлә һөйләшеү инвалидтарға һәм мөмкинлектәре сикләнгән балалар тәрбиәләгән ғаиләләргә ер участкалары бүлеү мәсьәләһе хаҡында барҙы. Әле республикала 13 меңгә яҡын инвалид бала бар. Ултырышта ҡатнашыусылар уларға социаль ярҙамдың адреслылығын көсәйтеү маҡсатҡа ярашлы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

✓2011-2015 йылдарға Башҡортостандың көньяҡ райондарын иҡтисади үҫтереүҙең урта сроклы комплекслы программаһы төбәктә машиналар эшләүҙе үҫтереүҙе лә күҙ уңында тота. Баймаҡ механика-ҡойоу заводын модернизациялау унның төп сараларының береһе булып тора. Яңыраҡ заводта БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, БР Хөкүмәте Аппараты етәксеһе Илшат Тажетдинов ҡатнашлығында марганецлы ҡорос цехына нигеҙ ташы һалыу тантанаһы үтте. План буйынса тәүге 150 тонна продукция 2012 йылдың июнендә ҡойолорға тейеш. Бында 75-тән ашыу яңы эш урыны булдырыласаҡ.

✓Башҡортостан парламентарийҙары был көндәрҙә Өфөгә эш сәфәре менән килгән Төрөк Республикаһы делегацияһы менән осрашты. Билдәләнеүенсә, һуңғы йылдарҙа ике ил араһында стратегик партнерлыҡты билдәләүсе ыңғай күренештәр күҙәтелә. Был осрашыуҙа ла төҙөлөш темаһы күтәрелде. 1992 йылдан алып төрөк төҙөүселәре Рәсәйҙә лә, республикала ла төҙөлөш өлкәһендә байтаҡ эштәр башҡарҙы. Был хеҙмәттәшлек артабан да дауам иттереләсәк. Төрөк инвесторҙарының республика менән ҡыҙыҡһыныуы бик юғары.

✓ *Дини тәғлимәттә иһә, йөрәктең урыны рух менән нәфсе араһында тип билдәләнә. Ошо урында ҡыҙыҡ ҡына һорау тыуа: халҡыбыҙ матди донъяға ынтылыуға бәйле нәфсеһен нисек еңә алған һуң? Әлбиттә, инаныу, иман менән.*

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# БАРЫ МЕНӘН БАЙРАМ



**Был әйтем тағы ла нәфсе, дөрөҫөрәге, унан ҡотолоу юлдары хаҡында. Уны гәзиттең 25-се һанында баҫылған "Дегәнәк араһындағы сәскәнән һаҡлан" тигән әйтемдең бер варианты итеп тә ҡарарға булалыр. Әммә бында тәүге әйтемгә һалынған фекер артабан үҫтерелә. Шулай ҙа "Бары менән байрам" тигән әйтемгә нәфсене тыйыу-ауыҙлыҡлау ғына түгел, булғаны менән ҡәнәғәт булыу, шөкөр итә белеү мәғәнәһе лә һалынған. Ошо юҫыҡта фекер йөрөтәйек, бер ыңғайҙа нәфсенең башҡа сифаттарына ла ҡараш һирпелдерәйек.**

Ысынлап та, халҡыбыҙ "Донъя малы - дуңғыҙ ҡаны", "Юҡтың аты юҡ", "Бары менән байрам" тип йәшәп өйрәнгән. Әммә был әйтемдәрҙе һис кенә лә"Үгеҙ үлһә - ит, арба ватылһа - утын" тигән мәҡәл менән бутарға ярамай. Бер яҡтан, һәр кем аҡса, донъя малы, матди донъя тип һаташып йәшәгән ошондай прагматик заман күҙлегенән ҡарағанда, "Бары менән байрам" тип йәшәү вайымһыҙлыҡ, ялҡаулыҡ, үҙ яҙмышына битарафлыҡ булып та аңлашылғандай. Әммә төпкәрәк төшөп ҡараһаң, был әйтемдәрҙең айырым кешене, айырым милләтте генә түгел, тотош кешелекте һаҡлап ҡалырҙай тормош программаһы, милли идея булырлыҡ йөкмәткеһе барлығына инанаһың. Әгәр ҙә беҙ ошо принцип менән йәшәһәк, йәғни рухи үҫеште тәүмаҡсат итеп ҡуйһаҡ, тормошобоҙҙағы бихисап бәлә-ҡазаларҙан ҡотолор инек. Бөгөн, Һиндостан, Ҡытай, Африканың ҡайһы бер дәүләттәре кеүек бер нисә илде иҫәпкә алмағанда, көллө кешелек үҙенә комфорт тыуҙырыуҙы маҡсат итеп йәшәй һәм шул маҡсатта ерҙең кешелеккә тағы ла меңәр йыл һуҙымына етерлек запас ресурстарын сарыф итә. Йәғни кешелек бөгөн үҙенең киләсәге, балалары, ейән-ейәнсәрҙәре, тыуар-тыуасарҙары иҫәбенә йәшәй, уларҙың ауыҙынан тартып алып, үҙенең комфортын булдырырға, нәфсеһен ҡандырырға тырыша. Әкиәттәге Мәскәй сүрәтендә бөгөн кешелек. Ә бит төптән уйлап ҡараһаң, "Бары менән байрам" әйтемендә ошо күренешкә ҡаршы гениаль фекер ята.

Ҡайһылай зирәк аҡыллы булған икән "Бары менән байрам" тип йәшәүсе атай-олатайҙарыбыҙ, тиеп ҡуяһың. Бында "зирәк аҡыллы" тигән һүҙбәйләнеште юҡҡа ғына килтермәнем, сөнки зирәклек сифаты күңел, йөрәк, рух, ә аҡыл мейе, тәжрибә халәте. Тимәк, зирәк аҡылды йөрәк аҡылы тип тә әйтергә була. Үҙҙәре көлһә лә, күҙҙәре көлмәгән кешеләр була, аҡыллы, белемле булһалар ҙа, күңелдәре туң, йөрәктәре үле кешеләр була...

Дини тәғлимәттә иһә, йөрәктең урыны рух менән нәфсе араһында тип билдәләнә. Ошо урында ҡыҙыҡ ҡына һорау тыуа: халҡыбыҙ матди донъяға ынтылыуға бәйле нәфсеһен нисек еңә алған һуң? Әлбиттә, инаныу, иман, әхлаҡ көсө менән. Ә иман, инаныу ҡайҙан килә? Милли булмыштанмы? Дини инанғанлыҡтанмы? Тарихи ерлектәнме? Был һорауҙарға ҡапылғара яуап биреү ҙә мөмкин түгел. Тотош ғилми эштең, фәнни институттың хеҙмәте талап ителә был һорауҙарға яуап бирер өсөн. Беҙ был мәсьәләне бары тик бер аспектта ғына ҡарай алабыҙ. Әйтәйек, рух-йөрәк-нәфсе аспектында ғына.

"Дегәнәк араһындағы сәскәнән һаҡлан" тигән әйтемдә беҙ нәфсене тик кире күренеш итеп кенә ҡарап, уның тик кире сифаттарын ғына һанап үткәйнек. Дини тәғлимәттә (Джавад Нурбахш) нәфсенең ыңғай яҡтарына ла ҡараш һирпелә. Был йәһәттән нәфсенең үҫеш эволюцияһы түбәндәгесә күҙаллана:

**Бойороҡ биреүсе нәфсе**

Бойороҡ биреүсе нәфсе кешене яуызлыҡ ҡылырға ҡоторта. Ул - барлыҡ яуызлыҡтарҙың сығанағы, хайуан холоҡло, үҙенә туҡтауһыҙ маҡтау йырҙары сығарта, һыйланырға, йоҡо һимертергә генә белә. Һәр саҡ теләктәрен бойомға ашырыу хаҡында ғына уйлай. Формаһы буйынса ул - кеше, йөкмәткеһе буйынса - Иблес. Бойороҡ биреүсе нәфсенең ун билдәһе бар: әҙәпһеҙлек, яуызлыҡ, дошмансылыҡ, яһиллыҡ, тәкәбберлек, күрә алмаусанлыҡ, көнсөллөк, ике йөҙлөлөк, ышанмаусанлыҡ, ҡомһоҙлоҡ.

**Ғәйепләүсе нәфсе**

Ғәйепләүсе нәфсе ҡырын эштәре өсөн үҙ-үҙенә яза биреүсе нәфсе. Кешенең рухы һәм йөрәге уяна башлағанда шул яҡтылыҡта нәфсе үҙенең ҡырын эштәрен күрә һәм Аллаһы Тәғәлә алдында ярлыҡау һорай башлай. Ғәйепләүсе нәфсе бойороҡ биреүсе нәфсе менән тынысланған нәфсенең ҡап уртаһында тора. Ғәйепләүсе нәфсе - Аллаһы Тәғәләгә яһалған тәүге аҙым да ул. Уның ун билдәһе бар: дәрүишлек, намыҫлылыҡ, түҙемлек, тоғролоҡ, намаҙ уҡыуҙа даимлылыҡ, хажға барыу, ғибәҙәт ҡылғанда ихласлыҡ, дини һалымдарҙы түләү, рухи һуғыш. Ғәйепләүсе нәфсене интеллектҡа ла тиңләйҙәр.

**Илһамланған нәфсе**

Аллаһы Тәғәләнән төшкән яҡтылыҡ нәфсене илһамландыра һәм ул изгелек менән яуызлыҡты айыра башлай. Уның ун билдәһе бар: аҡыл, зирәклек, белем, ихласлыҡ, илһам, уяныу, камиллыҡ, бөхтәлек, изгелек һәм йомартлыҡ.

**Тынысланған нәфсе**

Был саҡта нәфсе Аллаһы Тәғәлә хозурында тыныслыҡ таба. Аллаһы Тәғәләнән төшкән ҡояш иң юғары нөктәһенә барып еткән саҡта нәфсе тыныслана, барлыҡ кире сифаттарынан таҙарына. Тынысланған нәфсе кешенең йөрәгенән урын ала. Уның ун билдәһе бар: фәҡирлек, сабырлыҡ, ғәҙеллек, ғәҙел хөкөм итә белеү, ҡәнәғәтлек, белем, изге ниәтеңде бойомға ашыра белеү һәләте, үҙ-үҙеңә ышаныусанлыҡ, намыҫ һәм тоғролоҡ. Тынысланған нәфсе йөрәк кимәленә барып етеп, рухҡа әүерелә. Тынысланған нәфсе шул уҡ йөрәк ул. Фәйләсүфтар уны рациональ нәфсе тип тә атай.

Нәфсенең үҫеш эволюцияһынан шул күҙаллана: "Бары менән байрам" тигән принцип менән йәшәгән кеше дини генә түгел, инаныулы һәм иманлы кеше. Һәр хәлдә, диндә булыу ғына иманлы, инаныулы булыу тигәнде лә аңлатмай. Шәхси байыҡыу маҡсатында дингә килеүселәр ҙә бихисап. Ундайҙар был маҡсатта динде файҙаланып, гонаһҡа ғына бата. Башҡалар алдында йомарт, изге булып күренергә тырышып, урамдағы фәҡиргә хәйер биреүселәр ҙә шулай уҡ гонаһлы. Иманлы кеше диндә булғаны, намаҙ уҡығаны өсөн генә лә иманлы түгел. Уның иманы кешелектең әхлағына тоғро булыуынан, Аллаһы Тәғәләнең барлығын таныуҙан килә. Ошо күҙлектән ҡарағанда, "Бары менән байрам" тип йәшәгән кешене мотлаҡ динле, мотлаҡ намаҙлыҡта ултырыусы, шәриғәт ҡанундарын тулыһынса, еренә еткереп үтәүсе итеп күрге килә. Әммә былар барыһы ла иманлы булыуҙың ҡуҙыһы, тышҡы күренеше генә. Мәғәнә бында кешенең рухи халәтендә, булмышында, асылында.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ӘЙТӘГҮР!*

# БЫЛ ДУҪЛЫҠТЫ...

## беҙгә дауам итергә

### Һорау: Һеҙ башҡорт халҡы, уның үткәне тураһында нимәләр әйтә алаһығыҙ?

**Мөхәмәт СУЛТАНМАГОМЕДОВ, Башҡортостандағы дағстанлылар диаспораһы рәйесе:** Беләһегеҙме, башҡорт халҡының тарихы тураһында мин сәғәттәр буйы һөйләй алам. Ҡыҫҡаса шуны әйтергә мөмкин: бөйөк тарихы бар был халыҡтың. Салауат Юлаевҡа тиклем үк булған был тарих. Башҡорт халҡының батыр улдары нисәмә ихтилал етәксеһе булған. Тағы ла, һәр ҡәүем үҙенең Зәйнулла Рәсүлев кеүек ишандары менән маҡтана алмай. Һеҙҙә ишан, ә беҙҙә - маша тип атала ундай инсандар. Зәйнулла ишан беҙҙең өсөн дә яҡын кеше. Сөнки ул үҙенең мөғәллимлек хоҡуғын Дағстан кешеһенә тапшырған. Башҡортостанда: "Ни өсөн үҙебеҙҙең кешегә ҡалдырмайһың был ғилемде?" - тип һорауҙарына: "Балаларым, әгәр ҙә мин ҡалдыра алһам, белемемде үҙемдең улыма - Абдрахманға ҡалдырыр инем, әммә улай итә алмайым", - тигән. Абдрахман Башҡортостанда мөфтөй булған, Туҡай урамы зыяратында ерләнгәнлеген беләм. Зәйнулланан ҡалған ғилем әле лә Дағстан ерендә ҡәҙерләп һаҡлана. Халыҡтарыбыҙ араһындағы рухи күпер сағылышы был. Зәки Вәлидиҙең атаһы Әхмәтшаһтың да уҡытыусыһы Дағстанлы булған, тип яҙа ғалим атаһы тураһында үҙе. Бөгөнгө замандағы һымаҡ, тиҙ арала барып етер самолеттар, поездар булмаһа ла, халыҡтарыбыҙ араһындағы мөғәллимлек бәйләнештәре ныҡлы булған.

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Республика статистары "Башҡортостан Республикаһында әйләнә-тирә мөхит торошо" тигән йыйынтыҡ баҫтырып сығарҙы. Унда әйләнә-тирә мөхитте, тәбиғәт байлыҡтарының нисек файҙаланылыуын һүрәтләгән аныҡ мәғлүмәт тупланған. Йыйынтыҡ йылына бер тапҡыр сығарыласаҡ.

✓Өфөлә халыҡ-ара шашка буйынса чемпионат үтеүе тураһында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте бойороғона ҡул ҡуйылды. Документҡа ярашлы, 15 июлдән 29-на тиклем халыҡ-ара шашка буйынса донъя чемпионаты, Донъя кубогы һәм Рәсәй матчы үтәсәк.

✓Ошо арала судта Өфө һәм Стәрлетамаҡтың мутлыҡта ғәйепләнеүсе 11 гражданына ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатылды. Улар 1700 пенсионерҙы һәм һуғыш ветеранын алдаған. Тикшереүҙәр асыҡлауынса, бер медицина фирмаһы 800 һум торған физиотерапевтик аппарат һатыу менән шөғөлләнгән. Фирманың директоры махсус төркөм төҙөп, ул аппараттарҙы юғары хаҡ менән ҡарттарға һатыуҙы ойошторған. Ул төркөмдәгеләр үҙҙәрен райондың хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау идаралығы хеҙмәткәре итеп таныҡҡан. Ҡарттарҙы улар:"Аппараттарҙың хаҡы 14-21 мең һум тора, был хаҡтың күп өлөшөн дәүләт түләй, ә һеҙ шуның 2500-5000 һумын ғына түләргә тейешһегеҙ", - тип алдатҡан. Ошо алдаҡ ҡармағына эләккәндәр ҙә пенсионерҙар.

✓Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының сираттағы ултырышы булып үтте. Унда бөгөн бик актуаль булған кадрҙар һәм мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу мәсьәләре ҡаралды, тейешле ҡарар ҡабул ителде. Үҙ ғаризаһы буйынса вазифаһынан бушатылған ҡоролтай рәйесе Илгиз Солтанморатов урынына яңы рәйес - Марсель Йосопов һайланды. Марсель Харис улы - быға тиклем Силәбе башҡорттары ҡоролтайы рәйесе булды, РФ Дәүләт Думаһы депутаты, эшҡыуар.

✓Халыҡ-ара ТӨРКСОЙ ойошмаһы ҡарамағында Дәүләт театрҙары етәкселәре советы төҙөлдө. Төркиә, Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Сыуашстан, Башҡортостан, Татарстан, Ҡырғыҙстан, Хакасия, Төркиә Кипры, Алтай театрҙары директорҙары милли театрҙарҙың иң актуаль проблемаларын көн тәртибенә индерҙе. Ошо кәңәшмәлә төҙөлдө лә инде Совет һәм уның рәйесе итеп Әзербайжан театры директоры Исрафил Исрафилов һайланды.

*✓ Тәбиғи шарттарҙа был балыҡтың Әбйәлил районына йөҙөп килеп етеүе, уның табылған урыны йылға түгел, ә һыуы бер урынға тупланған күл булыуын иҫәпкә алғанда, бөтөнләй мөмкин түгел.*



ҮӘТ ӘЙ!

# ӨФӨ ХАЛҠЫНА НИ OҠШАЙ?

**Өфө ҡала округы хакимиәте "Социомаркет" тикшереүҙәр үҙәге менән берлектә өфөләрҙән йәмәғәт һәм шәхси транспорт проблемалары буйынса һорау алыу үткәрҙе. Һорау алыуҙа ҡаланың 1 мең кешеһе ҡатнашты.**

Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, бөгөн Өфө халҡының күпселек өлөшө үҙе автомобиль йөрөтә. Яуап биреүселәрҙең 37,5 проценты ошо хаҡта белдерҙе. Бөтә автомобиль йөрөтөүселәр ҙә ҡалала машинаны ҡуйыу һәм йыуыу ҡағиҙәләре хаҡында хәбәрҙар, ләкин һәр бишенсе кеше был ҡағиҙәне даими рәүештә боҙоуы, ә һәр етенсе кеше машинаһын тыйылған урында йыуыуы хаҡында белдерҙе.

Автотранспортты экологик таҙа яғыулыҡҡа (водород, метан, пропан, бутан) күсереүгә 38,3 процент - ыңғай, 37,4 процент кире яуап биргән. Атмосфера һауаһын таҙартыу маҡсатында тығындар ваҡытында ҡаланың төп урамдарында шәхси автомобилдәр хәрәкәтен туҡтатып тороуға ыңғай һәм кире ҡараштар бер кимәлдә - 38 процент.

Тикшереү күрһәтеүенсә, респонденттарҙың күпселек өлөшө - 88,3 проценты теге йәки был осраҡта ҡала транспорты менән файҙалана. Шуларҙың 40 проценты йәмәғәт транспорты менән көн һайын, ә ҡалғандары - ҡайһы берҙә, ял көндәрендә генә ҡуллана. Өфөләләр күп осраҡта "Газель" маршрут таксиһын (53,4 процент), НЕФАЗ автобустарын (52,4 процент), "ПАЗ"ды (34,6 процент), "мерседес-бенц спринтер", "форд", "хендай" һәм башҡа төр автобустарҙы (32 процент) һайлай. Һәр бишенсе кеше троллейбус менән йөрөй, ә трамвай менән 100 кешенең 10-һы ҡуллана. Бөтә төр ҡала транспортының эшмәкәрлеген күпселек респондент ыңғай баһалай. Шулай уҡ уларҙың күбеһе - 80 проценттан ашыуы - туҡталҡаларҙың да хәл-торошон ыңғай баһалай. Өфө халҡының 84 проценты әлеге маршруттар менән ҡәнәғәт һәм тағы ла өҫтәмә маршруттар асыуҙы кәрәкле тип һанамай. Өфөләләрҙең өстән бер өлөшө йәмәғәт транспортында юл хаҡы түләү өсөн транспорт картаһын файҙалана.

Пассажирҙарҙың күпселек дәғүәһе - ул йәмәғәт транспортында билет хаҡының юғары булыуы. Водитель һәм кондукторҙың тупаҫлығын күбеһенсә "мерседес-бенц спринтер", "форд", "хендай" маркалы автобустарҙа йөрөүсе пассажирҙар билдәләй. "Газель" маршрут таксиһын һайлаусылар иһә водителдәрҙең хәүефһеҙлек ҡағиҙәһен күҙәтмәүенә, ә "ПАЗ" пассажирҙары автобус салондарының бысраҡлығына ризаһыҙлыҡ белдерә.

Ғөмүмән, алынған һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ҡала халҡы йәмәғәт транспорты эшенә әллә ни ризаһыҙлыҡ белдермәй - быйыл йөҙ һорауҙың 95-нә ыңғай яуап алынған. 2005 йылда респонденттарҙың 66 проценты ғына йәмәғәт транспорты эшенән ҡәнәғәт булыуын белдергән булған.

ҠЫҘЫЫ-ЫҠ!

**Әбйәлил районы Ҡарабалыҡты күлендә балыҡсылар ауына ниндәйҙер ғиллә менән Көньяҡ Америка һыуҙарында ғына осрай торған пиранья балығы килеп ҡапҡан. Барыһына ла үҙенең уғата ашамһаҡлығы менән киң билдәле был балыҡтың ауырлығы 2 килограмм самаһы тартҡан. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, 4 йәшлек булырға тейеш.**



# КӨНЬЯҠ АМЕРИКА ҺЫУҘАРЫНАН...

## Башҡортостан күленә нисек эләккән пиранья?

- Был пираньяның йыртҡыс түгел, ә үлән менән туҡланыусы төр булыуы асыҡланды. Тештәре аҙыҡты онтауға яраҡлашҡан "сит ил балығының" төп рационын ҡыҫалалар тәшкил итә. Ә Башҡортостанда - ҡабырсаҡтар һәм ләмдәр менән туҡланған булырға тейеш, - тигән мәғлүмәт бирә "Башинформ" агентлығына Урта Волга буйы территориаль идаралығы балыҡсылыҡ агентлығының бүлек дәүләт инспекторы Кирилл Прокопьев. - Тәбиғи шарттарҙа был балыҡтың Әбйәлил районына йөҙөп килеп етеүе, уның табылған урыны йылға түгел, ә һыуы бер урынға тупланған күл булыуын иҫәпкә алғанда, бөтөнләй мөмкин түгел. Уны кемдеңдер ебәреүе генә ихтимал Ҡарабалыҡты күленә. Балыҡ уғата ашамһаҡ булғас, уны аҫыраған кешеләр ялҡҡандыр, күрәһең. Юҡҡа ғына был балыҡты йылға гиенаһы тип атамайҙар бит, - тип аңлата балыҡсылыҡ инспекторы.

Прокопьев билдәләүенсә, беҙҙең яҡтағы һауа шарттарында пиранья йәшәй ала, әммә үрсей алмай, шулай ҙа, теория буйынса, сазан балығы (карп) менән ҡушылыуы мөмкин. Әлеге мәлдә башҡорт балыҡсылары тотҡан үҙенсәлекле табыш Башҡорт дәүләт университетының биология факультетына тапшырылған.

Көньяҡ Америка һыу ятҡылыҡтарында осрай торған пиранья яңы мөхиткә еңел яраҡлаша. Өлкән балыҡ ғәҙәттә ҙур ғына була - буйы 30 сантиметрға, ауырлығы 1 килограмға тиклем етә. Ә был балыҡ беҙҙең һыуҙарҙа бигерәк байманланып, 2 килограмғаса етеп, түл йыйып та өлгөргән бит, әйтәгүр! Мөхит тә шәп шул беҙҙә!

**"Башинформ" мәғлүмәт агентлығынан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

### БАШҠОРТОСТАНДА МӘСӘҒҮТ ҠАЛАҺЫ БУЛАСАҠМЫ?

**Мәсәғүт ҡасабаһын ҡалаға әйләндереп, унда сәнәғәт үҙәге төҙөргә йыйыналар. Был проект Башҡортостандың 2011-2015 йылдарға иҫәпләнгән төнъяҡ-көнсығыш районДарының социаль-иҡтисади үҫеше комплекслы программаһы сиктәрендә башҡарылған.**

Һүҙ бында һигеҙ муниципаль район: Асҡын, Балаҡатай, Дыуан, Ҡариҙел, Ҡыйғы, Мәсетле, Нуриман, Салауат районДары тураһында бара. Улар республиканың 14 процентҡа яҡын территорияһын алып тора, был районДарҙа яҡынса 200 мең кеше йәшәй. Төньяҡ-көнсығыш районДары социаль-иҡтисади үҫеш йәһәтенән дә, сәнәғәт үҫеше буйынса ла республикала иң артта барған районДарҙан һанала. Төп сәнәғәт-етештереү фондының 0,4 проценты ғына уларҙа урынлашҡан һәм республика сәнәғәтененең тулайым продукцияһының 0,5 проценты ғына етештерелә. Мәсәғүтте ауылдан ҡалаға әүерелдереү сәнәғәттең үҫешенә килтерәсәк, халыҡ эш менән тәьмин ителәсәк. Был программа сиктәрендә Мәсәғүттә республика вуздарының филиалдарын асыу ҙа ҡаралған. Шулай уҡ 120 урынлыҡ муниципалитет-ара медицина үҙәге төҙөү ҙә планлаштырылған. Был үҙ сиратында халыҡҡа сифатлы медицина ярҙамы күрһәтергә һәм халыҡ араһында ауырыуҙарҙы һәм үлемде кәметергә мөмкинлек бирәсәк.

### БАЛАНДЫ ТӨНДӘ УРАМДА ЙӨРӨТМӘ

**17 йәше тулмаған балаларҙы төндә йәмәғәт урындарына йөрөүҙән тыйыу, икенсе төрлө әйткәндә, комендант сәғәте ата-әсәләрҙең кеҫәһенә һуғасаҡ, тип белдерә БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Зөһрә Рәхмәтуллина.**

-"Башҡортостан Республикаһында бала хоҡуҡтарының төп гарантиялары тураһында"ғы закон положениеһы буйынса балиғ булмағандар өсөн "комендант сәғәте" үҙ көсөнә инеүгә бер йыл үтте. Әммә төбәктәрҙең эске эштәр органдары статистикаһы күрһәтеүенсә, күп ата-әсәләр, шул иҫәптән балалар үҙҙәре лә был турала бер нәмә лә белмәй, - тине вице-премьер.

Билдәләнеүенсә, әлегә тиклем закондың был положениеһын үтәмәгән өсөн иҫкәртеү генә яһала ине. 23 июндә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйған "Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында"ғы кодексҡа ярашлы, хәҙер балаһына төнөн урамда йөрөргә рәхсәт итеүсе ата-әсә штраф түләйәсәк.

Белгестәр белдереүенсә, "комендант сәғәте" индерелгән ваҡыттан алып балаларға ҡарата ҡылынған енәйәттәр һаны кәмегән, үҫмерҙәр тарафынан ҡылынған енәйәттәр 14,5 процентҡа түбәнәйгән. Әммә наркотиктарҙың законһыҙ әйләнеше менән бәйле хәл киҫкен ҡала. Һуңғы йылда наркотик ҡулланыусылар 4,6 процентҡа артҡан һәм 5697 кешегә еткән. Уларҙың 4-һе - балиғ булмағандар.

### КӨН ҮҘӘГЕНДӘ АСАРБАҠТАР ПРОБЛЕМАҺЫ

**БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығында асарбаҡтарға социаль ярҙам күрһәтеү буйынса килешеү проекты эшләнгән. Ведомствонан хәбәр итеүҙәренсә, проект граждандарҙың был категорияһын социаль реабилитациялау һәм уларҙы йәмғиәттә йәшәүгә яраҡлаштырыу мәсьәләләренә арналған ултырышта тикшерелгән.**

Хәҙерге замандың иң актуаль проблемаһының береһе булған был мәсьәләне хәл итеү өсөн БР Һаулыҡ һаҡлау, БР буйынса Эске эштәр министрлыҡтары, БР буйынса Федераль миграция хеҙмәте идаралығы, Халыҡты эш менән тәьмин итеү идаралығы, Өфө ҡала округы хакимиәте, шулай уҡ билдәле йәшәү урыны булмаған граждандарға ярҙам итеү республика үҙәге хеҙмәткәрҙәре саҡырылған. Хеҙмәт һәм халыҡты эш менән тәьмин итеү министры Ленара Иванова әйтеүенсә, бөгөнгө көндә Өфөлә асарбаҡтар өсөн махсус социаль реабилитация үҙәге асыу мөһим. Министр шулай уҡ социаль ашхана ойоштороу һәм тәүге медицина ярҙамы күрәһәтеү менән шөғөлләнәсәк мобиль социаль хеҙмәт төҙөргә кәрәклеге тураһында ла белдерҙе.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Йыл аҙағына тиклем Өфөлә туғыҙ урам киңәйтеләсәк. Быйылға тағы ла 25 урамға капиталь ремонт үткәреү планлаштырылған. Ленин, Зорге, Киров, Цюрупа, Сипайловский һәм башҡа урамдарҙа инженер коммуникацияларын үҙгәртеп ҡороу, тротуарҙарҙы, газондарҙы төҙөкләндереү, техник һыҙаттарҙы билдәләү, светофорҙарҙы алыштырыу, ағас ултыртыу эштәре башҡарыласаҡ.

✓Өфө ҡала хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Павел Качкаев юлдарҙағы ремонт эштәрен төнгө сәғәттәрҙә үткәрергә тәҡдим итте. Әле юлсылар 30 градус эҫелә көндөҙ эшләй, был юлдарҙа тығын барлыҡҡа килтереүгә, водителдәр араһында ризаһыҙлыҡ тыуҙырыуға алып килә. Павел Рюрикович шулай уҡ район хакимиәттәре башлыҡтары иғтибарын һыу һиптереүсе машиналар эшенә йүнәлтте. Әле Өфөлә барлығы 66 һыу һиптереүсе машина бар, күп ваҡыт уларҙың яртыһы ғына эш менән мәшғүл.

✓Быйыл Өфөлә 21 мең төп ағас һәм ҡыуаҡлыҡ ултыртылды. Эре ағастар ғына ла 191 төп ултыртылды. Был хаҡта баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә мәғлүмәт бирелде. Унда билдәләнеүенсә, Өфөлә юлдарҙы ремонтлау 130 кв метр майҙанда башҡарылған. 170 урамда юлдар һәм соҡор-саҡырҙар ремонтланған.

✓Өфө ҡала округы хакимәтендә журналистар менән үткәрелгән матбуғат конференцияһында территориаль финанс идаралығы начальнигы Илгиз Насретдинов быйылғы ярты йылда баш ҡала бюджетының 7,2 млрд һумға тулылаunion ныуын билдәләне. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 584 млн-ға күберәк. Илгиз Диҡҡәт улы әйтеүенсә, ғәҙәттә, йылдың икенсе яртыһы ҡаҙнаның тулылыныуы буйынса әүҙемерәк буласаҡ. Бюджет сығымдарының күп өлөшө мәғариф өлкәһенә йүнәлдерелгән. Отчет осоронда был өлкәгә 3,3 млрд һум, һаулыҡ һаҡлау һәм спортҡа 1,2 млрд аҡса күсерелгән.

✓Башҡортостан Республикаһының Граждандыҡ хәле акттарын теркәү идаралығында "ышаныс телефоны" эшләй башланы. (347) 248-37-50 телефоны буйынса ведомство хеҙмәткәрҙәренең граждандар хоҡуғын боҙоу һәм башҡа законһыҙ эштәре тураһында хәбәр итергә мөмкин. ЗАГС-тар эше буйынса тәҡдимдәрҙе шулай уҡ www.uzagsrb.bashkortostan.ru сайтына ла урынлаштырырға була.

✓ *Тиҙҙән баҡсала кишер өлгөрә. Унның үҙен, япрағын, артып ҡалған орлоғон да файҙаланырға кәрәк: япраҡ төнәтмәһе геморройҙан ҡотҡара; сөгөлдөр менән бергә бешереп, бал ҡушып аша - төрлө ауырыуҙарға ҡаршы тора;*

АФАРИН!

# ДИНИ ҺАБАҠТАР ӨЙРӘНЕҮ...

## ял итеү менән бергә атҡарылды

**Ошо көндәрҙә баш ҡалабыҙҙа урынлашҡан Мәрйәм Солтанова исемендәге Ислам колледжында балалар лагерын ябыу тантанаһы булып үтте. Ғәҙәти лагерҙарҙан айырмалы рәүештә, был лагерҙа балалар ял итеп кенә ҡалманы, ә үҙен төрлө яҡтан камиллаштырҙы, ислам дине буйынса ғилем тупланы, әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләрен өйрәнде. Мәҫәлән, улар көн һайын изге китабыбыҙ Ҡөрьәндән ҡыҫҡа сүрәләр һәм Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хәҙистәрен ятланы, тәһәрәт алырға, намаҙ ҡылырға өйрәнде. Уларға был ғилемдәрҙе ошо мәҙрәсәлә белем алған, динебеҙ ҡағиҙәләрен тулыһынса үтәгән, ғилемле, аҡыллы апайҙар һәм ағайҙар бирҙе.**

- Аллаһ йортонда урынлашҡан лагерҙа балалар йәйге каникулының 10 көнөн уҙғарҙы. Ял көндәре шул тиклем тиҙ үтте, беҙ хатта күп нәмәләрҙе эшләп өлгөрмәнек төҫлө. Балалар өсөн дә ваҡыт үткәне һиҙелмәне, - тип һөйләп үтте лагерь тормошо тураһында вожатый Әлфиә Йәркәева. - Балаларҙы иғлан буйынса алдыҡ. Бөтәһе 65 бала ял итте. Беҙҙең лагерҙың төп бурысы - кескәйҙәр күңеленә Аллаһы Тәғәләгә, Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙгә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйөү орлоҡтары һалыу, уларға динебеҙ гүзәллектәрен аңлатыу ине. Ял итеү осоронда Ҡөрьән сүрәләре, хәҙистәр ятлау, ғәрәп телен үҙләштереү улар өсөн тик файҙаға ғына булғандыр, тип ышанам. Белеүебеҙсә, Ҡөрьәндән аяттар ятлау хәтерҙе үҫтерә, тынысландыра, кешегә үҙ-үҙенә ышаныс, ҡыйыулыҡ өҫтәй. Тағы ла бала саҡта сүрәләрҙе ятлау тиҙерәк һәм еңелерәк бирелә, шуға күрә сабыйҙарҙы был ғилемгә бәләкәй саҡтарында өйрәтеү күп яҡтан отошло. Бөтә ата-әсәләр ҙә ошоно иҫтә тотоп, өйҙә балалары менән ошо йүнәлештә шөғөлләнһен ине. Бынан тыш, ял итеү осоронда балаларҙы баш ҡалабыҙҙың төрлө иҫтәлекле урындарына алып сыҡтыҡ, улар өсөн төрлө саралар, спорт уйындары уҙғарҙыҡ.

Лагерҙы ябыу тантанаһында балалар ял итеү осоронда алған белемдәренең һөҙөмтәләрен күрһәтте: яттан Ҡөрьән сүрәләре, хәҙистәр һөйләне, фәһемле шиғырҙар уҡыны, йырҙар йырланы. Шулай уҡ уларға лагерҙа үҙҙәрен нисек тотоуына ҡарап, төрлө номинациялар ("Иң матур һәм баҫалҡы", "Иң аҡыллы һәм йомарт", "Иң ярҙамсы һәм егәрле", "Иң шаян һәм отҡор"), иҫтәлекле бүләктәр бирелде, тәмле күстәнәстәр таратылды. Лагерҙан балалар ял итеп, файҙалы ғилем туплап, йылы тәьҫораттар алып таралышты.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Билдәле башҡорт мәғрифәтсеһененең исемен йөрөткән был мәҙрәсә (колледж) донъя кимәлендә лә ҙур танылыу алған. Бында Башҡортостандан ғына түгел, ә Силәбе, Ҡурған, Ырымбур өлкәләренән дә килеп белем алалар. Уҡыу өсөн мәҙрәсәлә бөтә шарттар тыуҙырылған: мәҙрәсәнең үҙенең киң уҡыу бүлмәләре, китапханаһы, ашханаһы, дөйөм ятағы бар. Бынан башҡа колледж М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының мәғлүмәт технологиялары үҙәге ҡатнашлығында ҡоролған заманса компьютер кластарына эйә. Мәҙрәсә ислам буйынса башҡорт, рус, татар телдәрендә тиҫтәгә яҡын китап һәм уҡыу-методик әсбаптар баҫтырған, шулай уҡ мәҙрәсә базаһында "Рисәләт" гәзите сығарыла. Мәҙрәсәнең төп бурысы - дини белгестәр әҙерләү, йәштәрҙе әхлаҡ тәрбиәһенә өйрәтеү, уларҙы тура юлға баҫтырыу, тормошта үҙ урынын табырға ярҙам итеү. Дәрестәрҙе Әл-Әхзар һәм Эр-Рияд (Мәккә) университеттарынан алдынғы белгестәр алып бара. Йыл һайын яҡшы уҡыусы студенттар белемен дауам итер өсөн Әл-Әхзар исемендәге халыҡ-ара университетҡа һәм М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының "Ислам тарихын һәм мәҙәниәтен тәрәндән өйрәнеүсе юриспруденция" бүлегенә йүнәлтмә ала.**

**Мәҙрәсәлә уҡыу ваҡыты 4 йыл. Документтар 20 июндән 30 августҡа тиклем ҡабул ителә. Колледж адресы: Өфө ҡалаһы, М.Кәрим урамы, 3. Тел.: (347) 272-19-87, (347) 272-38-58.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**



ҺОРАУ-ЯУАП

## ЯҢҒЫҘ ӘСӘГӘ ӨҪТӘМӘ ТҮЛӘҮ

**Аҙ тәьмин ителгән яңғыҙ әсәләргә (өсәр йәшлек игеҙәк балаларым бар) балалар баҡсаһы өсөн өҫтәмә түләү (субсидия) тейеш тип ишеткәйнем, уны ҡайҙан барып алырға?**

- Аҙ тәьмин ителгән һәм башҡа төр категория ғаиләләргә балалар баҡсаһы өсөн льготалар урындағы үҙидара органдары ҡарары буйынса тәғәйенләнә. Льгота бармы, юҡмы икәнлекте мәғариф идаралығының урындағы органдарына мөрәжәғәт итеп асыҡларға мөмкин.

Мәҫәлән, Стәрлетамаҡта мәктәпкәсә мәғариф учреждениеһына йөрөмәгән 1,5-5 йәшлек балалары булған ғаиләләргә 2.200 һум аҡса түләнә, шуның 900 һумы - туҡланыуға, 1300 һумы - мәктәпкәсә мәғариф учреждениеһы янындағы ҡыҫҡа ваҡытлы төркөмдәрҙәге белем биреү хеҙмәттәре өсөн. Өфөлә 1,5-3 йәшкә тиклемге күп балалы һәм тулы булмаған аҙ тәьминәтле ғаиләләргә, әгәр улар мәктәпкәсә мәғариф учреждениеһында урын алыу өсөн сиратҡа теркәлгән хәлдә, 3000 һум түләнә.

## КИЛЕНЕҢ ЙОНСОТҺА...

**Мин фатирҙың берҙән-бер милексеһе, унда улым, ейәнсәрем һәм мин теркәлгәнбеҙ. Беҙҙең менән йәшәүсе киленем миңә көн күрһәтмәй, һүгенә, мине кәмһетә. Гел генә иреш тә талаштан хәҙер бергә йәшәү мөмкин дә түгел. Миңә ни эшләргә? Кемгә, ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?**

- Хатығыҙҙан күренеүенсә, фатирҙың берҙән-бер милексеһе булараҡ, һеҙ РФ Торлаҡ кодексының 30-сы статьяһына ярашлы, фатир менән үҙегеҙсә файҙаланырға һәм ҡарар ҡылырға хоҡуҡлыһығыҙ. Шул уҡ Кодекстың 31-се статьяһындағы 4-се өлөшөнә ярашлы, киленегеҙҙе фатирығыҙҙан сығарып ебәреүҙе талап итеп, судҡа мөрәжәғәт итә алаһығыҙ.

## СУДҠА ТИКЛЕМГЕ ХЕҘМӘТТӘШЛЕК

**Миңә закондағы бер яңылыҡты аңлатығыҙ әле: нимә ул судҡа тиклемге хеҙмәттәшлек тураһында килешеү? Был кемдәргә ҡағыла?**

- Прокурорҙар БР буйынса РФ прокуратураһының тикшереү комитеты следователдәре алып барған енәйәт эштәре буйынса судҡа тиклемге килешеү төҙөй. РФ Енәйәт-процессуаль кодекс нормаларына ярашлы, ғәйепләнеүсе йәки ғәйепле тип фаразланыусы яҡлаусы ризалығы менән следователь аша прокурор исеменә юллау бирә. Был юллауҙа ул тикшереүгә булышлыҡ итеү, енәйәтте тикшереү һәм асыу, енәйәт ҡылыуҙа ҡатнашлыҡ иткән башҡа кешеләрҙе фашлау, енәйәт һөҙөмтәһендә ҡулға төшөрөлгән милекте эҙләшеү, табышыу маҡсатында үҙ өҫтөнә ниндәй бурыстар алыуы хаҡында күрһәтә. Юллауҙы ҡарау һөҙөмтәләре буйынса прокурор уны ҡәнәғәтләндереү йә булмаһа кире ҡағыу тураһында ҡарар сығара.

Хеҙмәттәшлек тураһында судҡа тиклемге килешеүгә прокурор, енәйәттә ғәйепләнеүсе һәм уның яҡлаусыһы тарафынан ҡул ҡуйыла. Хеҙмәттәшлек тураһында судҡа тиклемге килешеү төҙөлгән ғәйепләнеүсегә ҡарата енәйәт эше буйынса алдан тикшереү айырым бүлеп ҡарала. Хөкөм ителеүсегә ҡарата енәйәт эшен суд ҡарауы һөҙөмтәләре буйынса суд тарафынан РФ Енәйәт кодексының ҡайһы бер положениеларын иҫәпкә алып, әлеге енәйәт өсөн ҡаралғандан еңелерәк яза тәғәйенләнеүе, шартлы хөкөм язаһы бирелеүе йә булмаһа язанан бөтөнләйгә азат ителеүе ихтимал.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

### Алтынлы һыу



Эмаль һауыттағы 1,5 литр һыуҙа алтын балдаҡты һыуҙың яртыһы бөткәнсе "бешерәһең". Был һыу күңел төшөнкөлөгөнән ҡотҡара, аҡыл эшмәкәрлеген яҡшырта, операцияларҙан һуң хәл индерә. Һыуҙы көнөнә өс мәртәбә, 1-әр балғалаҡлап ас ҡарынға эсәһең. Дауаланыу курсы бер аҙна. Дауаны тағы оҙағыраҡ дауам итергә теләһәгеҙ, бер ай ял итеп алығыҙ.

### Үксәләр ярылһа

Йәй күберәк ялан аяҡ йөрөлә, шуға ла үксә ярылыуы йыш осрай. Был осраҡта: ❖ ярылған урындарға лейкопластырь йәбештерергә; ❖ алоэ япрағын буйға урталай яраһың да, үксә тиреһенең ярылған ерҙәренә ҡуйып бәйләйһең, тиҙ төҙәлә.

### Тамаҡ ауыртһа

Бала-саға йылғала һыу инә башланы, араларында йүткереү, тамаҡ ауыртыуы менән яфаланғандары ла барҙыр. Шул саҡта түбәндәге дауаларҙы ҡулланырға була: ❖ ҡырғыстан үткәрелгән 1 балғалаҡ керәнгә 1/3 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөлөккә ҡалдыраһың, иртәгеһенә көнөнә 3 мәртәбә йайлап ҡына эсәһең. Төнәтмәне ҡабаланып йотмаҫҡа; ❖ әгәр йүткереү йонсотһа, алма ҡабығын ҡайнатып эсергә кәрәк.

### Кишер

Тиҙҙән баҡсала кишер өлгөрә. Уның үҙен, япрағын, артып ҡалған орлоғон да файҙаланырға кәрәк: 1) сей көйө; 2) шеш булмаһа, бешереп аша - күҙең яҡшыраҡ күрер; 3) эренле йәрәхәтте йүнәлтә; 4) япраҡ төнәтмәһе геморройҙан ҡотҡара; 5) сөгөлдөр менән бергә бешереп, бал ҡушып аша - төрлө ауырыуҙарға ҡаршы тора; 6) һутын эс - бөйөрҙәге ҡом, ташты төшөрә - бының өсөн бер ҡалаҡ кишер орлоғон 3 стакан ҡайнар һыуға һалып, 6-7 сәғәт ябып тотаһың да, көнөнә 3 тапҡыр 3/4 стакан эсәһең.

### Ҡаразирә

Ҡаразирә (дурман вонючий) үләнен ваҡлап, 1 литр һыуға һалып, ҡуйы төҫкә ингәнсе ҡайнатаһың. Аяҡ-ҡулдарҙағы йөн үҫкән тән тиреһенә һөртәһең.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*КИНӘЙӘ*

# ЯМАУ ҺАЛЫРҒА...

## өйрәтергә яҙмаһын, тим

**Өс йәше лә тулмаған ейәнсәрем ойоҡбаштағы ямауҙы күреп ҡалып, "Был нимә ул?" тип һораны. Нәҡ бөтә нәмәгә лә иғтибар менән ҡарап, төпсөнә торған сағы. "Ямау ул, балаҡайым", тинем, йөҙөмә бер ҙә бошонмай ғына был һорауҙы ҡабул иткәндәй төҫ сығарып. Әй ейәнсәрем: "Ә ниңә яманың?" - тип төпсөнөүҙе дауам итте. "Ундай ойоҡбаштар һатыуҙа юҡ, шуға ла ямап кейергә тура килә, сөнки улар бик йылы, йомшаҡ, миңә тамам ғына", - тип аңлатҡан булдым.**

Ысынлап та, тормош алға барған һайын кейемдәрҙең, ризыҡтарҙың сифаты бик хөртәйгәнен һәр беребеҙ һиҙәләр. Беҙ, 1941 йылда тыуған быуын, 70 йәшебеҙҙе тултырабыҙ быйыл. Ғүмер буйы ямауһыҙ йәшәй алманыҡ инде. Пенсиябыҙға 100 һум өҫтәһәләр, ризыҡ, кейем хаҡы 200 һумға ҡыйбатлана. Шулай бер кимәлдә йәшәй алмайбыҙ, йәшәү кимәлебеҙ түбәнәйгәндән-түбәнәйә бара.

Бер саҡ телевизорҙан актриса Аросеваның юбилейын ҡараным. Ул "Кафе 12 стульев" телесериалында һәм "Старики разбойники" кинофильмында уйнаны. Күберәк театр актрисаһы. Ул сәхнәгә сығып баҫып, залға бик оҙаҡ төбәлеп ҡарап торҙо ла: "Кәрзин үреүсене эҙләйем", - тине. Кисәне алып барыусының: "Нindәй кәрзин ул?" - тип һорауына актриса: "Ҡулланыусылар кәрзинен кем үрә? Үлмәҫлек кенә ризыҡ кимәлен һанап сығарып, шул кәрзингә тейәп күрһәтәләр бит. Кем икән ул кәрзинде үреүсе, уны күргем килә", - тип, бөтә залды көлдөрөп алды...

Беҙ бер көндө әхирәтем Фаягөл менән яҡындағы бутиктарҙы ҡарап йөрөп килергә булдыҡ. Береһенә керһәк, күҙҙең яуын алып, хас "Шамаханская царица" кейә торған халат эленеп тора. Яҡыныраҡ барып ҡарайыҡ тиһәк, һатыусының: "Һеҙгә нимә кәрәк бында?" - тигән ҡаты өндәшеүен ишетеп, ҡойолоп төштөк. Әммә мин үҙемдә тиҙ генә тынысландырҙым да: "Беҙ былай ғына, экскурсияға килгәйнек", - тип һатыусының күҙҙәренә ҡараным һәм уның нәфрәт тулы ҡарашы менән осраштым. Әхирәтемде ҡулынан етәкләп тиерлек тартып, бутиктан тиҙ генә сығып китә налдыҡ. Урамға сыҡҡас, Фаягөл эсен тотоп көлә. "Экскурсия" һүҙен ҡабатлай ҙа, тағы туҡтай алмай көлә. Бай кибеттә аҡсаһыҙҙарҙы танып торалар инде, ни эшләйһең. Совет заманы булһа, ул тупаҫ һатыусыға икенсерәк яуап биргән булыр инек. Ҡырҡ беренсе йылда тыуғандарға муллыҡ тәтемәне инде. Әммә ләкин эшһөйәр рухлы булып йәшәнек ул 70 йыллыҡ ғүмерҙе.

Хатымдың башында "ямауҙар" тип башлағайным бит. Ул ямауҙарҙы йәш саҡта шундай оҫта итеп һала инек, ҡайһы ере ямалғанын табып, күреп тә булмай ине хатта. Әхирәтем Фәриҙә минең ямауҙарҙы "художественная штопка" тип атай ине. Тик әле күҙҙәр хөртәйҙе. Оҫта итеп һалып булмай. Ярай, ул ямауҙар хәҙер кемгә кәрәк, тип тынысландырам үҙемдә. Өйрәтеп ҡалдыра торған шөғөл була күрмәһен. Ейәнсәрем дә хәтерендә ҡалдырмаһын, онотһон, тип уйланым...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*ИР ҺӘМ ҠАТЫН*

**Кешенең йәшәгән донъяһына ҡарағанда уның күңел донъяһы ҡыҙығыраҡ. Ҡарамаҡҡа йомоҡ тойолған кешенең дә, әмәлен табып, күңел сөмбәйенә төшә алһаң, том-том китап яҙырлыҡ сәхифәләренә юлығаһың. Атаҡлы һунарсылар, балыҡсылар менән ҡыҙыҡһыныуым мине Иҫке Собханғол ауылына йәм биреп ултырыусы күркәм йортҡа алып барҙы. Синыфташым Салауат ошолай ирәбе йәшәп ятыр тигән уй бынан 20-30 йыллап әүәл башҡа ла килмәгәндер, моғайын. Терегөмөштәй тилбер, шуҡ Салауаттан ошондай шәп ғаилә башлығы, етмеш һөнәрҙе үҙ иткән ир-уҙаман сығыр, тигән уй кемде борсоған тиһең?**

# ДОНЪЯҢДЫ ЕРҘӘГЕ ОЖМАХ ИТ...

## Бәҙәмшиндар кеүек



Ир хәстәрле булһа, ҡатын таҫтарлы була, тип белеп әйткән халыҡ: асыҡ зәңгәр күҙҙәре менән генә түгел, бар булмышы менән донъяға нур һибеп йөрөүсе Вәсиләһен ни әйтерһең - ҡырмаған эше, бешермәгән ашы юҡ. Татыу йорт - ожмах түре шул: булдыҡлы ирҙең тырышлығы менән тәкәтмә өҫтөнә тәкәтмә эшләнһә, тернәксел хужабикә бөтмөрлөгө менән өй эсе сынъяһауға әйләнгән. Бәхет балыҡ түгел - ҡармаҡ менән тотоп булмай, тип халыҡ ысынды әйткән, тигәнгә инанмай ҡалайтаһың ошонан һуң?! Эйе. Бәхет тигәнең Аллаһ Раббыбыҙ һәр кемгә тәғәйен инселәп биргән өләш шул. Бәҙәмшиндарға ул йәлләмәй бирелгән - һәр хәлдә, минә шулай тойолдо.

Салауат синыфташ булараҡ яҡын. Фронтовик Сәлих Дәүләтбирҙин яҙғанса, яугир Бәҙәмшиндар тоҡомо. Вәсилә - Һарғая ауылы ҡыҙы, 11 балалы ҙур һәм татыу ғаиләлә тәрбиәләнеп үҫкән. Һарғаялар, унда рустар ҙа йәшәгәс, элек Белорет районы Ҡағыла уҡыны. Туған телдә белем алмаған Вәсиләнең башҡортсаһы ла самалыраҡ була: бөтә һүҙҙәрҙе лә аңлап бөтмәй. Ошоға бәйле ҡыҙыҡ һәм ҡыҙғаныс хәлдәргә лә тарып бөтә ул. Һунарсы ҡаны уйнаған, балыҡсы булып даны сыҡҡан егет менән яҙмышын бәйләгән йылдарҙа була был хәлдәр. Белорет электр селтәрҙәрендә эшләп йөрөгән Салауаты таң һарыһынан балыҡҡа барып килергә лә өлгөрә. Бер мәл шулай эшкә китер алдынан хәләленә, балыҡты таҙала, тигән йомош ҡуша. Башҡорт дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығының төп усадьбаһында, етмәһә, бөтә ғүмерен урман һаҡлау эшенә арнаған тәбиғәт йәнле атай тәрбиәһендә үҫкән Вәсиләгә иһә йылға балығы, кейек-ҡош ите бөтөнләй ят була. Билдәле, ир әйткәс, үтәргә кәрәк: йылға буйына алып барып, бәрҙеләрҙең ҡанат-ҡойроғон, башын ҡырҡып ташлап, таҙартып алып ҡайта балыҡтарҙы. Бер туҫтаҡ балыҡтан һауыттың төбөн йәйелдерер-йәйелдермәҫ ризыҡ ҡала. "Мин кейәүгә сыҡҡанда балыҡты таҙалай ҙа, бешерә лә, ашай ҙа белмәй инем. Башлыҙ балыҡтарҙы күреп, Салауаттың иҫе китте, шунан йылға буйына барып, балыҡтың баштарын, ыуылдырығын алып килеп бешереп ашаны. Мин уны ҡыҙәтеп, шул тиклем дә кеше була икән, емдек ашай, тип сикәнеп ултырҙым," - тип һөйләй хәҙер Вәсилә. Бының менән генә лә бөтмәй әле балыҡ тарихы. Бер мәл эшкә ҡабаланған Салауат ҡатынына бер бак тоҙло сабаҡты ҡаҙаҡларға ҡушып китә. "Ладно, сделаю,"- тип тороп ҡала йәш киләш. Тик "ҡаҙаҡлап" тигән һүҙҙең айышына төшөнә алмай. Унан, һүҙҙең мәғәнәһен төшөндөр, тип, күрше ҡарсыҡҡа инә. Ҡаҙаҡ - сөй була, тигәс, ихласлап эшкә тотона: үҙҙәренең ҡапҡаһы бәләкәй тойола, эттәр ҙә маз булыр, тип уйлап, картуф баҡсаларынан үткән юл төҙөү-ремонтлау идараһының баҡсаһына өс ҡат итеп теҙеп, эре сөйҙәр менән һендерә ҡатып сыға теге сабаҡтарҙы. Ире ҡайта, баҡыр сымда ҡаҙаҡланған балыҡтарын күрмәгәс, һораша төшә:" Балыҡтарҙы ҡайҙа илттең?" - ти. Ҙур эш атҡарғандай, эре генә яуап бирә Вәсиләһе:" Как эшләмәй, эшләнем, вон, доротделдың заборында три этажа..." Аптырашынан ни иларға, ни көлөргә белмәгән ире ҡабаландыра: "Бар, йәһәт кенә бакты алып кил, Юлдаш күреп көлмәҫ борон йыйып ала һалайыҡ балыҡты", - ти. Өҙөп-йолҡоп, яртыһын кәртә аша һелтәп, аҙ ғынаһын йыйып алалар теге балыҡтың.

Ана шулай балыҡҡа бәйле ғәләмәттәр күп булды инде, тип көлә әңгәмәсем. Таҙалайым, тип һыртынан бысаҡ менән ҡырғанда елле суртандан томышоғона ла алып ултырған саҡтары булған балыҡсы ҡатынының. Хәҙер инде ул донъя күргән, балыҡтан мең төрлө ризыҡ әҙерләй белгән оҫта хужабикә. Балыҡҡа бәйле хәтирәләр күңел янсығында ҡалған.

Дуҫтар ҡыуанырлыҡ, дошмандар көнләшерлек итеп йәшәй Бәҙәмшиндар:1979 йылда өйләнешеп, ул ваҡытта уҡ мәрхүм ҡайны-ҡәйнәһенең өйөндә йәшәй башлаған иштең һөйөү емеше булып бер-бер артлы өс балалары тыуа. 1979 йылдың 20 сентябренән Салауат Белорет электр селтәрҙәрендә эш башлай. Уҙ эшен яратҡан, уға мөкиббән бирелгән Салауат Йәнғәле улы 32 йыл инде ошо эштә эшләй. Намыҫлы хеҙмәте, тырышлығы менән хаҡлы абруй ҡаҙана. Бихисап Маҡтау ҡағыҙҙары, ҡиммәтле бүләктәр, премиялар - ошоға дәлил. Ә 1994 йылдан ул "Башҡортостандың атҡаҙанған энергетигы" исемен йөрөтә. Ошоға өҫтәп, "Рәсәйҙең почетлы доноры" исеме лә бар әле уның. Күпме өйгә ут - яҡтылыҡ индерһә, хәләл ҡанын тапшырып, күпме аҫыл ғүмерҙе һаҡлап ҡалды икән?! Вәсиләһе лә һынатмай: 1977 йылда Благовещен бухгалтерҙар әҙерләү училищеһын ҡыҙыл дипломға тамамлап ҡайтып, "Бөрйән" совхозында эш башлағандан алып үҙ эшенең оҫтаһы була. Алсаҡ, йор һүҙле ҡатынды һәр эрҙә ихтирам итәләр.

Ике һыңар иш килгәс, донъя көтөү ҙә ауыр булмай: күтәрелгән, башы ябылған бураларын ҡәйнешенә биреп, көләш алып башҡаландыралар. Шунан үҙҙәренә өй һала башлайҙар. Шаһимырҙан бабай ҙа ныҡ ярҙам итә. Егәрле йәштәр өйҙәренә сыҡҡан йылда ғына 24 сусҡа,17 һарыҡ, 2 һыйыр, әллә күпме йорт ҡуяны, ҡапҡа тултырып ҡош-ҡорт көтә. "Салауаттың һунар табышы, күпләп тотҡан балығы ишемгә ҡушым була. Ҡара таңдан тороп балығын да килтереп, ҡапҡандарын да ҡарап өлгөрә ине - уның тапҡаны тағы ике эш хаҡындай булды", ти иренән ҡәнәғәт Вәсилә.

Бәҙәмшиндарҙың балалары ла, ата-әсәһенә оҡшап, бөтмөр һәм тырыш. 1980 йылғы Батыр Армавир спецназында хеҙмәт итә. Дағстандағы 715,3 бейеклеге өсөн барған һуғыштағы был отрядтың батырлыҡтары хаҡында күп яҙҙылар. Был утлы ғәрәсәттән имен сыҡҡан яугирҙәр, шул иҫәптән Батыр Бәҙәмшин, "Батырлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ була. Әлеге көндә Батыр Яза үтәү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан идаралығында капитан дәрәжәһендә хеҙмәт итә. Бәҙәмшиндарҙың ҡыҙы Әлиә иһә БДУ-ның Сибай институтынан Германияға стажировкаға китеп, 3-сө йыл инде шунда уҡытып, бер юлы эшләп тә йөрөй. Төпсөктәре Алмаз инде үҙе атай. Аграр университеттың икенсе курсында уҡый.

Бәхет янсыҡта түгел, ҡулда, тип бик тапҡыр әйткән икән беҙҙең халыҡ. Бәҙәмшиндарҙың күңел йәдкәре менән уртаҡлашҡас, ошоға тағы бер инандым. Ысынлап та, үҙ донъяңды ерҙәге ожмах итеү өсөн күңел байлығы, ныҡышмаллыҡ, ике яртының рухташ, маҡсатташ, бер бөтөн булыуы ла етә икән...

**Гүзәл ҺЫРЛЫБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# БАШҠОРТ ЙӘЙЛӘҮҘӘРЕ

## Беҙ улар хаҡында нимә беләбеҙ?



### Һәр ауылдың үҙ йәйләүе

Башҡорт йәйләүҙәре тураһындағы мәғлүмәтте һәр кантон үҙенсә килтергән. Троицк кантоны Туңғатар улысы ауылдарының йәйләүҙәре хаҡында ҡыҫҡа ғына мәғлүмәт бирелгән. Мәҫәлән, "башкиры деревни Тунгатаровой имеют кочевки в 3-х местах: на Урале 1-я на речке Черный, 2-я на речке Каинсаул, 3-я на хребте горы Урала", - тиелә.

Стәрлетамаҡ кантонындағы йәйләүҙәр тураһында ла бик ҡыҫҡа һүрәтләмә бирелгән. Әммә унда йәйләүҙәр майҙанының күләме лә күрһәтелгән. Мәҫәлән, "На речке Куганак в устье ключа Камышлы от деревни Юмагузиной в 15 верстах, примерно 3000 десятин (1 гектар 0,915 дисәтинәгә тиң - **А.Ю.**)", - тиелгән.

Йәйләү тураһында тулыраҡ мәғлүмәт 2-се Верхнеуральск кантоны (1-се, 2-се, 3-сө Бөрйән, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Түңгәүер, Тамъян, Күбәләк-Тиләү улыстары башҡорттарының йәйләүҙәре) буйынса бирелгән. Бында йәйләүҙәр ҡасан барлыҡҡа килгән, уларҙың күләме, бер ауылдың күпме йәйләүе бар, ҡайҙа урынлашҡан, унда ниндәй айҙарҙа йәйләгәндәре хаҡында ҡыҫҡаса яҙылған. Мәҫәлән, Ҡатай улысына ҡараған Уҫманғәле ауылының йәйләүе өс урында (дөрөҫөрәге яҙлауы, йәйләүе һәм көҙләүе) булған: "1-я кочевка основана предками по р. Умур, которая занимает пространства гористой и лесной местности до 4 верст. Кочуют с 10 мая по 1 июня. 2-я кочевка находится по р. Умур с внезапамятных времен, которая занимает гористой и лесной местности до 2 верст. Кочуют с 1 июня по 10 августа. 3-я кочевка находится на р. Умур с внезапамятных времен, которая занимает гористой и лесной местности до 2 верст. Кочуют с 1 августа по 1 октября".

Йәйләүҙәрҙең күләме төрлө улыстарҙа төрлөсә булған. Түңгәүер улысының ауылдары аҙ булһа ла, улар биләгән йәйләүҙәр киң булған. Мәҫәлән, Исмаҡай ауылының (билдәле яҙыусы Яныбай Хамматовтың тыуған ауылы, хәҙерге Белорет районына ҡарай) өс йәйләүе булған. Беренсеһе 7000, икенсеһе 6000, өсөнсөһө - 8000 дисәтинә территорияны биләгән: "1-я по речке Кургашлы, занимает до 7000 десятин лесной и горной местности. Кочуют с 25 мая по 25 июня. 2-я по речке Нугуш, занимает до 6000 десятин лесной и горной местности. Кочуют с 25 июня по 25 июля. 3-я по безимяным ключам на горе Юрматау, занимает до 8000 десятин лесной и горной местности. Кочуют с 25 июля по 25 августа". Шул уҡ ваҡытта күрше Тамъян улысындағы ауылдар күп, ә йәйләүҙәре 50-100 дисәтинә булған. Мәҫәлән, Ярлыҡап ауылының йәйләүҙәре тураһында былай тип яҙылған: " 1-я кочевка занимает 50 десятин горной и лесной местности по р. Яман-илга и ключу Каркабат. Кочуют с 1 июня по 1 июля. 2-я кочевка занимает 45 десятин лесной и горной местности по ключу Кабак-Айрасы. Кочуют с 1 июля по 1 августа. 3-я Кочевка эта занимает 55 десятин лесной и горной местности по р. Кара-илга. Кочуют с 1 августа по 1 сентября".

Бәләбәй кантонындағы йәйләүҙәрҙә нисә баш йылҡы, һыйыр, кәзә-һарыҡ йөрөүе тураһында ла мәғлүмәт бирелгән. Мәҫәлән, Ҡаңлы-Төркәй (хәҙерге Бүздәк районына ҡарай) ауылы буйынса: "1-я кочевка на речке Юрми на пространстве 20 верст в окружности, 2-я кочевка на речке Чермасане на пространстве 20 верст. На пастбище бывает скота: лошадей 700, рогатого скота 450, овец и коз 2000 голов. Местность эта в летнее время употребляется ежегодно на сей предмет", - тип яҙылған.

Силәбе өйәҙенә ҡараған 4-се башҡорт кантоны улыстарындағы (Атъетәр, Һарт-Ҡалмаҡ, Ҡатай, Мөхәмәтҡол, Мәтәл улыстары) башҡорттарҙың йәйләүҙәре бөтәһе лә күлдәр буйында урынлашҡан булған. Мәҫәлән, бөгөнгө Ҡурған өлкәһенә ҡараған Тәңреғол (милли хәрәкәт эшмәкәре, ғалим Ғәлимйән Тағандың тыуған ауылы) ауылы йәйләүе: "при озере Муксин, отстоящем от деревни на 0,5 верст. Кочевка длиною 3 версты и шириною 1,5 верста. Отчасти занята лесом", - тиелә. Әйткәндәй, Ғәлимйән Таған эмиграцияла башҡорттарҙың йәйләүе һәм унда мал көтөү үҙенсәлектәре тураһында яҙып ҡалдырған.

Ырымбур өйәҙенә ҡараған 1-се башҡорт кантонындағы (Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Сәйет, Йомран-Табын, Яңы Башҡорт, Бөрйән-Ҡыпсаҡ, Ҡара-Ҡыпсаҡ, Бошмаҫ-Һыуын-Ҡара-Ҡыпсаҡ, Бошман-Ҡыпсаҡ, 1-се, 2-се, 3-сө, 4-се Үҫәргән һәм Түңгәүер улыстары) йәйләүҙәре буйынса ярайһы уҡ тулы мәғлүмәт бирелгән. Әммә бында һәр ауылдың йәйләүе айырым түгел, ә ауыл йәмғиәттәренең, йәғни ошо йәмғиәткә ҡараған 4-5 ауылдың йәйләүҙәре бергә күрһәтелгән. Мәҫәлән, Бошмаҫ-Һыуын-Ҡара-Ҡыпсаҡ улысының Бикес ауыл йәмғиәте йәйләүе түбәнгесә һүрәтләнгән: "Бикичевское сельское общество состоит из 5 деревень: Бикичева, Тляумбетева, Кулчурина, Таваканова и Даут-Каипова кочуют по р. Тогузтемир и на впадающей нее р. Усерган-Узяк верст 25 от зимовок, а после около своих деревень на местах отчасти лесных".

Ә бына Түңгәүер улысының (бөгөнгө Йылайыр районы, өлөшләтә Баймаҡ һәм Хәйбулла районы территорияһында) йәйләүҙәре Статистика комитетын игенселек, йәғни урыҫ крәҫтиәндәрен күсереп ултыртыу йәһәтенән ҡыҙыҡһындырған, күрәһең. Юҡҡамы ни, йәйләүҙәрҙең игенселеккә яраҡлылығы күрһәтелгән:

"1. Якуповского сельского общества башкиры д.д. Якуповой, Ишимбетевой и Максютовой своим кочевьем занимали местность в прежнее время на Среднем Макане и озере Узунь (Длинное), а ныне на реке Сакмаре по ключам: Япар-Саз, Карамалы-Маскырт, Шикар, Алми-Узяк, Сауль-Саз, Алат и Янгыз-Каин в окружности около 15 верст, местность, занимаемая сими кочевками, гористая и каменистая, с редкими небольшими колками леса и не удобная к хлебопашеству.

2. Салимовское сельское общества башкиры д.д. Салимовой, Балапановой, Мухаметрахимовой, Дильмухаметовой, Абдулкаримовой и Султантемировой кочевьем своим занимают местность прежде и ныне по речкам Козя-Таш до озера Асяу, Среднему Макану и Таналыку на протяжении 4 верст вверх по течению от грани 4-го Усерганского общества и в вершинах р. Чертанлы-Узяк (Суртанүҙәк - А.Ю.), занимая по длине всех кочевок пространства около 15 верст, а по перег около 8 вер., в окружности около 45 вер., местность сия возвышенно-каменистая безлесная равнина с солонистыми местами, не удобная к хлебопашеству.

3. Куватовского сельского общества башкиры д.д. Куватовой, Ишкузиной, Ишбердиной, Алгазиной и Абдулкаримовой своим кочевьем занимают местность ныне и в прежнее время в вершинах р.р. Малого и Большого Бузавлыка и Кабан-Кильган окружностью около 4-х верст. Местность, занимаемая сими кочевками, холмистая и каменистая степь, ни к чему более не удобная, исключая кочевок.

4. Юлдыбаевское сельское общества башкиры д.д. Юлдыбаевой, Кашкаровой, Гумеровой, Ишбулдиной и Мухаметвалиевой своим кочевьем занимали местность в прежнее время по р. Таналыку на пространстве около 4 вер. вверх по течению от грани 4-го Усерганского общества, в вершинах р. Кызыл-таш и озере Ялтыр-Куль, а ныне в вершинах р. Бузавлыка и озере Ялтыр-куль, окружностью прежние около 47, а нынешние около 10 верст. А также на р. Сакмаре около брода Сювар-бар, по р. Сыир-ульган и Маскырт. Местность, занимаемая прежними кочевками, представляет в общей массе гористо-каменистая степь, а нынешняя ровная с небольшими холмами и отдельными колками леса, на реке же Сакмаре лесная гористо-каменистая и не составляет общего участка, но отдельными местечками и во всех местах не удобная к хлебопашеству и сенокошению.

5. Абдулнасыровское сельское общества башкиры д.д. Абдулнасыровой, Рафиковой, Исмагиловой и Янгазиной своим кочевьем занимают местность ныне и в прежнее время по р.р. Ургазасын, Казя-Таш, на Среднем Макане от грани 4-го Усерганского общества на 5 верст и озере Сюлюкли (Пиявочное). Кочевки эти занимают окружностью на Ургазасыне около 10 верст, а остальные с небольшими возвышенностями степи, ни к чему более не удобную, исключая кочевок.

6. Валитовского сельского общества башкиры д.д. Валитовой, Габбясовой, Гадиловой, Юмагузиной, Султангузиной и Абдулмамбетевой своим кочевьем занимают местности по р.р. Кулдаргум и Ургазасын и озерах Сюлюкли (Пиявочное) и Узунь (Длинное) пространство всей местности в окружностью занимает около 20 вер. Местность сия представляет каменистую с небольшими холмами степи, ни к чему более не удобную, исключая кочевок".

### Иген баҫыуҙарында иген үҫмәй

Үрҙәге яҙылғандарҙан күренеүенсә, түңгәүерҙәр биләгән йәйләүҙәрҙең игенселек өсөн яраҡһыҙ икәнлеген XIX быуаттың урталарында уҡ яҡшы белгәндәр. Әммә шуға ҡарамаҫтан был ташлы ерҙәрҙе совет заманында һөрөп, иген баҫыуҙары яһағандар. Ә хәҙер был ташландыҡ баҫыуҙарҙа ҡый үләненән башҡа бер ни ҙә үҫмәй, меңәр йылдар буйына мал көтөү өсөн ҡулланылған ҡылғанлы яландар юҡҡа сығарылған. Был үҙ сиратында экологияға ҙур зыян килтерҙе, йылғалар һайыҡты, байтаҡ ҡырағай ҡош-ҡорт, йәнлектәр юҡҡа сыҡты.

Бөгөн был яҡтағы игенселекте "зона рискованного земледелия" тип атайҙар. Сөнки йыл да тиерлек ҡоролоҡ булып тора. Ата-бабаларыбыҙ быны күптән белгән. Улар юҡҡа ғына игенселеккә ҡарағанда йылҡысылыҡҡа өҫтөнлөк бирмәгән. Меңәр йылдар дауамында тупланған тәжрибә, климат шарттары уларға бында малсылыҡ менән шөғөлләнеү ҡулайыраҡ икәнлеген өйрәткән булған.

Шуны әйтергә кәрәк, көньяҡ-көнсығыш башҡорттары, атап әйткәндә түңгәүерҙәр, борондан игенселек менән дә кәсеп иткән. Быны тарихи сығанаҡтар ҙа раҫлай. Мәҫәлән, XIII быуат башында йәшәгән билдәле үҫәргән бейе Мөйтәнгә (ул Үҫәргән, Түңгәүер, Ҡыпсаҡ, Бөрйән һәм Тамъян ырыуҙары союзын етәкләгән шәхес) ҡобайырҙа түбәндәге юлдар бар:

*Өсөнсө ырыу түңгәүер, ти*
*Төп шөғөлө ер эше, ти.*

Әммә көньяҡ-көнсығыш башҡорттары игенде үҙҙәренә кәрәкле миҡдарҙа ғына сәскәндәр.

**Шулай итеп, башҡорт халҡының йәйләү ысулы менән мал көтөүе - батша властары, совет тарих фәне кәмһетеп ҡараған "кочевание" түгел, ә меңәр йылдар дауамында тупланған тәжрибә буйынса, тәбиғәт шарттарына яраҡлаштырылған, тәбиғи балансты (экологияны) боҙмаған, уның менән гармонияла булған ҡулайлы хужалыҡ итеү ысулы булған.**

**Азат ЮЛАН.**
**(Аҙағы).**

*✓ Олоно - оло, кесене - кесе итеү, тәүфиҡ, иман, рух көсө, кәрәк саҡта юмор менән һөйләшә белеү, атай абруйын күтәреү, шәфҡәтлелек - әсәйем һалған орлоҡтар ошолар.*

# ИР АБРУЙЫ

## Шундай фекерҙә

**Шәхестең яҙмышы уның тәүге уҡытыусыһына, ауылдаштарына, уратып алған мөхитенә нык бәйле. Кемгә нисектер, миңә атай-әсәйҙе лә, ауылдаштарҙы ла, мөхитте лә, тәүге уҡытыусыны ла Хоҙай һайлап-һайлап, иң яҡшыларҙан биргән. Йылдар үткәс, хәтер яңыртыу, иң яҡын кешеләремдең күңел киңлеге, алсаҡлығы, ҡунаҡсыллығы, туған йәнлелегенең серен асыу өсөн ҡабат таныш өйҙөң ишеген асып индем. Мөҙәрис, Радис, Фәнис атлы ир-уҙамандарға, Нурзидә, Рүзидә, Фәрбизә исемле һылыуҙарға ғүмер биреп, уларҙың барыһын да уҡытып, юғары белемле итеп, быйыл 80 йәшен тултырған Шәмсикамал Кәримова инәйҙең хәлен белмәксе булдым был юлы. Мунсанан сығып ҡына тороуына ҡарамаҫтан, тиҙ генә сәйен шыжлатып ебәрҙе инәйебеҙ. Күршелә йәшәгән ҡыҙы Фәрбизә апайҙы һәм ейәнсәре Ләйсәнде, килене Гөлшатты ла сәй табыны артына саҡыра һалды. Шулай итеп, сәй артында һүҙ әсәй, атай тәрбиәһенә, ғаилә ағзалары араһындағы мөнәсәбәттәргә төшөп китте. Ғөмүмән, башҡорт ғаиләһендәге тәрбиәне лә төҫмөрләргә була был әңгәмәнән, тип, уны гәзит уҡыусыларға тәҡдим итәм.**

**Шәмсикамал Кәримова:** Элек тормош бигерәк ауыр булды шул. Әсәйҙәр бушаманы, төндө-төнгә ялғап эшләнеләр. Беҙҙе тәрбиәләп ултырырға ваҡыттары ла булмағандыр инде. Ғаиләлә ике бала үҫтек. Вәрис энем бар ине, ваҡытһыҙ китеп барҙы был донъянан. Әсәйҙәр эшкә китһә, өйҙә эшләгән, үҙебеҙсә донъя көткән булабыҙ. Бер-беребеҙгә терәк булып, ярҙамлашып, эш рәтен белеп үҫтек. Һаманғаса ауырлыҡ менән сана һөйрәп утын ташыуыбыҙ хәтерҙә ҡалған, әйтерһең, ғүмер буйы утын ташығанбыҙ ҙа утын ташығанбыҙ.

Мәле еткәс, никах сәғәте һуҡҡас, 18 йәшемдә Рәсүл Рәхмәтуллинға (Кәримовҡа) тормошҡа сыҡтым. Ул армияға киткәс, ҡайны-ҡәйнә, уларҙың ғаиләһе менән дүрт йыл бергә йәшәнем. Туғыҙ айлыҡ булып ҡалған оло улыбыҙ Мөҙәрис атаһы ҡайтҡанда бишенсе йәше менән бара ине инде. Ҡәйнә ҡулында йәшәгәндә ике бала менән Сания ҡайынбикәмдәр, унан һуң шахтала эшләп йөрөгән ҡайным ауырып ҡайтты. Бер өйҙә бер заман 14 кеше булып киттек. Ҡайным ауырый. Тын юлдары сире менән интеккәс, нык йүткерә. Бик яҡшы кеше ине, йәне йәннәттә булһын. Ҡулымдан килгәнсә, үҙем белгәнсә хеҙмәт итергә тырыштым ҡайным менән ҡәйнәмә. Улар бер саҡ әсәйемдән: "Ҡоҙағый, был баланы ҡайҙа үҫтерҙең?"- тип һорағандар хатта. Нимә тиһәләр ҙә, ишетмәнем дә, күрмәнем дә, баш баҫып эшләп тик йөрөй торғайным шул.

Бына хәҙер һәр таң атҡан һайын, иртә тороп, доға ҡылам, матур тормошҡа һөйөнәм. Балаларҙың гел шулай зәңгәр күк аҫтында, ғәзиз ата-әсәләре ҡосағына һыйынып, ғүмер кисереүен теләйем. "Һеҙҙең бала саҡ бик бәхетле, ҡәҙерен белегеҙ, тырышып уҡығыҙ. Хәҙер тырыштар өсөн бөтә мөмкинлектәр бар", - тием ейән-ейәнсәрҙәремә. Рәхмәт, алты балам, килен-кейәүҙәрем, 18 ейән-ейәнсәрем - барыһы ла юғары белемгә эйә. Араларында банк хеҙмәткәрҙәре, табиптар, юристар, педагогтар, социолог, психолог, ветврач та бар. Бөтән балаларымдан, килен-кейәүҙәремдән уңдым. Бәхетлемен тип һанайым үҙемде. Тормошомдан бик ҡәнәғәтмен. Рәсүлем менән гөрләшеп алтын туйыбыҙҙы ла үткәрҙек. 60 йыллыҡҡа 6 ай ғына етмәй, үкенесле китте ҡартым. Бөгөн икәүләшеп шул көндәргә кинәнеп йәшәһәк ине лә бит...

**Фәрбизә Мусина, ҡыҙы:** Әсәйебеҙ үтә тыныс холоҡло, сабыр, кешеләргә итәғәтле, зирәк аҡыллы, кешелекле, тәрбиәле, башҡаларға һис ҡасан ауыр һүҙ әйтеп күңелен ҡырмаҫ, ир кешенең дәрәжәһен һаҡлап, ғаилә нигеҙенең ныҡлы, татыу, тотороҡло булыуын тәьмин итеүсе булды. Олоно - оло, кесене - кесе итеү, тәүфиҡ, иман, рух көсө, кәрәк саҡта юмор менән һөйләшә белеү, атай абруйын күтәреү, шәфҡәтлелек - әсәйем һалған орлоҡтар ошолар.

ул күңел киңлеге, рухи байлыҡ.

Атайым ауылда оҙаҡ йылдар бригадир, һуңынан мәктәптең хужалыҡ эштәре мөдире булып эшләне. Бик талапсан, ләкин үтә ғәҙел кеше булды Рәсүл ағай, тип иҫләй уны бөгөн дә ауыл халҡы. Хәҙер әҙерәк түрә булып алһалар, ҡул аҫтында эшләгән кешеләргә ҡысҡырып, кәмһетергә лә оялмаған, иң тәүҙә үҙенә, туғандарына урын ҡайғыртҡан, үҙе өсөн генә йәшәгән, идара итергә яратҡан, һәр ерҙә лә үҙен төп фигура итеп иҫәп-тимәгәндер инде. Әсәйем дә ҡайныһын ҡарап, рәхмәттәрен алып ҡалған, минең дә ҡайным булды, ҡәйнәм 48 йәшендә генә мәрхүмә булған. Ҡайным биш баланы яңғыҙы үҫтергән. 85 йәшендә вафат булды ул. Уның рәхмәттәрен алғанмындыр тип уйлайым, эштәрем уң килеп кенә тора. 2009 йылда Президент грантына ла лайыҡ булдым.

Инәйемдең гел генә, кеше менән этләшмәгеҙ, ваҡлыҡтарҙан өҫтөн булығыҙ, тигәне беҙгә күсеп, хәҙер беҙ үҙ балаларыбыҙҙы шулай тәрбиәләйбеҙ. Шулай уҡ иң ҙур тәрбиәнең береһе - хеҙмәт булғандыр. Элек сөгөлдөр сәсә торғайнылар, шуны бер нисә тапҡыр утап, көҙөн ҡаҙып тапшырабыҙ. Әсәйем Йыланлыға барып, кәзә алып ҡайтты бер ваҡыт. Шуның йөнөн тарайбыҙ, әсәйем шәл бәйләп һата. Кис-ҡырын беҙ ҙә бәйләм бәйләгән булабыҙ. Буш ваҡытыбыҙ булманы ла ул. Әсәйҙәр ыңғайына, уларҙан күреп, эш рәте белеп үҫтек. Хәҙер балалар ҙа, беҙҙе эшкә өйрәтеп үҫтерҙегеҙ, тип рәхмәт ҙҙең ғаиләһенә ҡарата ла иғтибарлыбыҙ, туған йәнлебеҙ. Бар эште бергәләп атҡарабыҙ. Өйҙәрҙе лә бергәләп һалдыҡ, туйҙарҙы ла бергәләп үткәрҙек, шулай булғас, был эштәрҙең артыҡ ауырлығы ла һиҙелмәй. Кәрәк икән, ир-ат эше, ҡатын-ҡыҙ эше тип тә бүлеп ҡарамайбыҙ, кем бушыраҡ, кемдең ваҡыты бар, бергәләп эшләп ҡуябыҙ. Әле үҙем килен алғас, улыма, ҡатын эше, ир эше тип айырма, килен бала менән ултыра, ул да арый, бергә эшләп өйрәнегеҙ, тием. Ғөмүмән, беҙҙең ғаиләлә килендәр, кейәүҙәр атайым менән әсәйемә үҙ балаларына ҡарағанда ла ҡәҙерлерәк һымаҡ ине. Ағай-апайҙарыбыҙ ҙа шундай. Килһәләр, "Һеңлемде матур ҡара, энемде матур тәрбиә ит", тимәйҙәр бер ҙә, гел генә "Кейәүҙе матур ҡара, килендең хәтерен ҡалдырма", тип ултыралар. Үҙең әсә булмайынса әсәй ҡәҙерен белмәҫһең, үҙең атай булмайынса атай ҡәҙерен белмәҫһең, тигәндәй, үҙебеҙ ҡайны-ҡәйнә булғас ҡына ысынлап та шулай кәрәк икәнлеген аңланым,

80 йәштә лә төрлө гәзит-журналдар уҡырға, радио тыңларға ярата ул, яңылыҡҡа ынтылышы сикһеҙ һоҡландыра. Әсәйҙән күрептер инде, беҙ ҙә китаптар уҡырға әүәҫ булдыҡ. Ауылда әле иң күп баҫмаға яҙылыусылар ҙа - беҙ. Гөлдәр үҫтерергә, дуҫтарына бүләк итергә ярата. Ғөмүмән, кешеләргә бүләк бирергә әүәҫ инде ул. Бер ай алдан бүләктәр һайлай башлай, ул байрамды еткерә алмай хәле бөтә, бүләгем оҡшармы икән, тип борсолоп та ала.

Һәр кешене ихласлап ҡаршы алыу, сәй эсермәйенсә ебәрмәү ҙә әсәйемдең бер матур сифаты ул. Ут йә газ тикшерергә киләләрме, почтальонмы - рәхәтләнеп самауыр артында сәй эсә-эсә һөйләшеп, ял итеп сығалар. Бәлки, шуғалыр ҙа, беҙҙә бер тапҡыр булған кеше ғаиләнең яҡын дуҫына әйләнә. Бик күп йылдар үткәс тә хәл-әхүәл һорашып, күстәнәстәр биреп ебәреүселәр, телефондан шылтыратып, байрам менән ҡотлаусы таныштар күп. Бына ҡайҙа ләгән, йыш ҡына тупаҫлыҡ күрһәткән әҙәмдәрҙе күреп, ғәжәпләнәһең дә, улар өсөн оялаһың да. Бер кем дә түрә булып мәңге ултырғаны юҡ, ошо хәҡиҡәтте күптәре онота, үкенескә күрә.

Кеше ғүмеренең, тормош һуҡмаҡтарының һәр артылышында маҡсаттар ҙа үҙгәрә бара. Маҡсат менән йәшәү - оло бәхет ул. Атай-әсәйемдең хәстәрлекле ҡанаты аҫтында үҫеү бәхетен татыным. Өлгөлө ғаилә ҡороу теләгем дә, шөкөр, тормошҡа ашты. Иптәшем Ғилман Ғарифулла улы менән 30 йыл татыу ғүмер итеп, бер-беребеҙ өсөн йән атып йәшәйбеҙ. Ирем менән икебеҙ ҙә тәүҙә педучилище, һуңынан ситтән тороп юғары уҡыу йортон 5 бала булғас тамамланыҡ. Юғары белем алыу - заман талабы ла, тормош алдында ҡуйған маҡсатҡа ынтылыш та ине. Ата-әсәйем уҡыуға булған дәртебеҙҙе хупланы ғына. Ағай-апайҙарыбыҙҙан да өлгө алғанбыҙҙыр инде.

Юҡҡа ғына халыҡ аҡылы "Әсәнән күргән - тун бескән" әйтә. Эшләгәнебеҙ кеше өсөн булһа, өйрәнгәнебеҙ үҙебеҙ өсөн булды. 5-се кластан салғы тотоп, өлкәндәр ыңғайына бесән сапҡан була торғайныҡ. Күпме генә сапҡанбыҙҙыр инде. Беҙгә тип бәләкәй генә салғылар эшләгәйне атайым. Бесәнлек урман эсендә. Ҡайһы берҙә бер урында бесәнде алтышар тапҡыр әйләндерәбеҙ. Ямғыр яуа ла китә, яуа ла китә.

Туған йәнле итеп тәрбиәләгәндәре өсөн дә ҡәҙерлеләребеҙгә рәхмәтлебеҙ. Мөҙәрис ағайым банк системаһында эшләп, бөгөн Башҡортостандың "Дуҫлыҡ" орденын алған хеҙмәткәр. Нурзидә апайым Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы, Рузидә апайым Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы исемдәрен йөрөтә. Фәнис - уҡыусыларының иң яратҡан, хөрмәт иткән уҡытыусыһы - тәрбиәсеһе бөгөн. Беҙ, бер туғандар, бер-беребеҙгә ҡарата ла, бер-беребе

бындай тәрбиә алымының дөрөҫлөгөнә инандым. Үҙендекенә нисек булһа ла үтә, килендәрҙең, кейәүҙәрҙең хәтере ҡалмаһын, тип тырышаһың.

Ата-әсәйемдең күркәм сифаттарын беҙ үҙебеҙҙең ғаиләлә лә дауам итәбеҙ. Азамат, Вадим кейәүемә, Фәриҙә киленемә кәңәшсе, терәк, ярҙамға әҙер ҡәйнә, әсәй, ейәнем Арыҫланға, ейәнсәрем Әлиәгә өҙөлөп, йән атып торған өләсәй, балаларыма дуҫ, ҡыҙҙарыма яҡын әхирәт, серҙәш булып ҡалырға тырышам. Балалар бәхетле булғанда ғына беҙ, ата-әсәләр, бәхетле, тигәнгә инанып йәшәйем.

Ә уҡытыусы булараҡ, балаларҙа белемгә ынтылыш тәрбиәләргә тырышам. Йәштәрҙең күҙҙәрендә моңһоҙлоҡ, ҡулдарында һыра, тәмәке күреүҙәре аяныс. Был тормошта ниндәйҙер ауырлыҡ тыуа икән, киләсәккә өмөт бағлап, лайыҡлы еңеп сығыу юлдарын эҙләргә өйрәтәм. Насар

*Бына хәҙер һәр таң атҡан һайын, иртә тороп, доға ҡылам, матур тормошҡа һөйөнәм. Балаларҙың гел шулай зәңгәр күк аҫтында, ғәзиз ата-әсәләре ҡосағына һыйынып, ғүмер кисереүен теләйем. "Һеҙҙең бала саҡ бик бәхетле, ҡәҙерен белегеҙ, тырышып уҡығыҙ. Хәҙер тырыштар өсөн бөтә мөмкинлектәр бар", - тием ейән-ейәнсәрҙәремә. Рәхмәт, алты балам, килен-кейәүҙәрем, 18 ейән-ейәнсәрем - барыһы ла юғары белемгә эйә. Араларында банк хеҙмәткәрҙәре, табиптар, юристар, педагогтар, социолог, психолог, ветврач та бар. Бөтән балаларымдан, килен-кейәүҙәремдән уңдым. Бәхетлемен тип һанайым үҙемде. Тормошомдан бик ҡәнәғәтмен. Рәсүлем менән гөрләшеп алтын туйыбыҙҙы ла үткәрҙек. 60 йыллыҡҡа 6 ай ғына етмәй, үкенесле китте ҡартым. Бөгөн икәүләшеп шул көндәргә кинәнеп йәшәһәк ине лә бит...*

***✓ Үҙемдең әсәйем дә, ҡәйнәм дә, һәр ваҡыт изгелекле булығыҙ, тип тылҡый. Сөнки изгелек эшләп йәшәүе рәхәтерәк, еңелерәк. Ул һиңә икеләтә, өсләтә изгелек булып әйләнеп ҡайта...***

# АЛДАН ЙӨРӨЙ...

## өләсәй, әсәй, ейәнсәр

уйҙарҙан, көнләшеү кеүек иң алама ғәҙәттәрҙән, ваҡсыллыҡтан, хөсөтлөктән йыраҡ тороғоҙ, сиселмәҫтәй проблемалар булмай, төшөнкөлөккә бирелмәгеҙ, тим йәштәргә.

**Ләйсән Ишемғужина, ейәнсәре:** Ж. Руссо: "Кешене тәрбиәләү ул тыуғас та башлана. Кескенә кеше әле һөйләшмәй ҙә, тыңламай ҙа, әммә өйрәнә", - тип яҙған. Ә кемдән? Әлбиттә, атайҙан һәм әсәйҙән. Улар өлгөһө - иң ышаныслы, иң ныҡлы, иң яҡшы тәрбиә мәктәбе ул. Үҙ-үҙеңә, үҙеңдең көсөңә, мөмкинлектәреңә ышаныу, ауырлыҡтарҙы еңә белеү - былар барыһы ла дуҫ, йылы мөнәсәбәтле ғаилә атмосфераһында барлыҡҡа килә. Әсәй наҙында, атай өлгөһөндә үҫкән бала ғына аҙаҡ үҙ ғаиләһен дә бәхетле итәсәк. Беҙ Мусиндар ғаиләһендә биш бала үҫтек, өсәүебеҙ үҙ аллы тормош юлына аяҡ баҫһаҡ та, һәр саҡ ата-әсәйебеҙҙең тормош тәжрибәһенә таянабыҙ, кәңәштәренә ҡолаҡ һалабыҙ. Әсәйем гел: "Һеҙ, бер туғандар, бер-берегеҙгә таяныс булығыҙ, ярҙамлашығыҙ", - тип үҫтерҙе. Был һүҙҙәрҙе беҙ доға кеүек ҡабул итәбеҙ. Өйҙә бер ваҡытта ла быны эшлә, тегене эшлә йәки былай эшлә, тип өйрәткәндәрен иҫләмәйем. Моғайын, барлыҡ тәрбиә уларҙың үҙ-ара нисегерәк аралашыуында, йәшәү, донъя көтөү өлгөһөндә, ғаилә ағзаларына, тирә-йүндәгеләргә ҡарата булған мөнәсәбәтендә сағылғандыр. Мин әсә тәрбиәһе, ата тәрбиәһе тип айырмаҫ инем. Уларҙы бер бөтөн итеп ҡабул итәм. Беҙҙең ғаиләлә ир эше, ҡатын эше тигән бүленеш юҡ. Күмәкләп дәррәү генә эшләп алабыҙ ҙа, матур итеп ял итәбеҙ, китап уҡыйбыҙ, сәйәхәткә сығабыҙ, туғандарға ҡунаҡҡа барабыҙ. Бар Башҡортостанды урап сыҡтыҡ, иҫтәлекле урындарҙа булыу - үҙе бер шатлыҡ була торғайны.

Хәҙер үҙем әсәй булғас, гел улым эргәһендә булырға тырышам, концерттарға, күргәҙмәләргә бергәләп йөрөйбөҙ. Үҙем өсөн тағы ла шуны асыҡланым: баланы китап уҡырға ла өйрәтергә кәрәк икән! Арыҫланға 6 айлыҡ ҡына сағында өләсәһе "Әлифба" бүләк иткәйне, әле шунан хәрефтәр өйрәнәбеҙ. 1 йәшлек баланың иң яратҡан китабына әйләнде ул. Минең дә китап уҡырға яратыуым ғаиләнән килә. Әсәйем ауылда иң күп матбуғат баҫмаһын алдырған кешеләрҙең береһе, почтальон гәзит таратҡанын дүрт күҙ менән көтә торғайныҡ. Шуныһы ҡыҙыҡ: атайымдың бәләкәй саҡта үҙе яратып уҡыған "Белмәмештең айға сәйәхәте", "Мең дә бер кисә" китаптары ғаиләнең оло ҡомарҡтыһы булып китап кәштәһендә һаҡлана.

Беҙҙең өйҙә һәр саҡ таҙалыҡ, бөхтәлек хөкөм һөрә. Бәләкәй саҡта гел, әсәйемдең тылсымлы таяғы бармы икән әллә, тип аптырай торғайныҡ, уның ҡулы тейгән бар нәмә тәртиптә, шундай матур, ялт итеп тора. Әсәйем үҙе лә гел ыҫпай, матур кейенеп, килешле итеп биҙәнеп йөрөй. Миңә лә өйҙө таҙа тотоу, гөлдәр яратыуым әсәйемдән күскәндер. Әле улыбыҙ бәләкәй генә булһа ла, уйынсыҡтарын уйнап бөтөү менән йыйып ҡуя, ҡулъяулығын тотоп алып саң һөртөп китә, китаптарын матур итеп кәштәгә теҙә, өҫ кейеме саҡ ҡына бысранһа ла, шунда уҡ алмаштырта.

Ғаиләлә беҙгә һәр ваҡыт ышаныс менән ҡаранылар, бәләкәй генә уңыштарға ла ихлас шатланып, баһалап, күңелде күтәрә торғайнылар. Улыма ла мин: "Улым, ҡалай маладис!", "Арыҫлан - батыр, көслө егет", - тиһәм, килеп иркәләнеп, башынан һыйпатып китә. Яратыу - тәрбиә биреүҙең иң яҡшы, ышаныслы ҡоралылыр ул.

Әсәйем менән беҙ, ҡыҙҙар, бәләкәйҙән серҙәш булып үҫтек. Уның һүҙе, нисектер, тынысландыра, өмөт бирә, күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән саҡта уның менән һөйләшһәң, барлыҡ ҡыйынлыҡтар онотола. Әсәйем үҙе ауырып киткән саҡтарҙа ла һәр саҡ оптимист булып ҡалды, беҙҙе тормош ауырлыҡтарына баш эймәҫкә өйрәтте. Ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәт, енси тәрбиә турaһында ла асыҡтан-асыҡ һөйләшә торғайныҡ.

Тәрбиә турaһында әйткәндә, олатайым менән өләсәйемде әйтмәй ҡалдыра алмайым. Ейән менән олатай-өләсәй араһындағы рухи яҡынлыҡ, тәрбиә, өлкәнләрҙе ихтирам итеү, унан һуң үҙ ейәндәреңә шул ғәмәлдәрҙе мираҫ итеп ҡалдырыу - шул бит инде милләтебеҙ йәшәйешенең ҙур бер тармағы. Олатайым менән өләсәйем беҙгә күрше генә йәшәһәләр ҙә, көн буйы тиерлек бергә булдыҡ. Дәрестән ҡайтыу менән уларға йүгерә инек. Уларҙың юмор менән һөйләшеүе оҡшай ине. Уҡыуыбыҙ, ниндәй билдәләр алыуыбыҙ турaһында ҡыҙыҡһына торғайнылар. Тәүфиҡлы, итәғәтле, намыҫлы булығыҙ, тип ҡабатлай торғайнылар гелән. Үҙҙәренең юғары белеме булмаһа ла, шул тиклем аҡыллы, фәһемле кәңәштәр биргәндәр. Улар фекеренсә, бары тик белем һәм тәрбиә генә кешене кеше итә. Мин олатай менән өләсәйҙең бер-береһе менән мөнәсәбәтен гел иҫкә төшөрәм: улар бер-береһенә ҡысҡырып өндәшмәй ине. Өләсәйем гел атай кешене тәүге урынға ҡуйҙы, "Атайың менән кәңәшләш", "Атайың ни әйтер" тигән һүҙҙәрҙе йыш ҡына ишетергә тура килә торғайны. Беҙҙең ғаиләлә ысынлап та атай абруйы, атай алдында яуаплылыҡ, атайҙың һүҙ көсө тәүге урында.

**Гөлшат Кәримова, килене:** Мин үҙем дә күп балалы ғаиләнән, беҙ ҙә өс ҡыҙ, өс малай үҫтек. Шундай уҡ өс ҡыҙ, өс малай үҫкән ғаиләгә килен булып төштөм. Тормошом үҙемдең туған ғаиләмдә дауам иткән кеүек булды. Иң тәү сиратта бында ла яҡты йөҙ, ихласлыҡ менән осраштым. Фәнис менән студент саҡта өйләнештек. Төпсөк малай булараҡ, ул төп йортта йәшәргә тейеш, тигән йоланы тотоп, ауылға йәшәргә ҡайттыҡ. Ир кеше үҙ һүҙен әйткәс, ир шулай була икән, тип, артынан эйәрҙем. Уҡып бөтмәгәйнем, ситтән тороп уҡырға күстем. Балалар тыуғас, уҡып та йөрөүе ауыр булды, ләкин ҡайным менән ҡәйнәм ярҙамында еңеп сыҡтыҡ. Беҙ уларҙы ҡарайбыҙ тип ҡайттыҡ та, ҡайным менән ҡәйнәм үҙҙәре беҙҙе ҡарашты булды инде.

Ауыл балаһы булғас, бер аҙ эш рәте белә торғайным, ҡәйнәм дә өйрәтте. Уның тактикаһы үҙенә башҡа: матур ғына, сабыр ғына итеп өйрәтә. Хатта өйрәтмәй ҙә, ә психологик ысул таба. Бер ваҡыт "Килен, һарыҡ йөнө ала беләһеңме?" тип һорай. Юҡ, тип тороп булмай ҙа инде. Беләм, тигән булдым. Сыҡтыҡ та бергәләп һарыҡ йөнө ала башланыҡ. Барыбер ҙә кеше эшләмәгән эш түгел бит. Йәйләп, ҡәйнәмә ҡарап, һарыҡты тунап алдым да киттем. Бөтөн эште шулай бергә-бергә эшләргә өйрәндем. Белмәгәнен һорашып белдем. Ҡәйнәмдең һәр эшкә үҙенә генә хас алымы бар. Йомшаҡ ҡына итеп, ситләтеберәк кенә, ҡаты бәрелмәй генә һораша, аңлата, бергә эшләшә. Шулай бер-беребеҙҙе ихтирам итеп, аңлашып ҡына йәшәп киттек. Төп йортта ун йылға яҡын бергә йәшәнек. Татыу булмаһаң, ул хәтлем ваҡыт бергә йәшәй алмаҫ инек. Хәҙер үҙем ҡәйнә булғас, киленгә ҡарата ҡәйнәмдең тактикаһын ҡулланам.

Күрше генә йәшәгәс, Фәрбизә апай менән дә бер-беребеҙгә ярҙам итәбеҙ. Хатта мин үҙемә берәй әйбер һатып алһам, уға ла алам. Йә ул үҙенә берәй әйбер һатып алһа, ишенән миңә лә ала. Килен тип айырып ҡарау юҡ, бер туған кеүекбеҙ.

Хәҙер килен-ҡәйнә генә түгел, әсәй менән ҡыҙ, атай менән ул проблемаһы ла йышайҙы. Уның төп сәбәбе ғаиләлә ниндәй тәрбиә алыуҙан киләлер. Кемдер балаһына, бирешеп торма, еңелеп торма, тип өйрәтә, кемдер, еңәм тип тырышмағыҙ, тип тәрбиәләй. Үҙемдең әсәйем дә, ҡәйнәм дә, һәр ваҡыт изгелекле булығыҙ, тип тылҡый. Сөнки изгелек эшләп йәшәүе рәхәтерәк, еңелерәк. Ул һиңә икеләтә, өсләтә изгелек булып әйләнеп ҡайта...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өс быуын вәкиле - өләсәй, әсәй, ейәнсәр һәм килен һөйләгәндәрҙә сағылыуынса, был бәхетле ғаиләлә ир-атты беренсе урынға ҡуйыу, уның һүҙен өҫтөн күреү, балаларҙа атай абруйын һаҡлау, бер-береңә терәк булыу, ярҙамлашыу кеүек йола быуындан-быуынға күсә килә һәм йәшәй. Йә, ошо түгелме ысын мәғәнәһендәге ғаилә өлгөһө?**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

**Салауат районы Лағыр ауылы.**





Фәрбизә апай биш балаһы менән.

*✓ Кемдең холҡо насар - үҙен Ғазапҡа һалыр. Кемдең борсолоуҙары күп - Ауырыуға тарыр. Кем туҡтау белмәй ыҙғыша - Шул егетлеген юғалтыр, Абруйһыҙ ҡалыр.*



## КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ, Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

**246**

Эй бәндәнең сама белмәҫ ғүж ҡорһағы!
Кеше тултырған һауыттар араһында
Был һауыттан ҡомһоҙораҡ ни бар тағы?
Ашағанда ҡарынын кеше өскә бүлһен:
Бер өлөшө булһын уның ашамлыҡҡа,
Икенсеһе булһын уның эсемлеккә,
Өсөнсөһө һулыш алыр өсөн булһын.

**247**

Яҡшылыҡҡа өйрәтеүсе ғалим!
Үҙен-үҙе онота. Бөтә гәме
Халҡы хаҡындағы ғәмдер ул.
Тирә-яҡҡа балҡып нур таратып,
Янып бөтөп барған шәмдер ул.

**248**

Берәй йәндең яралыуын
Тәҡдир иткән икән Аллаһ,
Яралмайса ул йән ҡалмаҫ.

Иртәгә ни хәлдәр булырын,
Был ҡарындан кемдең тыуырын,
Һуңғы сәғәт ҡасан килерен,
Кем үҙенең ҡасан үлерен,
Ҡасан ғына ямғыр яуырын
Яраббиҙан башҡа кем белә?

**249**

Утҡа осҡан күбәләктәр өйөрөн
Уттан ҡыуған кеше шикелле,
Ҡурсалайым һеҙҙе, ә һеҙ һаман
Ҡасаһығыҙ минән һәләкәткә,
Аңлауығыҙ быны икеле.

**250**

Хәләл ризыҡ өсөн тирҙәр түгеп,
Арып-талып йоҡлап киткәндәр! -
Бер гонаһһыҙ үтер был төнөгөҙ,
Ҡабул булыр һеҙҙең көткәндәр.

**251**

Кемдең холҡо насар - үҙен
Ғазапҡа һалыр.
Кемдең борсолоуҙары күп -
Ауырыуға тарыр.
Кем туҡтау белмәй ыҙғыша -
Шул егетлеген юғалтыр,
Абруйһыҙ ҡалыр.

**252**

Бер туҡтауһыҙ дошманлашыу
Баштан ашыр гонаһ өсөн.
Әрләшһәгеҙ һеҙ үҙ-ара,
Иң оҙағы булһын өс көн.

**253**

Атта барған
Йәйәүлегә сәләм бирһен.
Атлап барған
Ултырғанға сәләм бирһен.
Аҙсылыҡ
Күпселеккә сәләм бирһен.

Сәләм ҡайтарғанға
Сауаптыр, ҙурлыҡтыр.
Сәләм ҡайтармағанға
Сауап юҡ, хурлыҡтыр.

**254**

Маҡтаулы эш, сауаплы эш
Кешеләргә биреү хәйер.

Хәйерҙән дә хәйерлерәк
Бирәсәккә биргән әйбер.

**255**

Янда - ҡоҙоҡ. Тик кем белер
Әлһерәгән эт хәлен?
Туҡтап ҡалды аҙғын ҡатын,
Ситегенә бәйләп шәлен,
Ҡоҙоҡтан ул һыу алды ла
Һуғарҙы шул байғош этте.
Эт һуғарыу хатта сауап!
Аҙғын ҡатындың гонаһын
Аллаһ шул саҡ ғәфү итте.

**(Дауамы бар).**

**Спартак ИЛЬЯСОВ**

# АРТЕК

**(Хикәйә)**








Атайымдың күп балалы ғаиләһендә беҙ һигеҙ йән инек: алты ул һәм ике ҡыҙ. Һуғыш бөтөүгә тиҫтә йыл үтеүгә ярайһы уҡ тамаҡ туйғайны инде. Ауылдар бер колхозлыҡ осорон үткәреп, ике-өс ауыл берләшеп, ярайһы уҡ ҙур ғына хужалыҡ булып йәшәй башлағайны.

Һөләймән районның төньяғындағы Мейесле йылғаһының буйында ултыра. Ике яры ла ҡалын, бейек ҡамышлы. Эсенә йырып инермен тимә. Ә шулай ҙа беҙ, бер тырпай ауыл малайҙары, ҡамышты йырып инәбеҙ ҙә, йә Нафиҡ бабайҙың ҡарабалыҡҡа һалған мурҙаһын, йә Ҡасим бабайҙың ауынан балыҡ сүпләп, алдан сиселгән күлдәгебеҙ эсенә һалып, йөҙөп, шул уҡ шау ҡамыш аша алан-йолан ҡарап, һаҡ ҡына кире сығабыҙ. Яланғас тән ҡаты ҡамышҡа сыйылып бөтә, ҡан да тамсылай. Шунда уҡ ярҙа үҫкән "Яра япрағын" иҙеп, сыйылған ергә һутын һөртәбеҙ ҙә, "Иҫке йорт" ағаслығына ҡасабыҙ. Унда балыҡтарҙы бүлешәбеҙ. Арабыҙҙағы йәшкә иң кесебеҙ алғараҡ китеп, арты менән баҫып тора. Ә йәшкә иң олобоҙ һәр өйөмгә бармағы менән күрһәтеп: "Был кемгә?" - тип һорай. Арты менән торған кесе малай сиратлап исемебеҙҙе әйтеп сыға. Ҡайһы ваҡыт өлкән малай шуҡлыҡ күрһәтә. Бер өйөмгә күрһәтеп, исемде һорай ҙа, уны ишетеү менән бармағын икенсе өйөмгә күсерә һала. Шунан китә беҙҙең арала ғауға. Балыҡтарҙы тағы ҡушабыҙ ҙа тағы бүлешәбеҙ. Тик был юлы оло малай үҙе арт менән тора. Ә кесебеҙ бармаҡ менән сиратлап өйөмдәргә күрһәтә. Кеселәр бер ваҡытта ла алдашмай. Малайҙар араһында ғәҙеллекте шулай яулап ала торғайныҡ.

Балыҡты өйгә алып ҡайтыуы үҙе мажара. "Ҡаптырҙыҡ" тип инәйҙе алдап булһа ла, атайҙы йә ағайҙарҙы алдап булмай. Сөнки беҙ ауҙан, мурҙанан алған балыҡтар йә ҡарабалыҡ, йә табан була. Ә был ике балыҡ беҙҙә ҡармаҡҡа ҡапмай, шунан башлана тикшереү...

Күп осраҡта беҙ ҡырға еләк, бөрлөгән, сейә ашарға сығып китәбеҙ. Һарна ҡаҙырға, тип, ҡыҫҡа ғына таяҡты ике яҡлап юнып, көрәк рәүеше кеүек яһап алабыҙ. Алты малай һәр саҡ бергә йөрөнөк. Марат, Фәйез, Сабит, Камил, Талип һәм дә мин. Бөтәбеҙ ҙә бер йылғыбыҙ. Мейесле йылғаһының ашаһында, ауылға ҡаршы, бик ҙур, оҙонлоғо ун, ун биш, киңлеге дүрт-биш саҡырымға йәйелгән һаҙ ята. Мейесле һаҙы тиҙәр уны. Һаҙ эсендә кеше аяғы баҫмаған өс-дүрт утрау һәм ярымутрау бар. Яҙ булдымы, Мейесле һаҙы беҙҙең өсөн дарья диңгеҙгә әйләнә. Унда йөҙәрләгән, меңәрләгән төрлө ҡош! Уларҙың һәр береһенең үҙ телендә ҡысҡырыуы, саҡырышыуҙары тәүлек әйләнәһенә туҡтамай. Һаралйын күктә көҙә булып мыҡырҙай. Ә ерҙә, һаҙ өҫтөндә, кезгетеү, зырҡыуыт, селән, үгеҙ ҡош, тәгәрләк, тартай, аҡсарлаҡ, ике тиҫтәләй төрлө өйрәктәр, ҡыр ҡаҙҙары, аҡҡоштар, торналар һәм башҡа бик күп ҡоштар уйнай. Бер береһен ҡыуышалар, һәр кем үҙенә ҡуш эҙләйме, башҡа төрлө шөғөлмө, сыр-сыуҙан һаҙ өҫтө шаулап тора.

Яҙ көнө балыҡтар йылы, үләнле ергә ыуылдырыҡ сәсә. Ә һаҙҙың үләне йәй көнө сабылмағанлыҡтан, һыу аҫты ҡара урманға әйләнә. Ыуылдырыҡ сәсеү өсөн хөрриәт балыҡтарға. Шул осорҙа суртан да үлән араһына сыға. Ағайҙар эре суртандарҙы һағалап, көсһөҙ генә итеп яһалған яһау менән атып алһа, беҙ, малайҙар, үҙебеҙҙең өлөштө, йә ҡылдан ишелгән мәскәү менән мәскәүләп, йә һыйғыр менән һуғып, иҫәңгерәтеп алабыҙ. Быларын инде, хәләл көс менән тотолған балыҡтарҙы өйгә ғорурлыҡ менән алып ҡайтабыҙ. Батыр булып, мал тапҡыс булып.

Балыҡ бик эләкмәһә, йомран тоторға керешәбеҙ. Ояларына йә итектәребеҙ, йә ботинкаларыбыҙ менән һыу ҡойоп тотабыҙ. Беҙ, алтауыбыҙ ҙа, ауылдағы мәктәптә дүрт класты бөтөп, 4-5 саҡырымда ятҡан Мулдаҡайға көн һайын уҡырға йөрөйбөҙ. Ҡоштарҙы ҡарап ятыр өсөн иртә тороп дәрескә китәбеҙ. Һаҙ ситендә меңәрләгән ҡоштар уйнағанын ҡарап ятып, дәрескә лә һуңлап ҡуябыҙ. Дәрестән сыҡҡас, тағы ла ҡоштарҙы күҙәтергә шул түпһәлгә киләбеҙ.

Минән ике йәшкә өлкән ағайым бар. Әллә икенсе, әллә өсөнсө класта атайым менән инәйем уны уҡытманы. Шуға ла беҙ уның менән бер класта уҡыйбыҙ. Ауырығандыр. Үҙе ябыҡ, үҙе оҙон, бер ҙә йүнләп ит ҡунмай. Әммә көслө ине. Тарамыш. Әҙ һөйләшә. Минең кеүек татылдаҡ та түгел, аҡ та түгел, сәсе лә һары түгел. Ҡап-ҡара, шомороҡ. Миңә олораҡ малайҙарҙың береһе ҡырыныраҡ ҡараһа, уға ағайым менән аралашырға тура килә. Ә ул сапсанлығы, таһыллығы менән малайҙар араһында абруй һанала. Үҙемде хәтерләгәндән алып һәр саҡ алғы бүлмәлә киң ағас карауатта икебеҙ йоҡлайбыҙ. Унан ҡалған кейемдәрҙе инәйем йыуып, ямап, миңә кейҙерә.

Ул йылдарҙа дүртенсе кластан алып унға тиклем йыл һайын дүрт-биш фәндән яҙғы имтихан була торғайны. Көҙгә ҡалһаң, көҙ имтихан бирәһең, булмай икән, кире класыңа ултыраһың. Алға барыш юҡ. Шул бишенсе класта яҙғы имтиханда башҡорт теленән инша яҙыр өсөн Мәжит Ғафуриҙың "Ҡыр ҡаҙы" тигән бик матур хикәйәһе тема булып килде. Ул хикәйәне мин бик ярата инем. Ҡыш көнө өйрәндек беҙ уны. Буран, һалҡын ине. Ә хәҙер яҙ! Етмәһә, барлыҡ ҡыр ҡаҙҙары иртәнән алып төнгә тиклем Мейесле һаҙында ҡаңғылдаша. Фатима апай Исламова "Ҡыр ҡаҙы" хикәйәһен беҙгә бик тәьҫирләнеп уҡып сыҡты. Мин шаҡ ҡаттым. Хикәйәләге малай, әйтерһең дә, мин үҙем. Ул малайҙы үҙем кеүек итеп ҡабул иттем дә, бөтә тәбиғәтте, Мейесле-Мейәс һаҙын тасуирлай-тасуирлай, ҡаҙҙарҙы, улар араһынан берәүһенең яраланыуын, уны тәрбиәләүем, ниҙәр кисереүем тураһында яҙҙым да яҙҙым. Иншаны тапшырып, ҡалған имтихандарҙы ла уңышлы биреп, йәйге каникулға сыҡтыҡ. Урамда күгәрсен күҙҙәре, кәкүк аяғы, аҡ һөттөкәй, күк һөттөкәй мыжғып сығып, сәскә атты. Һөттөкәйҙәр, йыуа, таш араһынан беттекәй өҙөп ашайбыҙ. Алтауыбыҙ һаман да айырыла алмайбыҙ. Ағайым беҙҙең менән уйнамай. Уның үҙ тиҫтерҙәре бар. Улар олораҡтар. Ҡайһы ваҡыт беҙҙең араға килеп, кемдең сәсе ҡаҡ итеп алынған, шуны тотоп, сиратлап башыбыҙға сиртеп китәләр. Кеҫәләрҙе лә ҡапшайҙар. Кемдең бәкеһе бар, уларға күсә. Һыҡтап, ошаҡлашып йөрөмәйбеҙ. Миңә әҙерәк ташлама бар инде, сөнки улар араһында ағайым абруйы ҙур бит.

Берҙән-бер көн киске сәйҙе эсеп ултырғанда ҡайҙалыр барып килгән атайым инәйемә шым ғына хәбәр һөйләй. Беҙ ағайым менән көнө буйы йүгереүҙән арып, ағас карауатҡа саңҡайғайныҡ инде. Ә мин йоҡламайым. Күҙемде ҡыҫҡан кеше булып ята бирәм.

- Хәтимә, бөгөнгө педсоветта Ильястың иншаһын бик маҡтап һөйләнеләр. Райондан килгән инспектор уны үҙе менән алды, районның башҡа мәктәптәрендә уҡырбыҙ, тине, - тигән булды атайым.

- Нәмә булыр икән? - тип инәйем һүҙгә ҡушылды.

- Әллә. Бына ун бишендә районға барам, бәлки, берәй нәмә әйтерҙәр.

Атайым менән инәйемдең был һөйләшеүе шуның менән онотолдо.

Күпме ваҡыт үткәндер... Берҙән-бер көн атайым хәрби плащын ҡул башына һалып, тоғон тотоп, тағы ла ҡайҙандыр ҡайтып төштө. Өйгә инеп, әйбер-һәйберен һалып та өлгөрмәйенсә:

- Хәтимә, Ильясҡа Артекҡа путевка бирәләр. Бөгөн дүшәмбе, йома көндө вокзалға поезға алып барырға кәрәк. Райондан тағы ла өс баланы алып баралар. Ильяс менән дүртәү булалар. Бына нәмәләр әҙерләргә ҡуштылар, - тип инәйемдең ҡулына ҡағыҙ тотторҙо. Инәйем ул ҡағыҙҙы ентекләп уҡып сыҡҡандан һуң:

- Атаҡ-күсәк, ул трусик-майкаларҙы ҡайҙан алайыҡ? Испанкаһын тегербеҙ ҙә ул, - тип аптырап ултырғыҫҡа ултырҙы. Ағайым өйҙә юҡ. Ә мин аяғымды быялаға баҫып ярғанмын да ағас карауатта ятам. Инәйем уны билсәндең киң япрағына төрөп, тыштан сепрәк менән бәйләп ҡуйған. Кис беҙ йоҡлағас, инәйем шым ғына атайыма әйтә:

- Әйҙә, Ильястың урынына Ниязды ебәрәйек. Ябыҡ бит, һимермәй ҙә. Ильяс бит йоп-йоморо, һимеҙ... - Атайым өндәшмәй. Ә мин аңламайым. Нәмә була икән һуң ул Артек? Берәй кәнфит, прәник ашап ҡайта торған ауылмы икән? Әллә Мейесле ҡалаһы кеүек бағана баштарына үгеҙ ҡыуыҡтарына ел тултырып элеп ҡуйылған берәй сит ҡаламы икән? Малайҙарҙан һораһам, улар ҙа белмәй Артекты. Шулай ҙа Марат "Ул һыу керә торған ер. Ана беҙҙең "Үрге күл" кеүек", - тип әйтеп ҡуйҙы.

"Эй! Улай булғас, барып та тормайым мин унда. Һыуҙы өшөгәнсе көн һайын бында ла төшәбеҙ уны", - тип ҡырҡа ҡарар итәм эстән. Иртәгәһен инәйем "Зингер" тигән аяҡ машинкаһының артына ултырып тегенә башланы. Элек миңә салбар, күлдәк текһә, саҡырып, үлсәп-үлсәп ала торғайны. Ә бынһында - юҡ. Саҡырмай бит мине. Мин тышҡа сыҡҡанда ғына ағайымды саҡырып үлсәп алғанын һиҙәм. Инәйемдән көнөнә ике-өс тапҡыр һорайым. Ҡасан миңә "испанка" тегәһең? Ә трусик нәмә була ул? Инәйем миңә теклəп ҡарап-ҡарап торҙо ла:

- Эй балам, балам. Трусик ул ҡыҫҡа ғына ыштан була. Түлке балаҡтары булмай. Мин һинә уны аҙаҡ тегеп бирермен... Әлегә һорамай тор, йәме, тигәс, мин дә ризалаштым. Ул балаҡһыҙ ҡыҫҡа ыштан менән йә бөтә аяҡты, ботто кесерткән сағып бөтәрәр, тип үҙемдә үҙем тынысландырам.

Атайым бер көндө колхоз бригадаһынан егеүле ат алып килде. Кис мине лә арбаһына ултыртып, атҡа төнгөләккә ашарға бесән сабып килтерҙек. Ҡапҡа эсенә инеүебеҙ булды, сит-ситенә ҡыҙыл һалып тегелгән теге трусик тип аталған ҡыҫҡа ыштан, аҡ майка, испанка кейгән ағайым ялт итеп беҙҙең алға күтәрмәгә килеп сыҡты. Шунда минең дә бик трусик-майка, испанка кейгем килеп китте. Өйгә йүгереп индем дә инәйемдән ҡыҙыл һалып тегелгән трусик-майка таптыра башланым. Ә ул өндәшмәй генә минең башҡа нәҡ тә ағайымдыҡы кеүек испанка кейҙерҙе лә.

- Ҡалғанын аҙаҡ тегербеҙ, улым, -тип арҡамдан һөйөп сығарып ебәрҙе. Урамға сыҡһам, ағайымдың трусигын, майкаһын, испанкаһын ҡарарға бөтә тиҫтерҙәребеҙ йыйылған. Бөтәһенең дә ауыҙында Артек. Күбеһе шул трусик, майка, испанканы Артек тип уйлай шикелле. Төрлөсә һорайҙар, тотоп ҡарайҙар. Ағайым ҡайны бер ваҡыт әллә әйтелгәнде тыңлап бөтмәй, әллә уның мәғәнәһен төшөнөп етмәй, әллә игтибарһыҙлығы һөҙөмтәһендә онотоп, ҡайһы ваҡыт атай менән инәйҙе уңайһыҙ хәлгә лә ҡалдыра торғайны. Көндән-бер көн инәйем уны йомошҡа ебәрә. Ағайым әбей менән бабайға барғансы онота бит йомошон, ни тип тә әйтергә белмәй. Аптырағас, бабай менән әбейҙе киске етегә ҡунаҡҡа саҡыра ла ҡайта. Бабай менән әбей кисен, һыйҙыҡҡа ғына кейә торған мыйаттарын кейеп, тәгәйен сәғәттә килеп инәләр. Инһәләр, көткән аш та юҡ, әсе бал да юҡ. Аптырашып, мәсьәләнең әйеш-көйөшөнә төшөнөп, көлә-көлә сәй эсеп, риза булып ҡайтып китәләр.

Ә был юлы малайҙар ағайымдың матур трусигын, майкаһын тикшерә, кейеп ҡарарға биреп тор, тип тә бәйләнәләр. Көтмәгәндә ағайым уларға:

- Мин иртәгәнән алып Ильяс, ә ул- Нияз, - ти. - Бер үк быны берәүгә лә әйтмәгеҙ, әтү белеп ҡалһалар "Артек"те тартып алырҙар, - тип тә өҫтәй. Малайҙар, аптырашып, бер миңә, бер ағайыма ҡарай.

Атайым ат килтергәс, нәмәлер һиҙенәм. Инәйем менән шыбыр-шыбыр нәмәләр һөйләшеп алалар. Бәләкәй генә шыума ҡапҡаслы таҡта сумаҙанға әйбер, бешкән йомортҡа, ит киҫәктәре тултыралар. Кис етте. Инәйем ағайымдан ҡыҙыл бөрмәле трусик һәм майкаһын һалдырып алды. Үҙенең көндәлек ыштанын, күлдәген кейеп алғас, ағайым миңә тағы ла яҡын, үҙ булып китте. Күңел дә тынысланды. Ҡосаҡлашып ятып йоҡланыҡ. Иртән соланда бизрәнең ҡайҙандыр аунап төшөп шылтырауына уянып киттем. Ағайымды һәрмәйем, ә ул юҡ. Һикереп килеп тороп, тәҙрә аша ҡарайым. Ат та, арба ла юҡ. Йүгереп тышҡа сыҡтым. Инәйем гөбөр-гөбөр һыйыр һауа. Иламһырап, ағайым менән атайымды һорайым. Инәйем тыныс ҡына.

- Улым. Хәҙер оло юлдан машина Мейеслегә үтә. Атайың ағайыңды шул машинаға өлгөртөргә алып китте, - тине.

Мин шунда уҡ саяланып, илап, испанкамды кейеп сыҡтым да ауылдан 4 саҡрымдай ерҙә ятҡан оло юлға йүгерҙем. Быялаға баҫҡан аяғым һыҙлай. Үҙем аҡһайым, үҙем йүгерәм. Инәйем артымдан ҡысҡырып тороп ҡалды. Йүгерә торғас, Үргә күлгә лә барып еттем. Ҡараһам, ҡаршыла ат арбаһында атайым килә. Кире ҡайттыҡ. Ул минең ҡайҙа йүгереүем, ә мин унан ҡайҙан килеүен һорамайым. Былай ҙа беләбеҙ. Өндәшмәйбеҙ. Беҙ ирҙәр бит.

Тағы ла аҙна-ун көн ваҡыт үтте. Малайҙар хәҙер миңә исемемдә әйтеп өндәшмәйҙәр. Һәр саҡ Нияз тиҙәр, ә үҙҙәре сырҡылдашып көлөшәләр. Берҙәнбер көн почтальон апай инәйемә ҡағыҙ тотторҙо. Телеграмма тигән нәмә икән. Атайым ҡайтып кергәс, ул ҡағыҙҙы икәүләп уҡып аптыраштылар. Атайым шул уҡ көндө кис тағы ла шул атты килтерҙе. Арба тәгәрмәстәрен икәүләп майланыҡ. Атайым миңә:

- Был юлы, улым, һине лә алып барам. Мейеслегә тимер юлы вокзалына барабыҙ, - тигәс, түбәм күккә тейҙе. Урра, урра! Мин дә Артекҡа барам, мин дә Артекҡа барам. Атай, дуҫым Талипты ла алып барайыҡ, уның да Артекты күргеһе килә, тинем. Атайым ризалашты. Арбала, йәм-йәшел бесән өҫтөндә күккә ҡарап ятабыҙ. Һыйыр көтөүе менән бергә иртәнгелә үк юлға сыҡтыҡ.

- Атай, беҙ Мейеслегә Артекҡа барабыҙмы ул? - тип һорайым. Атайым көләмһерәп, эйе, эйе, улым, ти ҙә ҡуя. Йоҡлап киткәнмен. Бер ваҡыт шаҡ та шоҡ иткән һәм аждаһалай үкергән тауышҡа уянып киттем. Ҡараһам, быуҙарын борҡотоп, шаҡ та шоҡ булып аждаһа килә. Ат өркә. Поезд тигән аждаһаны ат та, минең дә күргәнебеҙ юҡ. Атайым атын бәйләп, миңә бер ҡайҙа ла китмәҫкә ҡушты ла, үҙе аждаһа-поезд яғына шәп-шәп атлап китте. Оҙаҡ ҡына ултырҙым арбала. Шулай тойолғандыр. Поездың һыҙғыртыуына боролоп ҡараһам, ағайымды етәкләп, фанер сумаҙанын ҡулына тотоп, атайым килә. "Ура, ура", тип ҡысҡырып, ҡаршы йүгерҙем. Мейеслелә тәмле һыу, пирожкиҙар ашап ҡайтып еттек. Онотолдо был ваҡиға. Урамдағы малайҙар өсөн һәр беребеҙ үҙ исеменә кире ҡайттыҡ. Тағы ла ярты ай самаһы ваҡыт үтте. Сейә бешеп бара ине. Берҙәнбер көн беҙгә Мулдаҡайҙағы уҡытыусым - инша яҙҙырыусым Фатима Ислам ҡыҙы килде. Күҙҙәренән йәш сыҡҡансы көлөшә-көлөшә сәй эстеләр.

Ә хәл былай булған икән. Артекҡа китеүсе балаларҙы бөтә Башҡортостандан Өфөлә йыйғансы аҙна ун көн ваҡыт үткән. Көн эҫе. Балалар бик һорағас, ҙур күҙәтеү аҫтында уларҙы Ағиҙелгә һыу инергә алып барғандар. Һыуҙа балыҡтай йөҙгән ағайым йыраҡҡараҡ йөҙә лә китә, йөҙә лә китә икән. Унан һай ергә сыға биреп баҫа ла, тағы ла тунҡайып, һыу аҫтына кереп китә икән. Унан сыға ла, ян-яғына ҡаранып оҙаҡ тора. Ярҙағы тәрбиәселәр быны һиҙеп ҡала. Башҡа балалар һыуҙан сығып бөтә. Ә был һаман бер сума, бер сыға икән. Аптырағас, ярҙағы тәрбиәселәр:

- Ильяс, сыҡ, ҡайтабыҙ, тиҙерәк сыҡ, - тип, ҡат-ҡат ҡысҡырһалар ҙа ағайым һаман да сыҡмай икән. Ахыры, йөҙгөр тәрбиәсе егеттәр тегене тотоп алып, ярға табан килтерә башлаһалар, ул ҡарыша, тырнаша, хатта сәйнәшә икән. Үҙе ике ҡулы менән йән ағзаһын ҡаплай, ти. Баҡһаң, уның ҡыҙыл таҫма һалып тегелгән трусигының резинаһы буш булып, һыу ағымына һыпырылып, аҡҡан да киткән. Был сыр яланғас торған да ҡалған икән.

Ҡалаға ҡайтҡас, тыңламайынса, һыуға төпкә йөҙөп китеүе өсөн шелтә эләккән. Ахыры, ағайым үҙен әрләтмәҫ өсөндәр: "Мин Ильяс түгел, әрләмәгеҙ мине, мин бит Нияз, ә Ильяс өйҙә",- тигән. Асыҡлау башланған. Һәм ағайымдың Ильяс булмағанын асыҡлағандар. Иртәгәһенә үк поезға ултыртып ҡайтарып ебәргәндәр. Шулай итеп, атайым менән мин Мейесле тимер юл вокзалында ағайымды ҡаршы алдыҡ. Артек уға ла, миңә лә эләкмәне.

Ауылға ҡайтып, сәй менән тамаҡ ялғағас, тағы ла урамға сыҡтыҡ. Тиҙ генә малайҙар йыйылып китте. Дуҫым Талип менән мин ағайымдан алда: "Беҙ Артек ашаныҡ, Артек эстек", - тип һөйләп алдыҡ. Малайҙар беҙҙең янға өйөлөштө. Ваҡ икмәк валсығы һалыуҙан ауыҙы ҡатып шымарып бөткән салбар кеҫәбеҙгә шундай уҡ ҡатып ярылып бөткән ҡулдарын тығып "Артек" эҙләйҙәр.

Арабыҙҙа туғырағы булған Марат дуҫымдың фекере башҡаса:

-Юҡ, малайҙар, улар Артекты беҙгә эсермәҫ өсөн һауыты менән өйҙә ҡалдырған, - тигәс кенә беҙҙе тентеү туҡтаны.

Нәҡ шул ваҡытта Артектың ни икәнен үҙ күҙҙәре менән "күреп ҡайтҡан" ағайымдың:

-Артек ул ашап-эсә торған нәмә түгел бит. Артек - ул ҙу-у-у-ур йылға, - тиеүе барыбыҙҙы ла нығ аптыратты. Артек нимә икән ул, туғандар?

ЗАУЫҠ

*Рәмзилә ХИСАМЕТДИНОВА*

# ҺӨЙГӘНДӘРҘЕ ЯТТАР ТҮГЕЛ,

## һөйгәне ғәфү итә!

### ҺӨЙӨҮЕМ

Кәрәкмәй кеше данлауы,
кәрәкмәй рухи ярҙам:
мин үҙемдең Һөйөүемә
үҙем ҡиссалар яҙам.
Үҙем яҙам ҡобайырҙар,
мәҙихтәр үҙем яҙам-
берсә аҡылыма киләм,
берсә аҡылдан яҙам.
Мин үҙемдең һөйөүемде
үҙем күктәргә сөйәм,
үҙемдең һөйөү алдында
мин үҙем башым эйәм.
Болартмайым тарихтарҙы,
үрнәктәр эҙләмәйем,
үҙемдең һөйөү алдында
мин үҙем төҙләнәйем!
Хупламаһындар таныштар,
кәрәкмәй кеше һүҙе,
иң оло, иң лайыҡ баһа-
миңә һөйөүем үҙе.

### ЙӘНКӘЙ-ЙӘНӘШ

Мин арыумын, һинең хәлең нисек,
йәнең нисек, йәнкәй-йәнәшем?
Ҡырҡмаһа ҡырҡ уйлы күңелеңә
тағы ниндәй хистәр йәрәштең?
Бәхетеңдән үрә һикерҙеңме,
хәстәр менән нисек көрәштең?
Мин белмәйем, тик барыбер тоям,
булмаһам да йәнкәй-йәнәшең.

Ҡайһы ерҙә, ҡайһы мәлдә тама
хаҡ-баһаһыҙ һиңә күҙ йәшең?
Сүпләп-эҙләп йөрәгемә йыям,
булмаһам да йәнкәй-йәнәшең.
Нәҡ ҡош төҫлө, әсә түшем менән
моронлатам шатлыҡ, өндәш һин!
Осорайым шатлыҡ, өндәш һин,
булмаһам да йәнкәй-йәнәшең.
Ҡолаҡ япрағымды ялҡыныңдан
яндырып бер өндәш: "Йәндәшем!"
Мәңге баҡый йәнкәй булып ҡалам,
булмаһам да йәнкәй-йәнәшең.

### ҠАРАЛАМА ҺӨЙГӘНЕҢДЕ

Һөйгәнеңдең яҡтарынан
иҫһәләр һыуыҡ елдәр,
Һағышыңды йәйге елдә
яланға сығып елгәр.
Селләләр булып көйрә лә
ҡойондар булып ҡойол,
тик аҡылһыҙ үс алыуҙан-
меҫкен ҡалыуҙан тыйыл.
Ирәмәлдәй күккә аш та
Шүлгәндәй ергә уйыл,
тик һөйгәнең күңеленән
аҡтан-аҡ килеш юйыл.
Сафтарҙан-саф килеш юйыл,
Ҡалмаһын һинән хатта,
әгәр ысыҡ булып тамһаң,
эҙ ҙә таңғы япраҡта.
Ҡаралама һөйгәнеңде -
ул да ҡалһын аҡ көйө.
Йәшәһен ерҙә мөхәббәт
ялған түгел, хаҡ көйө.

### ҺӨЙГӘНДӘР

Һөйгәндәр хыянат итә-
һөйгәндәр ташлап китә,
яҡшы-яман ҡаршыһында
түбәнһетә, кәмһетә.
Һөйгәндәр кире киләләр -
яңылыша һөйгәндәр.
Яҡшы-яман ҡаршыһында
улар аҙмы түҙгәндәр!
Яҡшы-яман ҡаршыһында...
Сәйер инде һөйгәндәр-
берсә танауын сөйгәндәр,
берсә башын эйгәндәр...
Һүҙ әйтмәгеҙ һөйгәндәргә -
уларға һуң кем етә:
һөйгәндәрҙе яттар түгел,
һөйгәне ғәфү итә!

* * *

Һыйынған саҡта һөйгән кешеңә,
күктәрҙән йондоҙ, йондоҙ ишелә...
Әммә һин өнһөҙ-һүрелә йондоҙ,
Туңа тереләй, тереләй йондоҙ.
Әйтерһең, күктән йондоҙ ишелмәй,
әйтерһең, күктән яуа борсаҡ, боҙ.
Яуа борсаҡ, боҙ.
Күктә ай ҙа бит
йомарлам боҙҙай, боҙ бер йомарлам.
Һалҡын ҡулдарҙан ҡапыл ҡулымды
тартып алырға, ах, ҡайҙа ярҙам?!
Тартып алам да йүгерәм ары-
Һөймәгәнде мин янғыҙ ҡалдырам,
Сөнки күктәрҙән йондоҙ яуҙырам.

* * *

Мин килермен аҡҡош йөҙгән төҫлө.
Сулпым сылтырамаҫ.
Елберләмәҫ елдә яулыҡтарым,
Тәнкәм ялтырамаҫ.
"Ah!" тиерһең, мине күреү менән,
Бәлки, "уф..." тиерһең.
Әллә инде танау сөйөрһөңмө?
Әллә баш эйерһең?
Мин килермен. Аҡҡош һөйәгеләй,
Еңел һөйәктәрем.
Мин осормон. Ҡош ҡанаты булыр
Талған беләктәрем.
Бер кем һиҙмәҫ минең килгәнемде,
Бер кем һиҙмәҫ минең осҡанымды.
Бер кем күрмәҫ ярһыу хистәремде
Ап-аҡ болоттарға ҡушҡанымды.
Минең өсөн әле шундай һәйбәт
Һис бер кемдең мине күрмәүҙәре.
Кинәт кенә ҡапҡан ялҡынымдан
Бер кемдең дә мине Һүрмәүҙәре...

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘШЕЛСӘ - ЕМЕШ...
## мультивитамин урынына

■ Эш көнөгөҙ тик шыңғай тәьҫораттарҙан ғына торһон, тиһәгеҙ, анар (гранат) һуты эсегеҙ, тип кәңәш итә Эдинбургтағы Королева Маргарет университеты ғалимдары. Был һут үҙендә эшкә көйләргә лә ярҙам итә икән. 60 кеше ҡатнашҡан тәжрибә күрһәтеүенсә, көнөнә 500 мл анар һуты эскән кешеләрҙә эмоциональ күтәрелеш күҙәтелә, улар эштәрен теләп башҡара. Доктор Эмад Ал-Дужайли билдәләүенсә, был тикшереүҙәр анар һутының яңы файҙалы яҡтарын асырға ярҙам иткән.

■ Йоҡларға һуң ятып, һуң торорға ғәҙәтләнгән кешеләр артыҡ ауырлыҡ менән йышыраҡ яфалана. Ғалимдар асыҡлауынса, эш бында йоҡоға бүленгән сәғәттәрҙең һанында түгел, ә дөрөҫ йәшәү рәүеше алып бармауҙа. Тәбиғи биоритмдарҙың боҙолоуы һөҙөмтәһендә кеше күберәк ашай башлай икән. Төн уртаһына тиклем йоҡламаусылар юғарыраҡ калориялы аҙыҡ ашай һәм бер кис эсендә организм өсөн тәбиғи йоҡо режимы күҙәтеүселәргә ҡарағанда 248 калорияға күберәк йыя. Ғалимдар быны сәбәбен кешенең ошо рәүешле төнгә тиклем ултырыуы өсөн энергия туплауында күрә.

■ Күп сирҙәрҙе булдырмау өсөн көн һайын сырҙың ҡаты сорттарын ашау ҙа етә, тип белдерә фин ғалимдары. Финляндияның Турку университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, сырҙағы файҙалы бактериялар - пробиотиктар иммун системаһын нығытыуға булышлыҡ итә. Эксперттар фекеренсә, сыр ашау бигерәк тә оло кешеләргә кәрәк.

■ Немец ғалимдары дәлилләүенсә, әгәр ҙә муйын ауырта икән, был физик түгел, ә психологик проблема. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, муйындағы ауыртыуҙар хәүеф тойғоһо һәм депрессия менән туранан-тура бәйле. Шуға ла ғалимдар табиптарға сирлегә диагноз ҡуйғанда иғтибарлыраҡ булырға кәңәш итә. Тикшеренеүҙәрҙә үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла муйын ауыртыуына зарланған 448 ауырыу ҡатнаша һәм табиптар уларҙың 20 процентының депрессия, 28 процентының хәүеф тойғоһо менән бәйле булыуын билдәләй.

■ Бөгөн донъяла һәр икенсе оло кеше һәм бала мультивитаминдар ҡабул итә, әммә уларҙың файҙалымы, юҡмы икәнлеге тураһында бер кем дә уйланмай. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бындай витаминдар ир-егеттәрҙең организмына бер нисек тә тәьҫир итмәй. Мультивитаминдарҙы даими ҡулланған ҡатын-ҡыҙҙар һәм бөтөнләй витаминдар ҡабул итмәгәндәр араһында ла бер ниндәй ҙә айырма булмай сыҡҡан. Шуға ла ғалимдар төрлө витаминдар ҡатнашмаларына аҡса түкмәҫкә, ә йәшелсә, емеш-еләк, итте күберәк ашарға тәҡдим итә.

■ Инглиз ғалимдары D витамины етешмәүе тиҙ ҡартайыуға килтерә, тип иҫбатлай. Улар фекеренсә, D витамины дефициты һәр өсөнсө кешелә бар. Был витаминды "ҡояш витамины" тип йөрөтәләр, сөнки организм уның 90 процентын ҡояш тәьҫирендә ала. Шуға ла ҡояш аҫтында йышыраҡ булырға һәм D витаминына бай аҙыҡ-түлек ашарға (балыҡ, йомортҡа, һөт аҙыҡтары) тырышырға кәрәк.

ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК

# ҒАБДУЛЛА ИШАН СӘИДИ

## "Ғабдулла Сәиди минең рухи етәксем булды", ти Әхмәтзәки Вәлиди



(Башы 1-се биттә).

### Стәрлебашта уҡыған йылдары

Атаһы үлгән осорҙа үҫмер Ғабдулла Сәйетбатталов Муллаҡай мәҙрәсәһендә уҡып йөрөгән була. Атаһының вафатынан һуң әсәһе Шәмсийыһан балалары менән Стәрлебашҡа күсеп ҡайта һәм унда Ғабдулланы мәҙрәсәгә уҡырға бирә. Стәрлебаш мәҙрәсәһе электән төрки халыҡтары араһында дан тотҡан уҡыу йорто була. Ғабдулла һабаҡты оло дәрәжәле мөғәллим һәм мөҙәристәрҙән ала. Улар араһында йәш, талантлы һәм күнелсәк Ғабдуллаға иң ныҡ тәьҫир иткән һәм уның шәхес булып формалашыуына булышлыҡ иткән мөғәллим, Көнсығыш әҙәбиәте белгесе, шағир һәм фәйләсүф Зәки Шәмсетдин була. Уның әҫәрҙәре матди байлыҡҡа, данға ынтылыусыларҙы тәнҡитләү менән бер рәттән, Аллаһы Тәғәләгә һөйөү, кешелектең аҡыл ҡеүәһенә, аңлы һәм тырыш ғәмәленә ышаныс менән һуғарылған. Был ғалим һәм мөғәллимдең һабаҡтары Ғабдулла күңелендә ижад ҡомары бөрөләндерә, ул да шиғриәт менән мауыға башлай.

Стәрлебаш мәҙрәсәһендә Ғабдулла Сәйетбаттал 12 йыл уҡый. Һәләтле шәкертте артабан үҫтереү уйы менән уҡыу йорто етәкселеге 1859 йылда Бохара мәҙрәсәһенә уҡырға ебәрә. Был мәҙрәсәне уңышлы тамамлағас, шунда уҡ үҙенең мәсетен һәм мәҙрәсәһен асып, имам, мөҙәрис вазифаһында хеҙмәт итә. Был турала яҙма документтар юҡ. Шулай ҙа үткән быуаттың 90-сы йылдарының икенсе яртыһынан бер үзбәк кешеһе Муллаҡайҙа йәшәп ятҡан Ғабдулла Сәйетбатталдың ейәнсәре (Мөхәмәтәнүәрҙең ҡыҙы) Зәйтүнә апайға килеп, Бохара ҡалаһында Сәиди мәсетенең әле лә һаҡланыуы, үзбәктәрҙең был исемде бик ҙурлап хәтерендә һаҡлауы тураһында бәйән итә, үҙе менән бергә ул яҡтарҙы барып күрергә саҡыра. Ләкин Зәйтүнә апай бара алмай, ҡаты сирҙән аяҡтан яҙа.

### Ғабдулланың Муллаҡайға ҡайтҡаны

Көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда йәшәгән Бөрйән, Тамъян, Түңгәүер ырыуы башҡорттарының да дини һәм донъяуи мәғарифҡа ынтылышы көсәйеп, ғилемгә ихтыяжы үҫә бара. Бөрйән ырыуы зыялылары был турала бер нисә тапҡыр осрашып кәңәш ҡорғандан һуң, милләтебеҙҙең йәш быуынын заман талабы кимәлендә тәрбиәләү зарурлығын күҙ уңында тотоп, Ғабдулла Сәйетбатталовты ҡайтарып алыу һәм уның белемен, ойоштороу һәләтен урындағы үҫмерҙәрҙе тәрбиәләүгә, уҡытыуға йүнәлтеү тураһында һүҙ беркетә. Кемдәр һуң улар?

Бөрйән-Таналыҡ улысы начальнигы Хәбибулла Баймырҙа улы Ҡансурин, 2-се Бөрйән улысы Иҙрис ауылынан ахун Мәхмүт Дәүләткирәев, Назар (Атанғол) ауылы улысы старшинаһы, сотник Миҙәтғәле Мәтиновтар инициаторҙар яңы мәҙрәсә төҙөү эшенә керешә. Матди сығымдарҙың ҙур өлөшөн үҙ өҫтәренә алалар, етмәгәнен яҡын-тирә башҡорт ауылдарының хәлле заттарынан иғәнә итеп йыялар. 1870 йылда 34 йәшлек Ғабдулла хәҙрәт ырыуҙаштары, урындағы хакимиәт һәм дини йәмғиәттең саҡырыуын ҡабул итеп, Муллаҡайға ҡайта. Исам-хатиб үҙ мөдәрислек дәрәжәһенә имтихан тотҡандан һуң 1872 йылда тәстиҡ ителә. Был турала РБ Дәүләт архивында (Ф-И-295, оп. 10, д. 123, стр. 109) "Ведомость описи мечетей состоящих при них духовных лиц и прихожан обоего пола Орского уезда Оренбургской губернии за 1870 год" тигән документта "В деревне Муллакаевой 1 мечеть, прихожане 204 мужского, 202 женского пола. Мечеть соборная. При Мечети определен муллой башкир Саитбатталов. Указ Губернского правления от 5 августа 1872 года № 2494" тип яҙылған.

### Ғаилә хәле

Ғабдулла Сәйетбаттал 1871 йылда мәҙкүр улыстың Иҫәнбәт ауылы имамы Ҡотлозаман Байбуловтың Мәймүнә исемле ҡыҙына никахлана. Унан ике улы һәм өс ҡыҙ донъяға шинаһы булла. Ҡотлозаман 1755 йылғы Бөрйән ихтилалында төп ролдә йөрөүсе Сураш мәргән (Сураш батыр) Ҡолмырҙиндың ейәне.

Икенсе ҡайныһы Мәхмүт Дәүләткирәев - ахун, Иҙрис ауылы мәхәлләһендә имам (1841 йыл был вазифаларға указ алған, документ № 7530), оло абруйлы шәхес булған, тиҫтәләрсә йылдар буйы руханилыҡ хеҙмәтен башҡарған. (Гос. арх. РБ., Ф-и-295, оп. 3, д. 5616).

1890 йылда Ғабдулла Сәиди хәҙрәт өсөнсөгә Темәс ауылында дауахана табибы булып торған Бикарыҫлан Собханғоловтың Зөләйхә исемле ҡыҙы менән никахлаша. Бикарыҫлан Собханғолов - Ҡаҙан университетының медицина факультетын 1842 йылда тамамлаған (тәүге башҡорт табибтарының береһе). Статья "Первые врачи из башкир в Оренбургском крае" автор Шукшинцев И. С. в сборнике "Труды Оренбургской ученой комиссии" (Оренбург, 1903 г.) Ғабдулла Сәидиҙең Зөләйханан Мөхәмәтнәжиб һәм Мирзасалих исемле уландары тыуа. Ә ҡыҙҙары Сәжиҙәнең Ҡарағай-Ҡыпсаҡ улысы Байғаҙы ауылынан Заһретдин Мөхәмәт Хафиз улы никахында ғүмер кисереүе билдәле.

килә. Оло улы Мирзаһит, икенсеһе Мөхәмәтәнүәр, ә ҡыҙҙары - олоһо Фатима Верхнеурал өйәҙенең Тамъян-Түңгәүер улысы Ҡырҙас ауылы имамы Сәлимйән Бикйән улы никахында, икенсе ҡыҙҙары Файза шул уҡ улыстың Буранғол ауылы ахуны Ғәбделхәй Мөхәмәтзариф улы никахында, өсөнсө ҡыҙы Сәғиҙә Бөрйән-Таналыҡ улысы Мәмбәт ауылында Фазулла Әсәҙулла улы никахында була. Мирзайән исемле улы һәм Шәрифә исемле ҡыҙы йәш бала ваҡыттарында вафат булмыштыр.

1875 йыл Ғабдулла Сәйетбаттал (Сәиди) хәҙрәт Иҙрис ауылынан ахун Мәхмүт Дәүләткирәев хәҙрәттең Райхан исемле ҡыҙына никахланып, унан 3 ул, 2 ҡыҙ бала тыуа. Олоһо МөхәмәтМаһар, уртансыһы үҙенең урынына имам-хатиб булған Сәйетәхмәт, кесеһе - Мөхәмәтәшрәф исемле була. Ҡыҙҙары Хәнифә - Ҡырҙас ауылына, Ғәбиҙә - Моҫтай ауылына, Бибисәрүәр - Өмөтбай ауылына тормошҡа сығып, шунда бала-сағалы булып донъя көтөп йәшәгәндәр.

Ошо урында Ғабдулла Сәидиҙең ҡайны йорттары тураһында ла туҡталып китәйек. Уның тәүге ҡатынының атаһы Ҡотлозаман Байбул улы Иҫәнбәт ауылы мәхәлләһендә имам-хатиб булып тора, ә атаһы йорт стар-

Шулай итеп, Ғабдулла Сәидиҙең туған-ырыу тармаҡтары Урал арьяғында киң таралыу алған. Улар Сәйетов, Бикйәнов, Маһаров, Сәлихов, Абдуллин һәм башҡа бер нисә фамилиялы ғаиләләр.

### Хаж сәфәренә барғаны

Ғабдулла хәҙрәткә ике тапҡыр хаж сәфәре ҡылыу насип була. Тәүгеһе 1881 йылда булып, юлдаштары 2-се Бөрйән улысы Үргә Этҡол (хәҙерге 2-се Этҡол) ауылынан Ибниәмин Әхмәр улы, Яйыҡбай ауылынан Суфиян Мөхәмәтйәр улы һәм Бөрйән-Таналыҡ улысынан Байыш ауылы имамы Аллабирҙе Ҡотлоғужа улы була.

Икенсе хаж сәфәре 1899 йылда була. Бынының уның менән бергә үҙенең ауылдашы Фәтихулла Баймө-

✓ *Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең "Хәтирәләре"ndә Ғабдулла Сәиди тураһында бер нисә урында туҡталып, уға ҡарата матур мөнәсәбәтен белдерә. Шуларҙың береһендә "Ғабдулла Сәиди минең рухи етәксем булды" ти.*



хәмәт улы, Күсей ауылынан Хужәхмәт Игебаев, 1-се Бөрйән улысы 1-се Этҡол ауылынан улыс фельдшере Йәноҙаҡ Азаматов һәм Тамъян-Түңгәүер улысы Ҡырҙас ауылынан Бикйән Хәсәнетдин улы сәфәрҙәштәр була.

Темәс ауылының 1-се мәхәллә мәсете имам-хатибы үҙенең мөғәллиме, замандашы һәм остазы Ғабдулла Сәидиҙең хаж сәфәре тураһында "Муллаҡай" исемле бәләкәй генә китабында (Р. Н. Мәһәҙиев, "Муллаҡай", Типография газеты ВАКТЪ Въ Оренбурге 1916 г.) шулай тип яҙа: "Беҙҙең илебеҙҙән һис кем хаж сәфәренә барғаны юҡ заманда юлбашсыһы булып барып ҡайтыуы халыҡҡа бик ҙур үрнәк булды".

## Аралашҡан фекерҙәштәре

Төрлө сығанаҡтарҙағы материалдарҙан Ғабдулла Сәиди хәҙрәттең аралашҡан һәм рухи үҫешенә етди йоғонто яһаған бик күп күренекле шәхестәрҙе, уның замандаштарын атарға мөмкин. Беренсенән, уның атаһы Сәйетбаттал Нурмөхәмәтов, әсәһе Шәмсийыһан ғилемгә, ислам дине нигеҙҙәрендә юғары әхлаҡи сифаттарға эйә булған мөғәллимдәр, үҙ заманының алдынғы кешеләре. Артабан Ғабдулланың Стәрлебаш мәҙрәсәһе мөғәллимдәре - Ниғмәтулла Туҡаев, Зәки Шәмсетдин, мәҙрәсәлә шул осорҙа бергә уҡыған һабаҡташтары Мифтахетдин Аҡмулла, Ғәли Соҡорой, Зәйнулла Рәсүлевтар менән аралаша, фекерҙәш була.

Ғабдулла Сәиди шәхесе тураһында башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе, Башҡортостан автономияһына һәм Рәсәй федерализмына нигеҙ һалған сәйәси эшмәкәр һәм донъя кимәлендә билдәле ғалим Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың эскерһеҙ фекерҙәре айырыуса ҡиммәт. Ул үҙенең "Хәтирәләре"ndә Ғабдулла Сәиди тураһында бер нисә урында туҡталып, уға ҡарата матур мөнәсәбәтен белдерә. Шуларҙың береһендә "Ғабдулла Сәиди минең рухи етәксем булды" ти. Әхмәтзәки Вәлиди үҙ ғаиләһенең мосолман руханиҙары менән тығыҙ бәйләнештә аралашып йәшәүе, улар араһында күсле ғалимдар, муллалар, Троицкиҙан Зәйнулла ишан һәм Муллаҡай ауылынан Ғабдулла мулла булыуын билдәләп китә. Һүҙен дауам итеп, "Бохарала ғилем алған Ғабдулла мулла ислам дине даирәһендә бик абруйлы булды, ғәрәп һәм фарсы телдәрендә шиғырҙар яҙҙы, йәштәрҙең уҡытыусыһы, тәрбиәсеһе, остазы булараҡ оло хөрмәткә лайыҡ шәхес ине", - тип айырып әйтә.

## Мәҙрәсәлә алдынғы белем бирелгән

Әхмәтзәки Вәлиди һүҙҙәренән дә аңлашылыуынса, Муллаҡай мәҙрәсәһендә шәкерттәрҙе уҡытыу-тәрбиә системаһы ғәмәлдә заман талабына яраҡлы, алдынғы һәм төплө була. Мәҙрәсәлә дин уҡытыу менән бер рәттән, донъяуи фәндәрҙе өйрәнеүгә, ғәмәли күнекмәләргә етди иғтибар бирелә. Дәрестәр шәкерттәргә яҡын, аңлайышлы төрки телендә халыҡ педагогикаһына таянып, яңы ысул менән алып барыла.

Мәҙрәсәлә йәштәрҙе киләсәктә үҙ аллы уйшыл йәшәүгә, дини һәм донъяуи ғилемдәргә, төрлө һөнәрҙәргә эйә булыуға, донъя көтөү, ғаилә тәрбиәләүгә өйрәтеүгә етди иғтибар бирелә. Бында ир балалар физик яҡтан сынығыуға, сәләмәт йәшәү рәүешенә йәлеп ителә, уларҙы төҙөлөш эштәренә, ағас эшкәртеү, йорт-ҡура күтәреү, балсыҡ менән эш итеү, унан төрлө буяуҙар яһау, тимер менән эш итеү, умартасылыҡ, им-том һәм халыҡ медицинаһы нигеҙендә дауалау кеүек һөнәрҙәргә өйрәтәләр. Ә ҡыҙ балалар йорт эштәренә, аш-һыу әҙерләүгә, кейем тегеү, бәйләү, сигеү һөнәрҙәренә маһирлыҡҡа Мәймүнә абыстайҙан өйрәнә. Был турала Ғабдулла Сәидиҙең улы Мөхәмәтәнүәр һәм уның ҡыҙы Зәйтүнә апай һөйләүенән билдәле. Улар үҙҙәре лә бик күп һөнәрҙәргә эйә ине.

Ирәндек - Ҡырҡты буйҙары төҫлө металдарға бай. Был да Ғабдулла Сәидиҙең иғтибарынан ситтә ҡалмаған. Шәкерттәренә урындағы тау тоҡомдарына, үҫемлектәргә ҡарап, алтын, көмөш, баҡыр мәғдәндәре ятҡылыҡтарын төҫмөрләү серҙәрен өйрәткән. Мәҫәлән, ситтән килеп, ваҡ-төйәк көнкүреш тауарҙары менән сауҙа итеп йөрөгән, алтын мәғдәнен күреп тә белмәгән Мөхәмәтсадиҡ Рәмиев һәм уның Муллаҡай мәҙрәсәһендә уҡыған уландары Ғабдулла Сәиди йоғонтоһонда һәм өйрәтеүе буйынса мәғдәнселек менән мауығып китә.

Муллаҡай мәҙрәсәһендә уҡып сыҡҡан талиптар төрлө һөнәргә маһирлығы менән тирә-яҡҡа билдәле булған. Талиптарҙың тәрән белемле, һөнәрле, таһыллы һәм һәр эштә етеҙ булыуы мәҙрәсә мөдәрисе Ғабдулла ишандың шәхси сифаттары менән ныҡ бәйләнгән. Уның энциклопедик ғалим булыуын шәхси китапханаһындағы әҙәбиәтенән үк күреп була. Китаптарының тулы булмаған теҙмәһен үрҙә күрһәтелгән автор Рәхмәтулла хәҙрәт Мәһәҙиев үҙенең "Муллаҡай" китабында килтергән, һаны 200 том самаһы. Араһында дини китаптар, сит ил сәйәсәтселәренең юлъяҙмалары, Ҡөрьәндән тормош өсөн сығарылған ҡанундар, хәҙистәр, бәйғәмбәрҙәрҙең үрнәк тормошо, ғәрәп грамматикаһы, ғәрәп, фарсы, үзбәк авторҙарының әҫәрҙәре, белем, әхлаҡ тураһында нәсихәттәр, "Нәҡшбәндиә" йүнәлешендәге серҙәр, "Файҙалы эштәрҙе еңелләштереү", "Хайуандарҙың тереклек ҡылыуы", "Мәхлүктарҙың ғәжәиб хәлдәре" әҙәбиәт коллекцияһы булған. Китаптар теҙмәһендә мөҙәристең үҙе яҙған егермеләп хеҙмәтенең исемдәре теркәлгән. Мәғлүм булыуынса, Ғабдулла хәҙрәт ғәрәп, фарсы телдәрендә уҡыған һәм яҙған, шиғри һәм башҡа жанрҙарҙа ижад иткән.

Хәҙрәттең китапханаһындағы ҡиммәтле, оло әһәмиәткә эйә булған әҙәбиәт, үҙе тарафынан яҙылған баҫма һәм ҡулъяҙма рәүешендәге хеҙмәттәре 1930 йылдарҙа илдә хөкөм һөргән сәйәси золом-йәбер осоронда юҡ ителә. Улы Мөхәмәтәнүәр бер гонаһһыҙ репрессияға дусар ителә.

## Шәкерттәре кем булған?

Муллаҡай мәҙрәсәһендә төрлө йылдарҙа 200-ҙән 400-гә тиклем шәкерт уҡығаны билдәле. Улар башлыса Уралтау, Урал арьяғы биләмәләрендә йәшәүсе Бөрйән, Тамъян, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Түңгәүер ырыуҙары башҡорттары була. Улар уҡыуҙы тамамлағас, ауылдарҙа дини хеҙмәт һәм мөғәллимлек менән мәшғүл булған. Үрҙә әйтелгән Рәхмәтулла хәҙрәттең хеҙмәтендә беҙ уларҙы имам-хатип, мөәзин, мөҙәрис һәм ахун дәрәжәһендә күрәбеҙ. Уларҙың ҡайһы берҙәрен атап әйтеп китеү урынлы булыр.

Элекке Орск өйәҙе 2-се Бөрйән улысы Назар (Атанғол) ауылы егете Мәтинов Шаһишәриф Миҙәтғәле улы Моҫтай ауылында имам-хатип, 1890 йылда ахун, 1906 йылда Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты, 1910 йылда Орск өйәҙендә земство идараһы дини һәм мәғариф бүлеге мөдире, 1917 йылда Бөрйән-Түңгәүер кантоны рәйесе, Ырымбур ҡалаһының Почетлы гражданы була.

Ағалы-ҡустылы Мөхәмәтшакир һәм Мөхәмәтзакир (Дәрдмәнд) Рәмиевтар, билдәле алтын сәнәғәтселәре, "Ваҡыт" гәзите һәм "Шура" журналы нәшерселәре. Закир Рәмиев күренекле татар шағиры.

2-се Бөрйән улысы Иҙрис ауылында ахун Фазулла Мәхмүт улы Дәүләткирәев, имам-хатип Сирғәле Ғәйетбаев; Муллаҡай ауылында имам-хатип Сәйетәхмәт Ғабдулла улы; икенсе имам Хәбибулла Фәйзулла улы, мөәзин Тәхәүтдин Камалетдин улы; Әмин ауылында имам-хатип Фәтхулла Хисмәтулла улы, мөәзин Ғәбдрафиҡ Ғилмин улы; Темәс ауылының 1-се мәхәлләһендә имам-хатип Рәхмәтулла Наушируан улы, имам Әбүбәкер Дәүләтҡол улы, мөәзин Ғиниәтулла Хөснөтдин улы, Темәс ауылының 2-се мәхәлләһендә имам-хатип Ғабдулла Ғәбделвәли улы, икенсе имам Ғәбделҡәйүм Мөхәмәтасҡар улы; Ҡолсора ауылында имам Мифтахетдин Дәүләтҡол улы, мөәзин Мостафа Юлдашкилде улы;Иҫән ауылында имам Сәхиулла мулла Йонос улы, мөәзин Әхмәр Әбүбәкер улы; Байым ауылында имам-хатип Фәттәхетдин мулла Заһретдин улы; Үрге Этҡол ауылы 1-се мәхәлләһендә имам-хатип Ғәбделвәхит Мансур улы, 2-се мәхәлләлә имам-хатип Мәхмүт мулла Хажиәхмәт улы; Яйыҡбай ауылында мәзин Ғәбделсалих Суфиян улы; Мостафа (Моҫтай) ауылында имам Заһиҙулла Хажмөхәмәт улы; Иҫәнбәт ауылында имам-хатип Фазулла Йәләлетдин улы; 1-се Төркмән ауылында имам-хатип Ғабдулла Мөхәмәтшафиҡ улы, уның вафатынан һуң имам Ғаззали Ғабдулла улы; 2-се Төркмән ауылында имам Минһажетдин Хажмөхәмәт улы; Күсей ауылында имам-хатип Хәйрелбәшәр Хәсән улы, икенсе имам МөхәмәтХафиз Садиҡ улы һәм башҡалар бар. Ғабдулла Сәиди ишандан һабаҡ алыусы заттарҙан хужалыҡтың төрлө тармаҡтарында, бигерәк тә мәғариф өлкәһендә хеҙмәт итеүселәр күп.

Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙан килеп уҡыған талиптарҙан Ырыҫмөхәмәт Хантыуаровтың үҙ илендә имам-хатип вазифаһында хеҙмәт итеүе билдәле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғабдулла Сәиди ишан оло абруйға, халыҡ ихтирамына лайыҡ шәхес. Уны ислам донъяһында Ғабдулла бин Сәйет әл-Булғари әл-Бөрйәни әл-Һаҡмари тип йөрөткәндәр. Ошо көндәрҙә Баймаҡ районында атаҡлы дин әһеле 175 йыллығы киң билдәләнә. 9 июлдә райондың Муллаҡай ауылында йыйын үтәсәк. Сара иртәнге 10 сәғәттә башлана.**

Әмир СӘЙҒӘФӘРОВ.
Баймаҡ районы.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Үҙеңде һөйөүгә көйлә

Тарих берберҙар тураһында тәүге тапҡыр беҙҙең эраға тиклем 1300 йылда, улар Төньяҡ Африканың ниндәйҙер районынан Мысырға килгәс ишетә. Берберҙар яңы урынға аҙыҡ эҙләп килә. Беҙҙең эраның 200-сө йылына улар Сахараның көньяғында төпләнә һәм оҫта тимерсе булып дан ҡаҙана. Тиҙҙән улар Төньяҡ Африка тормошоноң айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләнә һәм Урта диңгеҙ ярҙарында өҫтөнлөк итә. Тарихҡа берберҙар ҙур өлөш индермәй. Был, моғайын да, уларҙың яугир түгел, ә, киреһенсә, татыу һәм мөхәббәтле халыҡ булыуын раҫлай. Әммә бөгөн дә тарихсылар һәм журналистар тыныслыҡҡа иғтибар бирмәй, һуғыштарҙың мөһимлеген баһаларға тырыша.

Ваҡыт үткәс, бербер ҡалалары римляндарҙың йолаларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен үҙҙәренә ала. Күптәре Римдә төпләнә. Бөгөн Ер шарында 15 миллион самаһы бербер йәшәй һәм улар бер нисә диалектта һөйләшә. Уларҙың барыһы ла тиерлек мосолман һәм ғәрәп ғөрөф-ғәҙәттәрен тота.

Бәлки, һеҙ үҙгәртергә теләгән өлкә булып тап һөйөү өлкәһе торалыр. Үҙгәрештәр башланһын тиһәгеҙ, тәү сиратта, уларға ихтыяж тойорға кәрәк. Һеҙгә тормошта мөхәббәт күберәк булһын өсөн, үҙегеҙҙең мөхәббәтегеҙҙе тирә-яҡтағылар менән бүлешеү теләге тыуырға тейеш.

Һеҙгә үҙегеҙ теләгәнсә мөнәсәбәттә булмаған бер нисә кешене иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Уларҙы А, Б, В тип алайыҡ. Уларҙы ҡылығығыҙҙы үҙгәртеүгә йүнәлтелгән күнекмәгә ҡуйығыҙ. Күнекмәне бер нисә тапҡыр уҡып сығығыҙ һәм яҡшы итеп хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

## Нисек итеп һөйөүҙе күберәк сағылдырырға?

- Яҡшылап ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, тәрән итеп тын алығыҙ һәм тыныс, ятраҡан картинаны күҙ алдына килтерегеҙ.
- Беренсе кешене - А-ны - күҙ алдына килтерегеҙ. Уны нисек итеп күреп өйрәнгәнһегеҙ, шулай итеп уйлағыҙ (эштә, өйҙә һ.б.). Аңлашылмаусылыҡ етмәгәнен тойоғоҙ.
- Уйығыҙҙа ғына: "Мин мөнәсәбәттәребеҙҙе үҙгәртергә, уға күберәк мөхәббәт индерергә теләйем", - тип ҡабатлағыҙ.
- Уйығыҙҙа ғына был кешене ғәфү итегеҙ. Шунда уҡ мөнәсәбәттәрегеҙҙең яҡшы яҡҡа үҙгәргәнен күҙаллағыҙ.
- Кире ҡайтығыҙ.
- Шуны уҡ Б һәм В менән ҡабатлағыҙ.
- Өс тапҡыр уйығыҙҙан ғына: "Көндән-көн мин күберәк һөйөү бүләк итәм һәм башҡаларҙы яҡшыраҡ аңлайым", -тип ҡабатлағыҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм донъя һеҙҙе һөйөү менән ҡаршы алғанын белеп, ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.
- Яҙылғандарҙы үҙләштереп, уны үҙ аллы ҡабатлағыҙ. Күнекмәне көнөнә өс тапҡыр өс көн рәттән ҡабатлағыҙ.

Һөҙөмтәһен тиҙ көтәһегеҙме? Әгәр иртәгә эшегеҙҙә етәксегеҙ әрләһә, күңелегеҙ ныҡ ҡайтырмы? Был бит һөйөү түгел, шулай бит?

Шуны аңлағыҙ - һеҙ үҙгәрҙегеҙ. Тыныс ҡалып, шат һәм итәғәтле булып ошо үҙгәрештәрҙе күрһәтә башлаһағыҙ, улар тирә- яҡтағыларҙы ла үҙгәртер. Һөҙөмтәне саҡ ҡына көтөргә кәрәк.

Роберт СТОУН.

✓ ***Алмағастың ботаҡтарына бәләкәй генә шешәләргә креолин һалып, элеп сыҡһағыҙ, осоусы ҡоротҡос бөжәктәр килмәй. Креолин булмаһа, икенсе берәй көслө аңҡыған еҫле шыйыҡса йәки май ҙа ярай.***



ЙӘШЕЛ ДАУА

## МУЛЛАЙӘН ҮЛӘНЕ

**Муллайән үләненең (герань) бөтә төрө лә бер үк дауалау сифатына эйә. Уларҙың бөтәһе лә шеште ҡайтарыу, йоғошһоҙландырыу, ауыртыуҙы баҫыу, ҡанды туҡтатыу сифаттарына эйә. Дауалау маҡсатында был үләндең япраҡтары, сәскәләре, тамыры ҡулланыла. Улар менән яңы барлыҡҡа килгән яман шеш, һөйәктәр һыныуын, гастрит, энтерит, өҫкө тын алыу юлдары ауырыуҙары, аҙыҡ менән ағыуланыу, дизентерия, йөҡөһоҙлоҡ, эпилепсия, ревматизм һәм подагра, стенокардия һәм тахикардия ауырыуҙарын дауалайҙар.**



**Шизофрения.** 2 стакан ҡайнар һыуға 2 балғалаҡ муллайән үләнен алырға. 8-10 сәғәт төнәтергә (төнгөләккә ҡуйырға). Һәр 2-3 сәғәт һайын 1 ҡалаҡ ҡабул итергә (ауырыуҙың энергетик майҙанын тәҙәтә, йоҡоһон яҡшырта, ҡуҙғыусанлыҡты баҫа).

**Полиартрит, ревматизм, подагра, остеохондроз.** Үрҙә килтерелгән төнәтмә ошо уҡ ауырыуҙарҙы дауаларға ярҙам итә. Курсты ауырыуҙың хәле яҡшырғансы үтергә. Төнәтмә менән бер юлы ауырыуҙың һыҙлаған быуындарына сылатҡыстар ҙа яһарға мөмкин.

**Бөйөрҙәң таш ауырыуы.** 10 г (2 балғалаҡ) киптерелгән ҡоро тамырға бер стакан һыу ҡойорға, һүрән утта 7-8 минут ҡайнатып алырға, 1 сәғәт төнәтергә, баштағы күләменә еткәнсе ҡайнар һыу ҡойорға. Көнөнә 4-5 тапҡыр ашар алдынан 2 ҡалаҡ ҡабул итергә. Был төнәтмәнең ҡиммәте шунда, ул таштарҙы сығармай, ә иретә.

**Стенокардия.** 5 ҡалаҡ кипкән муллайән үләненә 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 2-3 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 4-5 тапҡыр ашағанға тиклем 1-2 ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Ҡан төкөрөү, балаятҡынан ҡан китеү, геморройҙан ҡан ағыу.** Уларҙы тиҙерәк туҡтатыу өсөн 2-3 сәғәт һайын 20-30 тамсы яңы үлән һутын ҡабул итергә кәрәк. Әгәр танауҙан ҡан килһә - танау тишегенә үлән һутында сылатып алынған мамыҡ ҡуйырға. Әгәр яңы үлән булмаһа, үлән тамырынан ҡаты төнәтмә яһарға мөмкин. Быны өсөн 1-2 ҡалаҡ үләнде бер стакан һыу һалып 5-7 минут ҡайнатып алырға. Һыуынғансы төнәтергә, ҡан туҡтағансы һәр 2-3 сәғәт һайын 1-2 ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Онкология.** Бөтә төр яман шеш ауырыуы ваҡыттарында ла үләндең һыуыҡ төнәтмәһен ҡабул итәләр: 1 ҡалаҡ үләнде 2 стакан ҡайнатып һыуытылған һыуға һалып 8 сәғәт төнәтергә, көн дауамында эсергә.

## АЙЫУ КӨПШӘҺЕ

**Дарыуҙар әҙерләү өсөн айыу көпшәһенең (дягиль) тамырҙары, япраҡтары, орлоҡтары ҡулланыла. Уны нервы системаһы ҡаҡшағанда, хроник һәм көслө невралгия, ревматизм, подагра, люмбаго, көслө һәм хроник ларингит, бронхит, бронхиаль астма, хроник гастрит, оҙайлы колит булғанда ҡабул итәләр. Айыу көпшәһе сәйе интоксикация ваҡытында ҡандан ағыуҙы сығара. Был үләндең киптерелгән сәскәһенең бер тажын көн һайын иртәнсәк порошок кеүек иҙеп бер аҙ күләмдә йөҙөм шарабы менән ҡабул итеү өйәнәктән (эпилепсия) һаҡлай.**



**Панкреатит.** Стаканда 10 г айыу көпшәһенең киптерелгән үләнен бешереп алырға. 2 сәғәт төнәтергә. Һарҡытырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр 50 мл ҡабул итергә.

**Төрлө ерҙә тупланған яман шеш.** Бер стакан ҡайнар һыуға 3 ҡалаҡ айыу үләне тамыры алып 30 минут еңелсә генә ҡайнатып алырға, 10 минут төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашағандан һуң эҫе көйөнсә ярты стакан ҡабул итергә.

**Өйәнәк (эпилепсия), нервылар ҡаҡшауы.** Бер стакан ҡайнар һыуҙа 3 ҡалаҡ үлән тамырын төнәтергә (ҡайнап торған һыу быуында 30 минут тотоу тағы ла яҡшыраҡ, ә тиҙерәк әҙерләнһен өсөн еңелсә 4-5 минут ҡайнатып алырға мөмкин). Көнөнә 2-3 тапҡыр ашағандан һуң ярты-шар стакан ҡабул итергә.

**Ревматизм, подагра, мускулдар ауыртыуы.** Шундай уҡ төнәтмә яһарға һәм ашағандан һуң эсергә.

**Бөйөрҙәр, бәүел ҡыуығы ауыртыуы, эс ҡатыу һәм күбеү.** Үлән тамырын порошок итеп иҙергә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 0,5 г һыу менән ҡабул итергә.

**Айыу көпшәһе препараттары ҡан ойоуын күтәрә, шуға күрә уларҙы инфарктан һуң тромбоз ваҡытында тәғәйенләргә ярамай. Шулай уҡ был үләнде гиперацид гастрит булғанда ҡулланыу тыйыла.**

## ТУМЫРТҠАБАШ

**Тумыртҡабаш үләне (клевер) халыҡ медицинаһында киң ҡулланыла. Уның төнәтмәләре бик күп сирҙәргә дауа булып тора.**

**Ауыртыулы һәм ваҡытһыҙ килгән күрем.** 2 ҡалаҡ тумыртҡабаш үләненә 1 стакан ҡайнар һыу



ҡойорға, ҡапҡаслап 6-8 сәғәт төнәтергә (төнгөләккә ҡуйырға). Тәүлек әйләнәһенә ашарҙан 20-30 минут алда 4/1 стакан эсергә.

**Йоморҡалыҡтар шешеүе.** 1 ҡалаҡ үлән тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыу быуында 30 минут тоторға. Һыуытырға, һарҡытырға. Ашарҙан алда көнөнә 4-5 тапҡыр 1 ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Һары һыу ауырыуы, быуындар шешеүе.** Быяла банка тулғансы тумыртҡабаштың яңы сәскәләрен һалырға, үҫемлек майы ҡойорға һәм ҡараңғы урында 40 көн төнәтергә (өҫтөнә күк ултырмаһын өсөн күҙәтеп торорға кәрәк, сәскәләр майҙан сығырға тейеш түгел). Һыуытҡыста һаҡларға. Һары һыу булғанда көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда бер ҡалаҡ ҡабул итергә. Быуындар шешкәндә көн һайын ауыртҡан урындарға һөртөргә.

**Тышҡы яман шештәр.** 2-3 шәлкем тумыртҡабашҡа ҡайнар һыу ҡойоп 10 минут торорға, һыуын түгергә. Төпрәләрҙе йылы көйө 1-2 сәғәткә сылатҡыстар эшләргә. Йәйге ваҡытта ошо уҡ маҡсаттар менән яңы япраҡтарҙан бутҡа һалырға.

**Диабет.** Тумыртҡабаштың 2-3 киптерелгән башын бешереп сәй эсеүҙе ғәҙәткә әйләндерергә кәрәк (ябай сәй урынына).

**Тиренең аллергия ауырыуҙары, васкулит, витилиго (ала ауырыуы).** 3 балғалаҡ ҡоро үләнде бер стакан ҡайнар һыуҙа бешереп алырға, 1 сәғәт төнәтергә һәм көнөнә 4 тапҡыр стакандың дүрттән бер өлөшөн эсергә. Бер үк ваҡытта сылатҡыстар эшләргә: бер стакан ҡайнар һыуҙа 2 балғалаҡ үлән сәскәһен бешереп алырға һәм 5-6 сәғәт төнәтергә. Сылатҡыстар ваҡыты сикләнмәй.

**Сәстәр ағарыуы.** Әгәр сәстәр ағара башлаһа, көн һайын ваҡыты- ваҡыты менән сәс тамырына һығып алынған тумыртҡабаш үләне һутын һөртөргә кәрәк. Был сәс ағарыуын оҙайлы ваҡытҡа кәметер.

**Таҡҡау склероз.** Үләндең 3 балғалаҡ сәскәһен йәки орлоғон (уны көҙ йыйырға мөмкин) бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 1/4 стакан эсергә. Йәки көнөнә 3 тапҡыр һыу менән ҡушып 1 балғалаҡ орлоҡтарын сәйнәргә. Тәьҫире шулай уҡ буласаҡ.

**Дарыу үләне булып һаналһа ла тумыртҡабашты ла белеп ҡулланырға кәрәк. Мәҫәлән, был үләнде йөрәк ауырыуҙарына, инсультҡа йәки тромбофлебитҡа бирешеүсәнлек булғанда ҡулланырға ярамай. Шулай уҡ уны ауырлы ваҡытта ҡулланыу ҡәтғи рәүештә тыйыла.**

**Рим ӘХМӘДОВ.**

БАҠСА

# ЯМҒЫРЛЫ ЙӘЙ...

## мул уңышҡа нигеҙ

**Быйыл баҡсала төрлө йәшелсә үҫтереү өсөн бик ҡулайлы булмаҡсы. Ямғыры ла ваҡытында яуып тора, йәй ҡояшлы көндәре менән дә шатландыра. Хәҙер сәселәһе сәселеп бөттө инде, шулай ҙа баҡсағыҙҙа буш урын ҡалған икән, унда кишер сәсеп ҡуйығыҙ.**

● Мин үҙем кишерҙең орлоғон әллә ни тәрәнгә һалмайым, 2 см тәрәнлек тә етә. Ғөмүмән, башҡа орлоҡтарҙы ла тәрәнгә сәсеү кәңәш ителмәй, сөнки ул саҡта үҫенте оҙағыраҡ сыға. Сәсеп бөткәс, түтәлде түмәр тәгәрәтеп йәки ҡул менән һуҡҡылап, ерен тығыҙлап ҡуям. Һыуҙы кишер шытып, тамыры нығынғансы күп итеп һибәм, ә аҙаҡ түтәл кибеп киткәндә генә һибәм. Быйыл хатта өҫтәп һыу һибеп тороуҙың кәрәге лә булмаҫ, сөнки дымлы ерҙә үҫкән кишер тиҙ сереп бөтә, ҡышҡылыҡҡа һаҡлауға яраҡһыҙ була. Утап, һирәгәйткәндән һуң, һыу һибеп, ерен тигеҙләп ҡуям, шул саҡта асылған тамырҙар ҡояшҡа күренеп, һулып тормай. Тиҙ ашай торғанына һыуҙы күберәк һипһәгеҙ ҙә ярай, шул саҡта ул һутлы, йомшаҡ була. Кишер орлоғо тиҙ иҫкерә, уны ике йылдан артыҡ һаҡлап булмай. Орлоҡто үҙем яһайым. Иртә яҙ менән мөгәрәптә шыта башлаған кишерҙе һайлап алып, йомшаҡ ергә үҫентеһен өҫкәрәк ҡалдырып ултыртам да, һыу һибәм. Көҙ йәйелеп үҫеп ултырған ботаҡты ҡырҡып алып, бер аҙнаға сепрәккә төрөп һалып ҡуям һәм орлоҡтарын тиреп алам. Яңы орлоҡтоң еҫе аңҡып тора, һатып алғанда ошоға ла иғтибар итегеҙ. Кишер янған тиҙәкте яратмай, ә уңдырышлыһыҙ ерҙә насар үҫә. Шуға кишерҙе былтыр күп итеп тиҙәк һалып үҫтергән берәй йәшелсә түтәленә ултыртыу ҡулайлы. Киләһе йыл өсөн кишер сәсеү урынын көҙҙән әҙерләп ҡуям. 80-90 см киңлектәге, 2,5-3 м оҙонлоғондағы түтәлгә бер биҙрә янған тиҙәк, ярты литрлы банка менән көл һалам. Яҙ еткәс был түтәлде яңынан ҡаҙып тормайым, тырматып ҡына сәсәм дә ҡуям. Кишерҙе көҙҙән сәсеп, уңышты иртәрәк алырға мөмкин. Тик яҙын был түтәлдең өҫкө ҡатҡан ҡатламын ипләп кенә алып ташларға кәрәк, югиһә, бар орлоҡтар ҙа уны тишеп сыға алмаясаҡ.

● Ҡышҡылыҡҡа тиген ҡара шалҡанды (редька) 10 июлдә ултыртам. Ҡара шалҡан әллә ни күп кәрәкмәгәс, бер нисә орлоҡ ҡына төртәм дә, һирәкләп һыу һибеп торам.

● Һарымһаҡтың орлоҡ төйнәргә тип ебәргән үҫентеләрен һурып алып сығарыр ваҡыт етте, шулай итмәһәң, һарымһаҡтың төбө эреләнмәй. Был үҫентеләрҙе ашҡа турайым, өҙмәй ҡалдырғандарын орлоғо бешеп еткәс, айырым ергә ултыртам, икенсе йылға һарымһаҡ орлоғо әҙер була.

● Кәбестә үҫентеләренең соҡорҙарын тигеҙләмәҫ борон, 1 биҙрә һыуға 200 г һүндерелгән эзбиз болғатып һибеп сыҡһаң, кәбестә шәбәйеп үҫеп китә. Баҡсаға барған һайын баҡса еләгенең мыйыҡтарын ҡырҡып ташлап торам. Үрсетергә ҡалдырғандарының да беренсе үҫентеһен ҡалдырып, башҡаларын ҡырҡам, сөнки баҡса белгестәре әйтеүенсә, улар көсһөҙ була. Еләктең тамыры өҫтә генә була, шуға уға һыу күп кәрәк. Үҫентеләрҙең тамырын иртә яҙ һәм ул емеш биреп туҡтағас йомшартырға кәрәк. Икенсе йылға уңышты күбәйтәбеҙ тиһәгеҙ, еләктәр емеш биреп туҡтағас та һыу һибегеҙ.

● Алмағастың ботаҡтарына бәләкәй генә шешәләргә креолин һалып, элеп сыҡһағыҙ, осоусы ҡоротҡос бөжәктәр килмәй. Креолин булмаһа, икенсе берәй көслө аңҡыған еҫле шыйыҡса йәки май ҙа ярай.

● Күп йәшелсә-емеш үҫентеләре ҡояшлы урынды ярата, шуға ла баҡса өйөнөң стенаһын аҡбалсыҡ менән ағартып торһағыҙ, уның тирәһендәге үҫентеләргә ҡояш нурын күбәйтеп ебәрерһегеҙ. Һәр үҫенте йылылыҡ, яҡтылыҡ, ашламалы дымлы ерҙе ярата. Һыу һипмәй, утамай, ҡарамай ғына баҡса үҫтереп булмай. Мул уңыш алырға теләһәгеҙ, ҡояш төшмәгән урында баҡса яһамағыҙ, тип йәштәргә кәңәш биргем килә. Ундай урында йәй башында ҡыяр, помидор, борос ҡына түгел, хатта сәскәләр ҙә өшөп, үҫә алмай ултыра һәм һуң сәскә ата. Ыңйы сәскәһе генә ҡояшһыҙ урынды хуп күрә. Пион сәскәһе ашламалы, йылы урында, күп итеп һыу һибеп торғанда ғына матур итеп сәскә ата. Гладиолустың һуғанын ҡыш һыуытҡыстың ишегендәге йәшниктә йәки мөгәрәптә һаҡлайым һәм апрель урталарында тушәлгән сепрәк өҫтөнә ҡояшлы урынға теҙеп ҡуям. Уларҙы май айында иртәрәк ултыртам. Июнь аҙағында-июль баштарында ләлә (тюльпан) сәскәләренең һуғанын ҡаҙып алып, баҡса өйөнә индереп киптерергә һалам. Бер төптә ике-өс һуған булғанын айырырға кәрәк. Һуғандарҙы бөрөмләп ултыртмаһаң, икенсе йылға сәскәләр эре булмай. 3-4 аҙна кибеп яткас, кире ергә сәсеп ҡуям.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

*✓ Аҙаман ирҙең билдәһе - аҙ һөйләр ҙә күп тыңлар, арғымаҡ аттың билдәһе - аҙ уртлар ҙа күп юшар.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# ДОНЪЯ КИМӘЛЕНДӘ...

## башҡорт ҡумыҙының тантанаһы



**Ошо көндәрҙә билдәле ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов "Хомус донъяның мәҙәни киңлегендә" тип аталған VII Халыҡ-ара конгресс-фестивалендә ҡатнашып, донъяның виртуоз ҡумыҙсыһы тигән юғары исемгә лайыҡ булды. Саха Республикаһының (Якутия) Якутск һәм Вилюйск ҡалаларында үткән был сара ЮНЕСКО яҡлауы аҫтында ойоштороло һәм ул үҙенең ҡорона Рәсәйҙең 8 төбәгенән һәм донъяның 22 иленән ҡумыҙҙа уйнаусыларҙы, был музыка ҡоралын пропагандалаусыларҙы, ҡумыҙ яһау оҫталарын йыя. Һөнәрен күрһәтеп, донъяның иң сағыу ҡумыҙсыларының береһе тигән дан алып ҡайтҡан Миңлеғәфүр Миңлеәхмәт улы редакциябыҙға килеп, шатлығын беҙҙең менән дә уртаҡлашты. Артабан һүҙ оҫтаның үҙенә.**

-Бөгөнгө көндә Саха (Якутия) ҡумыҙ иң үҫешкән республикаларҙан һанала. Хомус тип йөрөтөлгән был музыка ҡоралында президент та, бәләкәй балалар ҙа уйнай белә. 2 меңдән ашыу ҡумыҙ һаҡланған донъялағы иң ҙур ҡумыҙ музейы ла был республикала урынлашҡан. Әйткәндәй, был музейҙа Роберт ағай Заһретдиновтың һәм минең ҡумыҙҙарымды ла күрергә була. Ҡумыҙға ҡуйылған һәйкәлдәр күп. Якуттар тағы мине шуныһы менән һоҡландырҙы: уларҙа милли йолалар ныҡ һаҡланып ҡалған. Беҙҙә үткәрелгән "Салауат йыйыны" кеүек "Ыҫыах Туймаады" тип аталған байрамдарына унда йәшәгән бар милләттәр ҙә милли кейем кейеп килә. Осоухай тигән бейеүҙәре бар, ул тормош түңәрәген символлаштыра. Унда барыһы ла бер түңәрәккә тора һәм тотоношоп әйләнә. Ғөмүмән, был байрам борон ҡояш тәңреһе культы менән бәйле булған. Тәбиғәте бик ҡырыҫ булыуға ҡарамаҫтан, халҡы ябай.

Был фестиваль ваҡытында якуттар "Донъялағы иң ҙур ҡумыҙ ансамбле" булараҡ Гиннестар китабына ла индерелде. Унда барыһы 1344 кеше ҡумыҙҙа уйнаны. Беҙҙә ҡурайсыларҙан шундай ансамбль төҙөп, башҡорт ҡурайсыларын да был китапҡа индерергә кәрәк, тигән уйҙар менән ҡайтылды. Ә "Ыҫыах Туймаады" байрамында бер сәхнәлә бер юлы 2 500 кеше ҡумыҙ сиртте.

Был конкурс быйыл етенсе тапҡыр үтте. Сара беренсе тапҡыр 1984 йылда Американың Айова штатында халыҡ-ара кимәлдә үткәрелә, унан һуң ул донъяның төрлө илдәрендә ойошторола. 1991 йылда Яҡутстанда үткән конгресс-фестивалдә Роберт Заһретдинов донъя виртуозы исемен яулағайны, быйыл был ҙур исем миңә лә бирелде. Конкурста һәр ҡатнашыусы үҙенең ҡумыҙында, үҙенең башҡарыу алымдарын ҡулланып уйнай. Икенсенән, ҡумыҙсының сығышы музыкаль булырға тейеш, йәғни, ҡумыҙҙы сиртеп кенә тормайһың, ә көй башҡараһың. Өсөнсөнән, жюри виртуозлыҡ һәм милли кейемгә лә иғтибар итә. Виртуоздарҙан тыш, ҡумыҙ эшләү буйынса ҡатын-ҡыҙҙар араһында махсус конкурстар ҙа үтте.

Башҡа халыҡтарға беҙҙең милли кейем, ҡумыҙҙа уйнау алымдары бик оҡшаны. Роберт ағай менән икебеҙҙе оҫта (һөнәрсе) тип кенә йөрөттөләр. Был сәйәхәттән генә күпме кеше Башҡортостан тураһында ынғай фекерҙә ҡайтып китте. Тәбиғәтебеҙ бай, халҡыбыҙ юғары мәҙәниәтле генә түгел, талантлы ла, шуға беҙгә күберәк ситкә сығырға кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Миңлеғәфүр Зәйнетдиновтың күп һөнәр эйәһе икәнен барыһы ла белә. Уның ҡасандыр милли көрәш һәм ҡумыҙ араһынан икенсеһен һайлауын да ишеткәнем бар. Ихласлығына, көсдәртенә ҡарағанда, ҡумыҙсы Зәйнетдинов ҡына түгел, көрәшсе Зәйнетдинов та юғалып ҡалмаҫ ине. Ул, кәмендә, бөгөн көрәш буйынса донъя чемпионы исеменә лайыҡ булған һәм, иң мөһиме, үҙенең артынан эшен дауам итерҙәй 2-3 мең көрәшсе әҙерләгән булыр ине, ай-һай. Икенсе яҡтан, халыҡҡа файҙа килтереү йәһәтенән ҡарағанда, көрәшселәр былай ҙа етерлек, шуға ла ҡумыҙсы Миңлеғәфүрҙән милләт күберәк отҡандыр, тием. Юғиһә, бөгөн донъялағы 18 виртуоз ҡумыҙсының икәүһе башҡорт үҙамалы, тип ғорурланып ултыра алмаҫ инек, моғайын.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# КЕРНӘКӘҺЕ КИПКӘН,

## йәки эсе үткәшкән

**Төрмәс иренле** - ирене ҡалын, төрөлөп, ярләшергә әҙер тора.
**Нәләт** - кеше тиҙәге, кәрәкмәгән бүлендек.
**Басатун вәғәҙә итә** - маҡтана, күпте вәғәҙә итә, әммә үтәмәй.
**Беҙтояҡ** - бер туктауһыҙ текелдәтеп кенә ҡыҫҡа аҙымдар менән йөрөй.
**Нышыныу** - бер туктамай ашана.
**Шәлперәп төшкән** - һулыған, шиңгән.
**Һурпагүҙ** - күҙенән йәш ҡойола, йонсоу.
**Тызрандап** - ни һөйләрен, ни эшләрен белмәй йөрөй.
**Һаркаш** - эшкинмәгән, үтә яй, әрпеш.
**Үтбәбәк** - күҙе янып, алан-йоланлап тора.
**Кәтмәйгән** - кибеп ҡатҡан, ябыҡҡан.
**Шөкөрәйеп төшкән** - өшөүҙән йә ҡайғынан бөгөлөп төшкән.
**Кернәкәһе кипкән** - аҙыр сиккә еткән, эсе үткәшкән.
**Шиҡандау** - уйнағанда хәрәмләшеү (Байым ауылында әйтәләр).
**Һеңер елкә** - елкәһе йоҡа, ялҡау, эштән ҡаса.
**Сухырҙаҡ** - аңлайышһыҙ итеп ауыҙ эсенән һүҙ бутҡаһы бешерә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һыҡымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЛТЫН ЯНЫНДА...

## тимер ҙә ялтырай

Аҙаман ирҙең билдәһе - аҙ һөйләр ҙә күп тыңлар, арғымаҡ аттың билдәһе - аҙ уртлар ҙа күп юшар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тормошта дүрт төргә ҡараған кешеләрҙе осраттым: ғашиҡтарҙы, үҙ-үҙен генә яратҡандарҙы, битараф булмағандарҙы һәм... алйоттарҙы. Иң бәхетлеләре - алйоттар ине.

**(Ипполит Тэн).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кеше Аллаға ялбара ти: "Йә, Хоҙай, ниңә һин миңә ҡарата шул тиклем ғәҙелһеҙлек күрһәтәһең? Мин һинең ҡолоң, көн-төн һиңә доғаларымды арнайым, әммә фәҡирмен һәм туктауһыҙ бәләгә тарып торам. Ә Алланы белергә лә теләмәгәндәр майҙабалда йөҙә. Ни өсөн шулай ул, Хоҙай?" "Башҡалар һорамай, ә үҙе булдыра" - был кешенән яуған ялыу-зарҙан тамам биҙрәгән Алланың яуабы ошо була.**

**Күпмелер ваҡыт үткән һәм был кеше гел генә Алланан һорарға йә кемдәрҙәндер ярҙамын ғына көтөп ултырырға ярамай икәнен аңлап, үҙ көсөнә таянып йәшәй башлаған, нимәгәлер өлгәшкән дә. Бер ваҡыт ул Хоҙайға ялбарып ултырған бер крәстиәнгә тап була. Крәстиән доғаларына шул тиклем бирелгән була, хатта эргәһендәге баҡсаһына көтөүе менән кәзәләр инеп тулыуын, кәбеҫтәләрен кимереүен дә күрмәй. Кеше крәстиәнгә был хаҡта әйткәс, шундай яуап ишетә:"Мин оҙаҡ йылдар баҡса үҫтерәм, әммә ошо кәзәләр, төрлө бөжәктәр, ҡоролоҡ мин үҫтергән бар уңышты юҡҡа сығара. Хоҙайҙан мине ошо бәләләрҙән ҡотҡарыуын һорап, доға ҡылам, ялбарам..."**

**-Хоҙай һаҡланғанды һаҡлай, ҡотолғанды ҡотҡара, яратҡанды ярата, фатихалыға фатиха бирә, байлыҡҡа ынтылғанды байыта, бәхетлегә бәхет бирә, ҡурҡмағанға ҡыйыулыҡ өҫтәй, - шулай тип һанап китә кеше.**

**-Был хаҡта һиңә кем әйтте?- тип бүлдерә уны крәстиән.**

**-Әлбиттә, Алла!- ти кеше.- Хоҙай йомарт икәнде белгән һәр кем нәмәләр эйә була. Ә инде кем туктауһыҙ зарлана һәм һорануҙан туктамай, уның бер нәмәһе лә булмай. Шуны иҫеңдә тот!**

**Бер йылдан шул уҡ ерҙән үткәндә кеше баяғы крәстиәнде тағы осрата. Ул йәш кәләше менән гөрләп үҫеп ултырған баҡсаһында йөрөй, ә кәзәләр, башҡа малдар ситтәрәк кәртә эсендә утлай. "Һинең менән ни булды?" тип һорай кеше крәстиәндән. "Мин һиңә Алла аҫҡан аҡылдан файҙаландым һәм уңышҡа өлгәштем, - ти крәстиән.- Алла миңә ҡатын бүләк итте, беҙҙең туйыбыҙҙа ҡунағыбыҙ бул, зинһар". Кеше саҡырыуҙы ҡабул итә, сөнки ул Алла аҫҡан аҡыл менән файҙалана белгән кешеләрҙең дуҫлығын бик юғары баһалаған була".**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.



«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5203
Заказ 2626